ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

7-13 март (буранай) 2025

№9 (1153)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ирҙәренә ҡалҡан булып...**



2

**Беҙ тәбиғәт менән бер бөтөн,**

беҙ тел һаҡсыһы булған халыҡ араһында





8-9,15

**Француз яулыҡтан башланды...**



11

**Өлгөләр күктән төшмәй...**



12-13

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Мөхтәрәм йәмәғәт! "Киске Өфө" (индексы ПР905) гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы уҡыусыларыбыҙҙы баҫмабыҙға ваҡытынан алда, 1 февралдән апрелгә тиклем, 2025 йылдың икенсе яртыһы өсөн дә яҙылып ҡуйырға саҡырабыҙ. Хаҡы 971 һум 70 тин. Ә беҙ һеҙҙе рухиәт менән һуғарыуҙы дауам итербеҙ, матур йөкмәтке менән танһыҡтарығыҙҙы ҡандырырға тырышырбыҙ, тигән вәғәҙәбеҙҙе яңыртабыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласаҡ икәне тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

ҠОТЛАУ ҺҮҘЕ

# ҠАТЫН-ҠЫҘ БИТ...

## иҫ киткес ижад емеше!

**Йылдағыса, 8 мартта Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнөн байрам итәбеҙ. Был көндө ир-егеттәр үҙҙәренең әсәйҙәрен, өләсәйҙәрен, ҡатындарын, һөйгән ҡыҙҙарын ҡотларға, уларҙы ниндәй ҙә булһа бүләк, сәскә гөлләмәләре менән ҡыуандырырға ашығасаҡ. Гүзәл зат иһә үҙенә төбәлгән йылы мөнәсәбәт, иғтибар, ихтирам, маҡтау һәм күтәрмәләүҙәр солғанышында ҡаласаҡ. Улар быға лайыҡлы! Ә беҙ, уҡыусыларыбыҙ иғтибарына ошо иҫ киткес матур, тапҡыр, фәһемле риүәйәтте тәҡдим итеп, исмаһам, ошо байрам уңайынан эргәбеҙҙәге гүзәл заттың ысын асылы тураһында уйланайыҡ, улар тураһында 8 мартта ғына түгел, ә һәр көн хәстәрләргә өйрәнәйек, тип әйтмәксебеҙ.**

...Ҡатын-ҡыҙҙы яралтҡан саҡта Хоҙай Тәғәлә бик оҙаҡ, һуңға тиклем эшләй торған булған. Берҙән-бер көндө Унын эргәһенән үтеп барған фәрештә һорай ҡуя:

- Ни өсөн ҡатын-ҡыҙ һынын шул тиклем оҙаҡ эшләйһең, Аллам?

- Ә һин был һындың барлыҡ камиллығын тояһыңмы? - ти Алла. - Ул теләһә ниндәй аҙыҡты ла ашарға, бер юлы бер нисә баланы ҡосаҡларға, үҙенең ҡосағы йылыһы менән бар сирҙәрҙе лә дауалай алырға тейеш. Һәм ошоларҙың барыһын да ул ике генә ҡул менән башҡарасаҡ...

- Ике генә ҡул менәнме? - тип аптырай фәрештә. - Был мөмкин түгел!

- Мөмкин! Ауырыһа, ул үҙен-үҙе дауалаясаҡ. Тәүлегенә 18 сәғәт эшләй аласаҡ... - ти Алла.

Фәрештә ҡатын-ҡыҙ һынына яҡынырaҡ килеп, уға ҡулдары менән ҡағыла һәм:

- Аллам, ә һин бит уны бик нескә итеп яһағанһың... - ти.

- Эйе, ул бик нескә, - ти Алла, - әммә ул бер үк ваҡытта көслө лә. Унын түҙемлелеген, сыҙамлығын һин күҙ алдына ла килтерә алмайһың!

- Ә ул уйлай беләме һуң? - тип һорай фәрештә.

- Ул уйлау ғына түгел, башҡаларҙы һөйләшеп килешеүгә ышандыра белә! - ти Алла.

Фәрештә һындың битенән һыйпап ҡарай һәм, аптырап, шулай ти:

- Аллам, был һындан һыу аға бит. Һин, моғайын, уға артыҡ ныҡ йөк һалғанһыңдыр?

- Был һыу түгел, ә күҙ йәштәре, - тип төҙәтә уны Хоҙай. - Күҙ йәштәре менән ул үҙенең ҡайғыһын, икеләнеүҙәрен, мөхәббәтен, яңғыҙлығын, көйөнөүҙәрен һәм шатлыҡтарын сағылдыра...

Был һүҙҙәр фәрештәгә шул тиклем ныҡ тәьҫир итә һәм ул:

- Аллам, ҡатын-ҡыҙ - ысынлап та иҫ киткес ижад емеше! - тип танырға мәжбүр була. - Унда ирҙәрҙе аптыратырлыҡ көс бар. Ул теләһә ниндәй бәләләрҙе һәм ауырлыҡтарҙы күтәрә белә. Ул - бәхет, мөхәббәт, аңлашыу кәүҙәләнеше лә. Ул ҡыҫҡырғыһы килгәндә көлә, илағыһы килгәндә йырлай. Бәхетле булғанда ла илай, ҡурҡҡанда иһә көлә. Ул үҙе ышанған нәмәләр өсөн көрәшә. Ғәҙелһеҙлеккә ҡаршы бара. Ул ғаиләһенең бәхете өсөн барыһын да эшләй. Унын мөхәббәте бер ниндәй шартлылыҡты ла ҡабул итмәй. Ул балаларының уңыштары өсөн илай. Дуҫтарының уңышына шатлана. Бала тыуғанда, туйҙар булғанда күккә ашҡандай ҡыуана. Ҡайғы ишерелгән мәлдә йөрәге шартларҙай булып һыҙлана. Ләкин һәр ваҡыт үҙендә йәшәүҙе дауам итеүсе көс таба белә. Ул үбеү һәм ҡосаҡлау әрнегән йөрәктәрҙе дауалай ала икәненә ышана...

Унын бары тик бер генә етешһеҙлеге бар: ул үҙенең барлыҡ ошо ыңғай сифаттары тураһында онота...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Байрам ҡотло һәм гүзәл заттарҙың күңелен шатлыҡ-ҡыуаныстар, яҡты өмөттәр, изгелекле мөнәсәбәттәр менән имләрлек булһын! Шул саҡта яҡындарығыҙ ысынлап та үҙенең Аллаһы Тәғәләнең иҫ киткес ижад емеше, илаһи бер йән эйәһе икәнен тойор. Әйҙәгеҙ, иғтибарлы, ихтирамлы булайыҡ уларға. Ҡатын-ҡыҙ донъяны ҡотҡарыр, тигән хәҡиҡәттең һәр заманда ла хаҡ икәнен онотмайыҡ!**

**"Киске Өфө"ләр.**



12+

ЯУГИР ҠАТЫНЫ

**Борон-борондан башҡорт яугиры тыуған ерен яҡлап дошман менән алышҡанда, оҙайлы походтарға сыҡҡанында сая башҡорт ҡатындарының ирҙәренә ҡалҡан булып, йәрҙәрен ҡурсылап-хәстәрләп, ни күрһәләр ҙә улар менән бергә күреп, иңгә-иң терәп, дошманға ҡаршы көрәшкә сыҡҡандары уйлап сығарылған риүәйәт тә, матур әкиәт тә түгел, ә реаль ысынбарлыҡ, тарих хәтере. Ана шул тарихыбыҙҙан ир йөрәкле бик күп ҡаһарман ҡатын-ҡыҙҙарҙың фиҙаҡәрлеге һәм батырлыҡтары хаҡында мәғлүм беҙгә. Шул реаль тарихтарҙың береһен, мәҫәлән, 1847 йылда Өфө Дини семинария уҡытыусыһы Василий Зефиров 1812-1814 йылғы Ватан һуғышы ветераны Йәнтүрә йәйләүенә махсус килеп, уның хәтирәләрен яҙып ала. Йәнтүрәнең ҡатыны ла ул саҡ иҫән була әле. Был яҙмаларҙан белеүебеҙсә, Наполеонға ҡаршы яу сыҡҡас, ҡатыны Йәнтүрәһе менән бергә һуғышҡа китә һәм Мәскәүҙән Парижға барып ингән башҡорт атлылары сафында була. Батырлыҡтары өсөн Йәнтүрәнең ҡатыны ла, башҡа яугирҙар менән бер ҡатар, хәрби миҙалға лайыҡ була.**

# ИРҘӘРЕНӘ ҠАЛҠАН БУЛЫП...





Бына шундай ҡаһарман йөрәкле ҡатындар беҙҙең көндәрҙә лә бихисап. Уларҙың байтағы бөгөн Махсус хәрби операция ғәскәре сафында табиптар, шәфҡәт туташтары, элемтәселәр, снайперҙар һәм башҡа хәрби һөнәрҙәр буйынса ирҙәр менән бергә дошманға ҡаршы көрәшә. Ә бына ире менән яуға бара алмаһа ла, өйҙә йорт-хужалыҡты бағып, балаларын тәрбиәләүсе һәм шуға ҡарамайынса, даими рәүештә МХО барған зоналарға гуманитар ярҙам ойоштороусы, хатта ташыусы ҡатындар шул уҡ Йәнтүрә ҡатыны ише түгелме ни!

Әлиә Мәсәлимова атлы ана шундай ҡатындарҙың береһе Учалы районы Ҡоҙаш ауылында йәшәй. Ире - "Мәсәлим" ҡушаматы йөрөтөүсе МХО яугиры ике йыл инде дошманға ҡаршы көрәшә. Уның бер туған ҡустыһы "Шәйех" тә МХО сафында. Ә Әлиә йорт-хужалыҡты тәртиптә тота, ете бала тәрбиәләй, урындағы совет депутаты, район башҡорттары ҡоролтайы президиумы ағзаһы, ирекмән. Тағы ла ул студент - ситтән тороп вузда юрист һөнәренә уҡый һәм ... ауыл ҡатын-ҡыҙҙарының футбол командаһы капитаны ла!

Был ғәжәп өлгөр, уңған, батыр йөрәкле ҡатын үҙ машинаһында, үҙе рулгә ултырып, яугирҙарға гуманитар ярҙам ташый. МХО зонаһына Әлиә хәҙер алты тапҡыр барып ҡайтҡан. Әлиәнең ата-әсәһе Рәмил Рәүеф улы менән Фәнүзә Вәкил ҡыҙы борсолоп тороп ҡалһалар ҙа, ҡыҙҙарының алыҫ та, хәүефле лә сәфәрҙәренә ҡаршы килмәйҙәр, киреһенсә, ейән-ейәнсәрҙәрен ҡарап, йорт-хужалыҡҡа ҡуҙ-ҡолаҡ булып торалар. Ҡоҙаш ауылынан 20 ир-егет МХО-ла ҡатнаша, уларға кәрәкле бөтөн әйберҙәрҙе йорт-ил менән бергәләп йыйып-төйнәп, Әлиә ана шулай алыҫ сәфәргә юллана. Был юлы 98 менлек "Булат" дронын тотоп алыусы детектор алып барып тапшыра. Был йәнәттән ил яҙмышына битараф булмаған район халҡы, шулай уҡ "Тәүге тирмә" проекты ҡатнашыусылары ут эсендә алышҡан яугир яҡташтарына һәм Әлиәгә ҙур ярҙам күрһәтә.

"Тәүге тапҡыр Луганскиға улы һәм ире шулай уҡ МХО яугиры булған ҡатын менән бергәләп барҙыҡ. Таныш түгел яҡтар, алыҫ юл тәүҙә ҡурҡыта төштө, шуға юлда хатта йүнләп йоҡламаныҡ та тиерлек. Ил сиген үтеү менән беҙҙең телефондарҙан интернет юғалды. Киске ундан бында комендант сәғәте башлана икән. Юлда осраған ауылда бер кеше беҙгә ҡағыҙға тирә-яҡ белмәмәнең планын һыҙып биргәйне, шуның буйынса үҙебеҙгә кәрәкле пунктҡа саҡ барып еттек. Ирҙәребеҙ махсус заданиела булып сыҡты, уларҙы бер тәүлек көтөргә кәрәк булғас, тәүҙә шәхси секторҙа фатир ялларға уйлағайныҡ та, урында йәшәүселәр быны хупламаны: был хәүефле, унан кире сыға алмауығыҙ ҙа ихтимал, тип иҫкәрткәс, Рәсәй техникаһы туҡталҡаһында, үҙебеҙҙекеләр янында туҡтарға булдыҡ.

Сит-ят яҡтарҙа тыуған йортонҙан килеп еткән яҡындарыңды күреү, ата-әсәләренән, ғаиләләренән исемле посылкалар, хат-хәбәр алыу - һалдаттар өсөн әйтеп аңлатҡыһыҙ шатлыҡлы күренеш, уларҙың ҡыуаныусын күреү - миңә лә ҙур һөйөнөс. Егеттәр ышаныслы тыл барлығын тоя, был еңеүгә ышанысты ла нығыта һәм тиҙләтә. Шуға ла унда бер тапҡыр булһаң, шат йөҙҙәрен күреүҙән арыу-талсығыуҙар онотола, улар янына тағы-тағы ла барғы килеп тора. Йыл миҙгеленә ҡарап, яугирҙарыбыҙ төрлө әйберҙәргә мохтажлыҡ кисерә. Бына әле, мәсәлән, уларға резина итектәр һәм йылы эске кейем кәрәк. Ул яҡтарҙа йүнле ҡыш булмай икән, ямғырҙар яуа, тирә-яҡ бысраҡ һәм батҡаҡ. Иремдең полкы Донецкиҙа тора, ул сержант, танк командиры", - тип һөйләй Әлиә Рәмил ҡыҙы.

"Ул яҡтарға барырға ҡурҡытмаймы һуң?" - тигән һорауыма ул: "Юҡ! - тип ҡырт яуап бирҙе. - Әгәр мөмкинлегем булһа, Махсус хәрби операцияла үҙем дә ҡатнашыр инем".

Дөрөҫ, төрлө хәлдәр булып тора юлда. Ғинуарҙа барғанында ирекмәндәрҙең ҡыйратылған машинаһын күреү күңелгә бик ауыр тәьҫир итһә лә, Әлиә был изгелекле сәфәренән баш тартырға йыйынмай: "Минең төп бурысым - яңы быуын, үҙебеҙгә алмаш үҫтереү. Бөгөн беҙҙең башҡарған ғәмәлдәребеҙ киләсәк өсөн эшләй бит, - ти ул. - Изгелек ғәмәлдәрен балаларыбыҙ дауам итергә тейеш. Ғүмерҙәрен аямай илебеҙ азатлығын яҡлаусыларыбыҙға беҙ һәр ваҡыт ышаныслы ҡалҡан була алырға тейешбеҙ".

Әйткәндәй, Мәсәлимовтар тәрбиәһен алып үҫеп килеүсе балалары - Альберт, Эльза, Альфред, Наҙгөл, Эмиль, Нурлан һәм Айрастың киләсәктә ошондай атай һәм әсәй өлгөһөндә илһөйәр һәм ныҡлы рухлы шәхестәр булып өлгәрәүҙәренә шик юҡ. Йәнтүрә һәм уның айырылмаҫ тормош юлдашына тиң батыр һәм изге йөрәкле легендар башҡорт ҡатындары барҙа, беҙҙе бер кем дә еңә алмаясаҡ!

**Гөлназ ВӘЛИУЛЛИНА.**
**"Учалы гәзите"хәбәрсеһе.**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮ ЙЫЛЪЯҘМАҺЫ*

# ЙӨҘЙӘШӘР ИНӘЙ ХӘТИРӘҺЕ



**Иглин районында йәшәгән Рәйфә Насироваға 103 йәш тулды. Район хакимиәте башлығы Гүзәл Насирова социаль селтәрҙәге сәхифәһенә уның менән бер нисә видеояҙма төшөрөп һалған.**

Рәйфә Ғәбдерәүеф ҡыҙы - Бөйөк Ватан һуғышы ветераны. Оло йәштә булыуына ҡарамаҫтан, яңылыҡтарҙы күҙәтеп бара, беҙҙә һәм сит илдәрҙә барған хәлдәр тураһында хәбәрҙар. "Беҙҙең армия көслө. Рәсәй һис еңелмәҫ. Рәсәй Наполеонды, Гитлерҙы еңгән! Ә былар кем, бандеровсылар... Яугирҙарыбыҙға афарин, бирешмәйҙәр", - ти Рәйфә Ғәбдерәүеф ҡыҙы.

Рәйфә Насирова 1942 йылдың 5 майында фронтҡа китә. Һуғыш бөткәнсе зенитсы булып хеҙмәт итә. Еңеүҙе 23 йәшендә ҡаршылай. "Ауыр осор ине. Һуғыш бит. Барыһын да күрҙем. Иптәштәрем һәләк булды. Беҙгә аттылар. Беҙҙең батарея Волгала тора ине. Яраландым. 10 көн Әстерханда госпиталдә яттым. Һуңынан контузия булды. Беҙ барыбер иҫән ҡалдыҡ һәм артабан киттек. Өс йыл һуғыштым", - тип иҫенә төшөрә фронтовик инәй.

Рәйфә Ғәбдерәүеф ҡыҙы һөйләүенсә, фронтта ул корректировщик булған. Совет һәм дошман самолёттарын еңел генә таный, уларҙың типтарын һәм ҡайҙа осоуҙарын билдәләй ала инем, ти. Уның һүҙҙәренсә, фашист бомбардировщиктары айырыуса ҙур хәүеф менән янаған. Ветеран "Фокке-Вульф", "Мессершмит", "Хайнкель" немец самолёттарын һаман хәтерләй. "Сталинградта хеҙмәт итә башлағайным, һуғыш юлын Одессала тамамланым, - тип иҫенә төшөрә Рәйфә Ғәбдерәүеф ҡыҙы. - Сталинград өсөн барған алыштарҙы бер ҡасан да оноторлоҡ түгел. 80 йыл үтте ул йылдарҙан бирле, Мин 100 йылдан ашыу йәшәйем... Шөкөр, юҡҡа йәшәмәнем. Еңдем дә, балаларым да бар. Алты балам, ун дүрт ейәнем, ун һигеҙ бүләм һәм хатта бер тыуамды күрҙем. Ғаиләм ҙур минен!" - тип ҡыуана Рәйфә Ғәбдерәүеф ҡыҙы.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Башҡортостанда 2025 йылдың апреленДә үк урман янғындары сығыу ихтималлығы ҙур. "Авиалесоохрана" учреждеһенең апрель-май айҙарына фаразы шундай. Ул күп йыллыҡ уртаса күрһәткестәрҙе иҫәпкә алып әҙерләнгән. Башҡортостандың Урман хужалығы министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, быйыл республикалағы урман янғындарының майҙаны 3370 гектарҙан артмаҫҡа тейеш. Утҡа ҡаршы көрәшеү өсөн урман янғындарын һүндереү техникаһы һатып алынған. Әле 12 күҙәтеү камераһы эшләй, 1 апрелгә тиклем тағы ла 10-ҙы ҡуланыуға индереү планлаштырыла. Шул рәүешле янғын сығыу хәүефе янаған 2 миллион гектар самаһы урман биләмәһе видеокүҙәтеүгә алына.

✔Рәсәй Президенты Владимир Путин Указына ярашлы, Башҡортостандың "Адаптив спорт үҙәге" спорт мәктәбе тренеры-уҡытыусыһы Ольга Байраковаға - I дәрәжә, "Салауатинвест" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте тренеры-уҡытыусыһы Фәнил Кирәевҡа II дәрәжә "Ватан алдында күрһәткән хеҙмәттәре өсөн" орденының миҙалдары тапшырылды. Башҡортостан Республикаһының ведомствоара йәмәғәт именелге советы секретары Валерий Олейник, Иглин районы хакимиәте башлығы Гүзәл Насирова ла юғары дәүләт наградалары менән билдәләнде.

✔Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров үҙҙәрен Ватанға хеҙмәт итеүгә арнаған яҡташтарыбыҙға Рәсәйҙең һәм республиканың дәүләт наградаларын тапшырҙы. Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың дәүләт наградалары менән бүләкләнеүселәр араһында табиптар, сәнәғәт предприятиелары етәкселәре, аграрийҙар, нефтселәр һәм энергетиктар, тәрбиәүселәр һәм ғалимдар, социаль хеҙмәткәрҙәр, мәҙәниәт эшмәкәрҙәре бар. "Барығыҙға ла илһөйәр һәм берҙәм булыуығыҙ, тыуған республикабыҙ һәм илебеҙ мәнфәғәте өсөн көсөргәнешле хеҙмәтегеҙ өсөн рәхмәт белдерәм. Тап һеҙҙең - үҙ тармағында яҡшыларҙың яҡшылары ярҙамы менән беҙ ышаныслы рәүештә алға барабыҙ", - тине Радий Хәбиров.

✔Башҡортостандың Йәштәр сәйәсәте буйынса дәүләт комитеты министрлыҡ итеп үҙгәртелә, тип белдерҙе Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республика Хөкүмәтендә уҙған оператив кәңәшмәлә. "Йәштәр менән эшләү - беҙҙең төп бурыс. Беҙ ҡасан да булһа вазифаларыбыҙҙы ҡалдырырбыҙ. Беҙҙән һуң йәштәр килә. Улар дәүләткә ҡарата аңлы, асыҡ позиция менән килергә тейеш. Шуға күрә Башҡортостандың Йәштәр сәйәсәте буйынса дәүләт комитетын Йәштәр сәйәсәте министрлығы итеп үҙгәртергә ҡарар иттек", - тип билдәләне Радий Хәбиров. Яңы министрлыҡҡа етәксе итеп Башҡортостандың йәштәр сәйәсәте буйынса дәүләт комитеты рәйесе Вито Сабиров тәғәйенләнә.

ЯУГИР ҠАТЫНЫ

# КӨТӘЛӘР...

**Бөгөн Рәсәйҙә меңәрләгән ғаилә Махсус хәрби операциянан ирҙәренең, улдарының, ағаларының, аталарының ҡайтыуын көтә. Был көтөү уларҙың көндәрен борсолоу һәм өмөт менән тултыра, ә оҙайлы айырылышыуҙар ғәҙәти йәшәү рәүешен үҙгәртә.**

**Балалары менән ҡалған һалдат ҡатындары - ғаиләләре өсөн ысын терәк. Хәрби хәрәкәттәрҙә ҡатнашмаһалар ҙа, уларҙың көрәше лә әһәмиәтле. Был ҡатын-ҡыҙҙар ирҙәренә ярҙам йыя, бер-береһен хәстәрләй һәм балаларын тәрбиәләй. Улар ирҙәренә хаттар яҙа, кисерештәрен уртаҡлаша һәм уларҙың хоҡуҡтары өсөн көрәшә, иң ауыр ваҡытта ла ғаилә беренсе урында ҡалыуын иҫкәртә.**



***БР Дәүләт Йыйылышы депутаты Эльвира Мацкевич һөйләй:***

- Булмышы буйынса ҡатын-ҡыҙҙың бер нисә роле бар. Ҡатын-ҡыҙ-ҡатын, ҡатын-ҡыҙ-әсәй, ҡатын-ҡыҙ-эшсе, бәлки, ҡатын-ҡыҙ-етәксе, офис хеҙмәткәре, ниндәйҙер производствола эшләүсе. Әммә минең тормошомда тағы бер роль бар. Бына 13 йыл мин - тормош иптәшемде полигондан, күнекмәләрҙән, хәрби командировкаларҙан шылтыратыуҙар, хәбәрҙәр көткән, беҙҙең ерҙә тыныслыҡ булыр тип көткән ҡатын-ҡыҙ. Махсус хәрби операция осоронда был көтөү көсәйҙе генә. Был көтөүҙәр егерме йәшендә йәш матур лейтенантҡа кейәүгә сыҡҡан йәш ҡыҙҙан сыҙамлыҡ, аҡыл, ире өсөн ысын ҡәлғә булырға өйрәнгән ҡатын-ҡыҙҙы тәрбиәләне. Беҙҙең егеттәр Махсус хәрби операцияла илебеҙ бөтөнлөгөн һаҡлай һәм бөйөк Рәсәйебеҙҙең бөйөклөгөн арттыра. Тап ошо өмөт мине, Ватан яугирҙары ғаиләләре комитеты төҙөп, уның тирәләй ҡатын-ҡыҙҙарҙы берләштерергә лә өйрәтте. Был - яҡын кешеләрен көткәндәрҙең ҙур берләшмәһе. Был көтөү миңә түҙергә, берләштерергә, алғы һыҙыҡтағы иремдең ҡатыны булырға ярҙам итте. Был көтөү миңә тағы ысын мөхәббәтең нимә икәнен күрһәтте. Мөхәббәт - ул ғашиҡ булыу ғына түгел. Ул - мөнәсәбәттәрҙең икенсе кимәле, ул саҡта һин яратҡан кешең өсөн барыһын да эшләйһең. Һин кешеләргә ғүмереңдә бер ҡасан да булмағанса ярҙам итәһең.



***МХО-лағы хәрби хеҙмәткәрҙең ҡатыны Рәйлә Ишбаева һөйләй:***

- Беҙ ирем Фәнил менән Өфөлә Салауат Юлаев һәйкәле янында танышып ҡауышҡайныҡ, 20 йылдан ашыу бергә йәшәйбеҙ. 2022 йылдың 24 февраль иртәһен хәрби ҡорал канонадаһы аҫтында ҡаршы алдыҡ, шул саҡта Махсус хәрби операция башланыуы тураһында белдек. Ирем - отставкалағы полицейский. Ҡоралды Көстәрҙә хеҙмәт итеү тураһында контрактҡа ҡул ҡуйғанын белдергәс, мин ҡаршы килмәнем. Әгәр ул ҡарар ҡабул итһә, уны мотлаҡ тормошҡа ашырасағын беләм.

Һәм туҡтауһыҙ көтөү башланды. Миңә ғаиләлә ыңғай микроклимат булдырыу һәм һаҡлау мөһим ине, сөнки иремдең көндәлек хәрби бурыстарҙы үтәүе ошоға бәйле. Өйҙә барыһы ла яҡшы булһа, күңелдә лә тыныс һәм беҙҙең яугирҙарға хеҙмәт итеү ауырлыҡ тыуҙырмай. Көслө булыу еңел түгел, ул - үҙ-үҙеңә өҫтөндә даими эшләү. Ауыр көндәрҙә мин һалдаттарыбыҙҙы, уларға хәҙер күпкә ҡатмарлыраҡ икәнен иҫкә алам, ирен һәм улдарын көтөп ала алмаған ҡатын-ҡыҙҙарҙы иҫкә төшөрәм. Уларға нисек? Һәм мин тағы ла тырышыбыраҡ эшләй башлайым, балаларға күберәк иғтибар бирәм, алыҫтан булһа ла минут һайын ирем тураһында хәстәрлек күрәм, минән дә ауырыраҡ хәлдә ҡалған ҡатын-ҡыҙҙарға ярҙам итәм. Шунан һуң мин нисек көсһеҙ була алам, юҡ, булдыра алмайым. МХО-ла ҡатнашыусыларҙың ҡатындары ла шул уҡ хәрби конфликтта ҡатнашыусылар, улар - күҙгә күренмәгән ҡеүәтле фронт яугирҙары...

Әйткәндәй, Рәйлә Ишбаева "МХО-ла ҡатнашыусының ҡатыны" миҙалы менән бүләкләнгән. Наградаһы хәрби командование хәрби хеҙмәткәрҙәргә һәм уларҙың ғаиләләренә ярҙам иткән өсөн ире аша тапшыра.

**Әлфиә ӘҺЛИУЛЛИНА.**

ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

# АШАҒАН ТАБАҒЫНА ТӨКӨРҘӨ...

**Үткән аҙнала АҠШ президенты Дональд Трамп менән Киев режимы башлығы Владимир Зеленскийҙың осрашыуы йәмһеҙ янъял менән тамамланыуын ҡайһы бер экспертар "50 йыл эсендә булмаған сәйәси цунами" тип атаны.**



Украина менән һирәк ҡаҙылмалар буйынса килешеүҙең барып сыҡмаҫы алдан уҡ билдәле ине инде, сөнки Зеленский, кемдер әйтеүенсә, үҙен үсеккән бала һымаҡ тотто: һөйләшеү ваҡытында әләнән-әле Трампты һәм уның ярҙамсыһын бүлдерҙе, репликалар ташланы, сырайын һытты. Үҙенең кейеменә ҡарата Трамптың шаяртып өндәшеүен дә, АҠШ-тың Киевҡа 350 млрд доллар ярҙамы өсөн рәхмәтле булырға тейешлеген дә, Рәсәй менән конфликтты көйләргә ниәте юҡлығын ғәйепләүҙе лә ҡабул итергә теләмәне; Трампты Путинға йөгөнтө яһай алмауҙа, ә һөйләшеүҙә ҡатнашыусы вице-президент Джей Ди Вэнсты фронттағы хәлде белмәүҙә ғәйепләне һәм торабара бәхәс агрессив төҫ алды. АҠШ президенты, ике яҡлы килешеүгә ҡул ҡуйып, шул уҡ ваҡытта Зеленскийҙың утты туҡтатыуын һәм РФ Президенты Владимир Путинды урынһыҙ тәнҡитләүҙәргә сик ҡуйыуҙы талап итергә ниәтләгәйне, планы барып сыҡманы: килешеүгә ҡул ҡуйылманы. "Һеҙ миллиондарҙың ғүмере менән уйнайһығыҙ һәм өсөнсө донъя һуғышы хәүефе тыуҙыраһығыҙ",- тине Трамп Зеленскийға. Ләкин Украина башлығы үҙ һүҙен һөйләне. Һөҙөмтәлә Трамп, Киев режимы башлығының тыныслыҡ яҡлы түгеллеген, ә һуғышты дауам итергә теләүен аңланы һәм әҙәпһеҙ "ҡунаҡ"ты, Украина конфликтын көйләү буйынса һөйләшеүҙәргә әҙер булмауҙа ғәйепләп, Аҡ йорттан ҡыуып сығарырға мәжбүр булды. Сәйәсмәндәр Зеленскийҙың был ҡылығын "Үҙенә ашарға биргән ҡулды тешләне", тип яҙһа, беҙҙең халыҡта бындай осраҡта "Ашаған табағына төкөрҙө", тиҙәр...

Был хәлде анализлап, Axios баҫмаһы эксперттары Зеленскийҙың үҙ-ара һүҙ көрәштереүгә килтергән өс хатаһын әйтеп бирҙе. Беренсенән, Киев режимы башлығы Вашингтонға килмәҫ элек үк Трамп тарафынан тәҡдим ителгән һирәк ҡаҙылмалар буйынса килешеүҙе ҡабул итергә теләмәүен белдергәйне инде. Икенсенән, юғары рәсми осрашыуға килеүенә ҡарамаҫтан, дресс-кодтан баш тартып, үҙенең көндәлек "униформа"һында булыуы Аҡ йорт вәкилдәренә ҡарата хөрмәт күрһәтмәү тип баһаланды. Өсөнсөнән, йыйылған журналистар алдында вице-президент Вэнс менән тупаҫ әрепләшеүе Аҡ йорт вәкилдәрен сығырынан сығарҙы. Ҡыҫҡаһы, был хәл Киев режимының тыныслыҡ теләмәүен күрһәтте лә инде.

Шуныһы ҡыҙғаныс, әллә ҡыҙыҡтырмы - Трамп менән Зеленский арһындағы был конфликт бөтөнләй көтөлмәгән икенсе төрлә ҡараш та тыуҙырҙы: РФ Финанс университеты эксперты, сәйәси конфликттар белгесе, сәйәсмән Денис Денисов фекеренсә, был янъял Аҡ йорт хакимиәте тарафынан алдан планлаштырылған сценарий булыуы бик тә ихтимал. Денисов әйтеүенсә, ысынында иһә Трамп журналистар һәм камералар күҙәтеүе аҫтында бындай һөйләшеүгә бармаҫ та ине. Ә хәҙер бөтөн донъя шаулаясаҡ. Һөҙөмтәлә Трамп Украина мәсьәләһендә еңел генә "кулын йыуа аласаҡ", йәғни бер юлы ул бер нисә ҡуянды үлтерә: Украина өсөн бөтөн яуаплылыҡты, финанслау һәм башҡа ярҙамды Европа елкәһенә ауҙара. Киевтан баш тартыу өсөн хәҙер Трамптың 100 процентҡа ныҡлы дәлиле бар. Икенсенән, Аҡ йорт хужаһының хәҙер Рәсәй Федерацияһы менән һәүетемсә аралашыуына мөмкинлек тыуа. Украинаның килешеүгә һәләтһеҙлеген күрһәтеп, ул Рәсәйҙең компромисҡа барыуына өлгәшергә итәсәк, тип фаразлай сәйәсмән.

Аҡ йорт хәҙер Зеленскийҙың ғәфү үтенеүен көтә, тиҙәр. Ә Зеленский: "Улар үҙҙәре миңә ташланды, минең ғәйебем юҡ", - тип бара икән. Уның ҡарауы, Аҡ йорттан хурлыҡлы рәүештә сығып китеү менән Зеленский самолетына ултырып, тура Лондонға - үҙенең яҡлаусыһы һәм бағыусыһы Кир Стармер янына оса. Уныһы быны ҡосаҡлап ҡаршы ала һәм хәленә йыуатып, Киевты ярҙамдан ташламаясағы хаҡында белдерә һәм оборона ихтыяждарына 3,2 млрд доллар кредит бирергә вәғәҙәләй. Әйткәндәй, Британия сәйәси күҙәтеүсеһе Александр Меркурис Зеленскийҙың үҙен Аҡ йортҡа алдан уҡ ыҙғыш сығарыуға ниәтләнеп килеүҙә ғәйепләй, сөнки ул һирәк ҡаҙылмалар буйынса килешеүгә ҡул ҡуйырға теләмәй.

АҠШ-тың һирәк металдар ресурсдары менән етди ҡыҙыҡһыныуының үҙ сәбәптәре бар, сөнки был яҡтылыҡтарға контроллек итеүсе ил технологик лидерлыҡҡа һәм суверенитетҡа эйә буласаҡ. Был металдарһыҙ бөгөн киләсәк юҡ. Телефонда ниндәй юғары технологиялы етештереү һәм яһалма интеллект (ИИ) ошо металдар менән бәйле. Мәҫәлән, Илон Макстың бер генә проекты ла һирәк осраусы ошо элементтарһыҙ мөмкин түгел. Һәм, гөмүмән, бөгөн смартфондар, планшеттар, электромобилдәр, самолеттар, медицина техникаһы етештереү өсөн, шулай уҡ оборона сәнәғәте һәм тағы күп нәмәләргә һирәк металдар кәрәк. Әлеге ваҡытта һирәк металдар ресурсы буйынса лидер - АҠШ-тың төп көнәркәше Ҡытай. Төрлө сығанаҡтар буйынса, ошо элементтарҙы донъя етештереүенең 60-90 проценты ҠХР-ға тура килә. Ҡытайҙан ҡала икенсе урында - Рәсәй, ләкин беҙҙә ул әҙ табыла, йылына ни бары 2,6 мең тонна. Киләсәктә Рәсәй был тармаҡты үҫтерергә уйлай, ләкин был эштә партнерҙар ярҙамына, сит ил инвесторҙарына мохтаж. Шуға күрә лә Рәсәй һирәк металдар табыуҙы үҫтереү һәм һатыу буйынса АҠШ менән хеҙмәттәшлеккә шат буласаҡ.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә республика Башлығы Радий Хәбиров яңы сауҙа һәм хеҙмәттәр министры Азат Асҡаров менән таныштырҙы. Республика етәксеһе һүҙҙәренсә, ул "тынаҡ, ләкин бик ныҡышмал кеше". "Азат Асҡаров беренсе урынбаҫар ҙа булды, уның сит илдәрҙә эш тәжрибәһе бар - Үзбәкстанда сауҙа вәкиле булып эшләне", - тине Хәбиров. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, республиканың элекке сауҙа министры Алексей Гусев йәмәғәтселек башланғысында Башҡортостан Башлығының бизнес менән үҙ-ара эш итеү мәсьәләләре буйынса кәңәшсеһе итеп тәғәйенләнде.

✓БР Башлығы Радий Хәбиров иң яҡшы коммерцияға ҡарамаған баҫсасылыҡ ширҡәттәренә республика етәксеһе гранттары сертификаттарын тапшырҙы. Бүләкләү тантанаһы баш ҡаланың Конгресс-холл майҙансығында IV "СМАРТ-баҡсасы" халыҡ-ара форумында уҙҙы. Ҡырмыҫҡалы районының "Урман яланы", Шишмә районының 3-сө "Йоматау", "Өршәк 4" (Өфө), "Аҡманай яҙыусылар баҡсалары" (Шишмә районы), "Росинка" (Краснокама районы), "Асыҡ аҡлан" (Иглин районы), "Козарез" (Өфөнөң Дим районы), "Орфей" (Өфө) һәм башҡалар 500 мең һум алды. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2025 йылдан баҡсасылыҡ ширҡәттәренә ярдышар миллион һумлыҡ 20 грант тапшырыла.

✓Башҡортостанда Фәнни-технологик үҫеш буйынса дәүләт комитеты булдырылды. Дүшәмбе Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә республика Башлығы Радий Хәбиров тейешле указға ҡул ҡуйыу тураһында белдерҙе. "Беҙ иҡтисад үҫешен фән ҡаҙаныштары менән тәрәнерәк берләштереү тураһында әйтә килдек, - тип билдәләне Радий Хәбиров. - Беҙгә шуның өсөн яуаплы булған үҙаллы орган кәрәк. Эш күләме ҙур. Беҙҙә кампустың икенсе сираты төҙөлә, Евразия ғилми-етештереү үҙәге әүҙем эшләй. Ул фән ҡаҙаныштарын бер урынға туплап, производствоға һәм бизнесҡа индереү үҙәге булып тора. Дәүләт комитеты етәксеһе вазифаһына кандидатура бар, ләкин Радий Хәбиров был турала һуңыраҡ хәбәр итергә вәғәҙәләне.

✓Сибайҙа туған телдә автор йыры республика конкурсының финал этабы уҙҙы. Башҡортостандың Йәштәр сәйәсәте буйынса дәүләт комитетынан хәбәр итеүҙәренсә, конкурста Урал аръяғы ҡалалары һәм райондарынан эстрада һәм һәүәҫкәр йырсылар ҡатнашты. Учалы районынан Сәмиғулла Лоҡманов еңеүсе тип танылды, Хәйбулла районынан Наҙгөл Ултыраҡова икенсе урынға лайыҡ булды, Әбйәлил районынан Рәмил Баястанов өсөнсө урынды алды. Профессиональ жюри һәр ҡатнашыусыға кәңәштәр бирҙе, һәр береһе сертификат менән бүләкләнде. Конкурс призерҙарының иҫтәлекле бүләктәр һәм башҡарыусыларҙың композициялары өсөн "Юлдаш" эфирында ротация мөмкинлеге бирелде.

ҠЫҪҠАСА

# ИҢ ШӘБЕН ҺАЙЛАЙҘАР!

**Башҡортостандың баш ҡалаһында 35-се тапҡыр "Йыл уҡытыусыһы" конкурсы үткәрелә. Уҡытыусылар араһында ойошторолған сираттағы һөнәри бәйге 25 февралдә башланды.** Шул уҡ ваҡытта "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" төбәк-ара конкурсына старт бирелде. Республиканың Мәғариф министрлығы хәбәр итеүенсә, быйыл "Башҡортостандың йыл уҡытыусыһы" конкурсына 148 ғариза килгән, уларҙың 23-ө "Туған тел һәм әҙәбиәт уҡытыусыһы" конкурсында ҡатнаша. Уҡытыусыларҙың ниндәй фәндән белем биреүе һәм хеҙмәт стажы мөһим түгел. Уның барышында "Туған тел һәм әҙәбиәт йыл уҡытыусыһы" конкурсын үткәреү айырым йүнәлеш булып тора. "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" төбәк-ара конкурсында 55 башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, шул иҫәптән Силәбе өлкәһенән ике педагог һөнәри белем биреү ойошмаларынан ике башҡорт теле уҡытыусыһы ҡатнаша. Ҡатнашыусылар асыҡ дәрестән башлап министр менән һөйләшеүгә тиклем төрлө конкурс һынауҙарында үҙҙәрен күрһәтергә тейеш. Башҡортостандың иң яҡшы уҡытыусыһының исеме 14 мартта билдәле була.

✓ **2025 йыл Рәсәйҙә мәғариф системаһында Балалар ялы йылы билдәһе аҫтында уҙғарыла. Был хаҡта Рәсәй Мәғариф министрлығының матбуғат хеҙмәте хәбәр итә.** Рәсәй мәғариф министрының беренсе урынбаҫары Александр Бугаев ҡул ҡуйған документтан күренеүенсә, 2025 йылда илдә вожатыйҙарҙы әҙерләүҙең берҙәм системаһы булдырыла һәм тәрбиә эшенең федераль программаһы раҫлана. "Рәсәй" вожатыйҙар отряды семинарҙарында, вожатыйҙар фестивалендә һәм ялды ойоштороусылар форумында белгестәр тәжрибәләре менән уртаҡлаша. Тематик йылдың саралар планында шулай уҡ "Артек" халыҡ-ара балалар үҙәгенең 100 йыллығы, "Орлёнок" Бөтә Рәсәй балалар үҙәгенең 65 йыллығы, "Смена" Бөтә Рәсәй балалар үҙәгенең 40 йыллығы айҡанлы юбилей тантаналары бар. Бынан тыш, Балалар ялы йылында лагерҙарҙа Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 80 йыллығына арналған тематик көндәр ойошторола. Хәбәр иткәнебеҙсә, ике йыл эсендә Башҡортостандың балалар лагерҙарында 11 яңы корпус төҙөлгән.

✓ **Рәсәй граждандары антын 14 йәштән бирә башлайҙар. Илдең Дәүләт Думаһы депутаттары тейешле закон проектын беренсе уҡыуҙа ҡабул итте.** Дәүләт Думаһы спикеры Вячеслав Володин билдәләүенсә, "Рәсәйгә килгән һәм ошо илдең гражданы булырға теләгән кеше беҙҙең закондарҙы үтәргә, традицияларҙы, мәҙәниәтте, тарихты белергә тейеш". "Беҙ йөкләмәләр индерәбеҙ. Антты, беҙҙең закондарҙы боҙһалар, уларҙың ауырлығына ҡарап, дәүләт гражданлығынан мәхрүм итеү тураһында ҡарар ҡабул итә. Был уйланылған, төплө ҡараш. Беҙ граждандарыбыҙҙың ихтыярын тормошҡа ашырабыҙ", - тине Вячеслав Володин. Антта граждан Рәсәй Федерацияһы Конституцияһын һәм ҡануниәтен, уның граждандарының иркен һәм хоҡуҡтарын үтәргә, мәҙәниәтен, тарихын һәм йолаларын ихтирам итергә, шулай уҡ илдең азатлығын һәм бойондороҡһоҙлоғон яҡларға вәғәҙә бирә. Бынан алдараҡ Министрҙар кабинеты анттан баш тартҡан осраҡта Рәсәй Федерацияһы гражданлығын бирмәскә тигән идеяны хуплауы тураһында хәбәр иткәйне.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ВЕТЕРАНҒА...

**Ил Хөкүмәте Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 80 йыллығы уңайынан бер тапҡыр бирелә торған түләүҙәр өсөн 23,3 миллиард һумдан ашыу аҡса йүнәлтә. Тейешле бойороҡҡа ҡул ҡуйылған.**

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Рәсәй Президенты Владимир Путин Еңеүгә 80 йыл тулыу айҡанлы 1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарына йәки уларҙың тол ҡатындарына бер тапҡыр бирелә торған түләү тураһындағы указға ҡул ҡуйғайны. Фронтовиктарға, фронтовиктарҙың тол ҡатындарына, оборона ҡоролмалары төҙөгән, ПВО объекттарында, диңгеҙ һәм авиация базаларында эшләгән граждандарға, блокадалы Ленинградта йәшәүселәргә, шулай уҡ концлагерҙарҙың бәлиғ булмаған тотҡондарына - 80 мең һум, тыл хеҙмәтсәндәренә һәм концлагерҙарҙың бәлиғ булған тотҡондарына 55 мең һум түләнә. Михаил Мишустин Хөкүмәт ултырышында бер ниндәй ҙә өҫтәмә ғариза бирергә кәрәкмәүен әйтте. "Министрлыҡтар һәм ведомстволар үҙаллы эшләй. Был кешеләр ауыр һынауҙарҙы үткән, ҡан ҡойошло һуғышты күргән. Улар хаҡында хәстәрлек күреү - дәүләттең төп бурыстарының береһе", - тине Мишустин.

Башҡортостанда әле 120 Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусы һәм инвалид, Бөйөк Ватан һуғышы осоронда бәлиғ булмаған 44 концлагерь тотҡоно һәм алты меңдән ашыу тыл хеҙмәтсәне йәшәй. Был тураһа ғинуар айында республиканың ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ленара Иванова хәбәр итте.

# ӘСӘЛЕК КАПИТАЛЫН...

**Башҡортостанда быйылдан башлап Әсәлек капиталы аҡсаһын торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға йүнәлтеү ҡағиҙәләре үҙгәрҙе. Хәҙер бының өсөн Рәсәйҙең Социаль фонды бүлексәһендә күсемһеҙ милектең торошо тураһында белешмә талап ителә.**

Республика Социаль фондының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, Әсәлек капиталы иҫәбенә торлаҡ һатып алырға мөмкин, ләкин ул йәшәргә яраҡлы тип табылған һәм торлаҡҡа ҡуйылған талаптарға тап килгән осраҡта ғына. Бындай документы муниципалитеттарҙа булдырылған ведомство-ара комиссиялар бирә. Әҙер йорт йәки уның бер өлөшөн һатып алырға була. Бинаны баһалау милексенең ведомство-ара комиссияға яҙған ғаризаһы буйынса башҡарыла, ғаризаны ҡарау ваҡыты - 30 көн. Баһалау процедураһы һәм өйҙәң талаптарға тап килеүе тураһында һығымта биреү бушлай. Һығымта алғандан һуң сертификат хужаһы Социаль фонд бүлексәһенә Әсәлек капиталы аҡсаһын тотоноу тураһында ғариза тапшыра ала. Әйткәндәй, торлаҡ мәсьәләләрен хәл итеү Әсәлек капиталын файҙаланыуҙың иң популяр йүнәлештәренең береһе булып ҡала. 2024 йылда Башҡортостанда 17,5 мең сертификат хужаһы аҡсаны торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға йүнәлткән. Бынан алдараҡ Рәсәйҙә Әсәлек капиталы программаһын 2030 йылға тиклем оҙайтыу хаҡында хәбәр ителгәйне.

# ЗООПАРКЫ ЛА БАР УНЫҢ!

**Башҡортостан Республикаһының Архитектура советы ултырышында Урмансылар паркында буласаҡ Өфө зоопаркы проекты тәҡдим ителде.**

Былтыр декабрь башында республика Башлығы Радий Хәбиров Өфөнөң буласаҡ зоопаркы хаҡында белдергәйне. Ул Урмансылар паркында хәҙерге вольерҙар урынында урынлашасаҡ. Төҙөлөштөң дөйөм майҙаны яҡынса 12 гектар тәшкил итәсәк. Проектҡа ярашлы, Өфөнөң яңы зоопаркы өс зонаға бүленәсәк. Беренсеһендә йыртҡыс хайуандар менән вольерҙар, артабан йорт хайуандары менән контактлы зоопарк буласаҡ. Улар араһында ветеринар клиника, мал аҙығы һаҡлағысы, зоопарк хакимиәте һәм башҡа бер-нисә хеҙмәт бинаһы менән хужалыҡ блогы урынлашасаҡ. Зоопаркҡа Сәғит Агиш урамы яғынан инеү планлаштырыла, унда шулай уҡ автопарковка барлыҡҡа киләсәк. Проектланған биләмәлә бөтәһе 47 вольер төҙөләсәк, улар 96 хайуанды аҫрауға иҫәпләнгән, шул иҫәптән беҙҙең төбәк өсөн экзотик хайуандарҙың булыуы ла күҙ уңында тотола. Зоопаркты бер үк ваҡытта 270 кеше ҡарай аласаҡ.

Проекттың үҙенсәлеге - ул Башҡортостан тәбиғәтенең 17 иҫтәлекле урынын - Ғәҙелша шарлауығын, Киндерле мәмерйәһен, Алһыу ҡаяларҙы һәм башҡа тәбиғәт ҡомартҡыларын стилизацияһы тергеҙеү. Әлеге ваҡытта проект-эҙләнеү эштәре дауам итә, ул дәүләт экспертизаһы үтергә әҙерләнә. Төҙөлөш сметаһы әлегә билдәләнмәгән һәм проект тулыһынса раҫланғандан һуң, уның күләме билдәле буласаҡ. Зоопаркты төҙөүгә бюджеттан аҡса бүленәсәк, ә эштәрҙең башланыу ваҡыты финанслауҙың ҡасан бүленеүенә бәйле.

# ҠАТЫН-ҠЫҘҒА - 60 ЙӘШТӘН...

**Рәсәй Закон сығарыусылар советы Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы әҙерләгән "Страховка пенсияһы тураһында"ғы Федераль закондың 5-се ҡушымтаһына үҙгәрештәр индереү тураһында" Федераль закон проектын хупланы һәм уны Дәүләт Думаһына индерергә тәҡдим итте. Был хаҡта республика парламентының матбуғат хеҙмәте хәбәр итте.**

Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев әйтеүенсә, закон проекты дәүләт һәм муниципаль идаралыҡта эшләгән ҡатын-ҡыҙҙарҙы пенсия менән тәьмин итеүгә ҡағыла. Был категория хеҙмәткәрҙәренең пенсия хоҡуҡтары сикләнеүе асыҡланды. 2023 йылдан илебеҙҙә ҡартлыҡ буйынса страховка пенсияһы ир-егеттәргә 65 йәштән, ҡатын-ҡыҙҙарға 60 йәштән тәғәйенләнә. Шул уҡ ваҡытта "Страховка пенсиялары тураһында" Федераль закондың 5-се ҡушымтаһында юғарыла аталған ҡатын-ҡыҙҙар категорияһы өсөн пенсияға сығыуҙың башҡа йәше билдәләнгән: 2024 йылда - 61 йәш, 2025 йылда - 62 йәш һәм 2026 йылдан башлап - 63 йәш. Бындай хәл РФ Конституцияһына ҡаршы килә, ул йәш буйынса социаль тәьминәтте гарантиялай һәм вазифалы хәленә һәм башҡа шарттарға ҡарамаҫтан, кеше һәм гражданиндың хоҡуҡтары һәм азатлыҡтары тигеҙлеген иғлан итә. Башҡортостан депутаттары был норманы ҡайтанан ҡарарға тәҡдим итте. Шулай итеп, закон проекты ҡатын-ҡыҙҙарға - дәүләт һәм муниципаль хеҙмәткәрҙәргә ҡартлыҡ буйынса страховка пенсияһын 63 йәштә түгел, ә 60 йәштә тәғәйенләү хоҡуғын күҙ уңында тота.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓1 апрелдән социаль пенсиялар 14,75 процентҡа арттырыла, тип хәбәр итә ТАСС агентлығы Дәүләт Думаһының бюджет һәм һалымдар буйынса комитеты ағзаһы Никита Чаплинға һылтанма менән. Индексация Рәсәйҙә йәшәгән 3,5 миллионға яҡын кешегә, шул иҫәптән Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарына, блокадасыларға, радиация һәм техноген һәләкәттәр ҡорбандарына ҡағыла.

✓Иглин районы Үктәй ауыл советының Һарт-Лабау, Меңйетәр, Үктәй, Келәш ауылдарында фельдшер-акушерлыҡ пункттары төҙөлә башланы. Был хаҡта муниципалитет башлығы Гүзәл Насирова хәбәр итте. 2024 йылда ауыл ерендә республиканың фельдшер-акушерлыҡ пункттары һәм табип амбулаториялары өсөн 130 тиҙ ҡоролған модулле конструкциялар урынлаштырылды. Башҡортостанда фельдшер-акушерлыҡ пункттары селтәре - илдә иң ҙурҙарҙың береһе. Һуңғы йылдарҙа республикала уларҙы яңыртыу йәһәтенән алға китеш күҙәтелде. 2010-2018 йылдарҙа 53 учреждение төҙөлһә, 2019-2024 йылдарҙа иһә - 480-гә яҡын.

✓Башҡортостан энтузиастары командаһы Heart of Ural ("Урал йөрәге") башҡорт эпосы буйынса компьютер уйыны эшләй. Проекты Юғары уҡыу йорттары араһындағы студенттар кампусы резиденты - Өфө фән һәм технологиялар университеты тормошҡа ашыра. Интерактив этно-уйын геймерҙарҙы башҡорт мифологияһы һәм республиканың тәбиғәт ҡомартҡылары менән таныштырасаҡ. Сюжет буйынса төп герой - башҡорт ҡыҙы - илдең мифтары һәм легендалары буйлап сәйәхәт итә. Урал батырҙың мажаралары тураһында хикәйәләр төп ориентир булып тора.

✓Мутлашыусылар тоҙағына ҡабыуҙар дауам итә. Федоровка районынан бер водитель билдәһеҙ номерҙан килгән хәбәргә ышана. Әңгәмәсе үҙен водитель эшләгән компанияның генераль директоры тип таныштыра. Ирҙе, һинең иҫәбеңдән икенсе дәүләтте финанслайҙар, тип ҡурҡыта һәм ярҙам тәҡдим итә. Ә бының өсөн аҡсаны "хәүефһеҙ иҫәпкә" күсерергә кәрәк була. Ауыл кешеһе бурысҡа батып, кредит алып, аферистарға 1,6 миллион һумдан ашыу аҡса күсерә. Ҡат-ҡат иҫкәртәбеҙ - ышанмағыҙ теләһә кемдәргә, аҡсағыҙҙы күсермәгеҙ билдәһеҙ иҫәптәргә!

✓Әбйәлил ерендә "Металлург" хоккей клубының билдәле йондоҙҙары менән хоккей матчы үткән. Хәйриә матчын билдәле хоккейсы Егор Яковлев ойоштора. "Металлург" хоккей клубы йондоҙҙары - Сергей Мозякин, Василий Кошечкин, Егор Яковлев, Илья Набоков, Егор Коробкин, Илья Афонин, Кристиан Ленешмидт Әбйәлилдең йәш хоккейсылары менән уйнай. Райондан 44 балаға - МХО-ла ҡатнашыусыларҙың балаларына билдәле чемпиондар менән боҙҙа хоккей уйнау мөмкинлеге бирелә.

*ФЕКЕРЕБЕҘ ШУНДАЙ*

# ЯУГИРҘАРЫБЫҘ КЕҮЕК...

## файҙа килтерерҙәй идарасылар кәрәк

**Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар өсөн "Башҡортостан геройҙары" кадрҙар проекты старт алды. Гәзит уҡыусыбыҙҙы маҡсаты МХО яугирҙары араһынан яңы быуын идарасылар әҙерләү булған программа тураһында фекерҙәр менән таныштырабыҙ.**




***Ильяс БАТЫРГӘРӘЕВ, блогер, хәрби хәбәрсе:*** Махсус хәрби операция ветерандары ысын мәғәнәһендә лидерҙар булараҡ илдә танылыу яуланы һәм, РФ Президенты Владимир Путин билдәләүенсә, улар йәмғиәтебеҙ элитаһы. Минә Махсус операция зонаһында үҙебеҙҙең егеттәр менән бик күп аралашырға тура килде һәм, беләһегеҙме, уларҙың тормошҡа булған ҡараштарын күреп, күңелдә ғорурлыҡ хисе уяна. Хәрбиҙәр киләсәккә өмөт менән баға, үҙ көстәренә ышана һәм, мине иң ғәжәпләндергәне - улар тыныслыҡ, ғәҙеллек һәм яуаплылыҡ хаҡын баһалай белә. "Геройҙар заманы" федераль программаһы һәм күптән түгел Радий Хәбиров иғлан иткән "Башҡортостан геройҙары" республика программаһына старт бирелеү тәжрибәле хәрбиҙәр иҫәбенән идара итеү кадрҙарын әҙерләүҙә өҫтәмә стимул буласаҡ. Проект улар-ға йәмғиәтте үҫтереүҙә һәм уның мәнфәғәттәрен яҡлауҙа ҡатнашыу өсөн кәрәкле белем нигеҙҙәре һәм күнекмәләр бирәсәк.

***Борис ДУДКО, Рәсәй Геройы:*** Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар һәм уларҙың ғаиләләре тормошонда әүҙем ҡатнашлыҡ итә. Хәбриҙәр 2022 йылдан бирле гуманитар ярҙам ала, республикала уларҙың яҡындары өсөн тиҫтәләгән ярҙам саралары ғәмәлдә. Радий Фәрит улы һүҙҙәре менән әйткәндә, күп милләтле республикабыҙ лайыҡлы граждандар тәрбиәләгән, улар хәҙер Ватаныбыҙҙы һаҡлауҙа фиҙаҡәр күрәшә. Улар енеү менән ҡайтыр һәм илебеҙ именлеге, уның үҫеше хаҡына тыныс хеҙмәтләрен артабан дауам итер, тип ышанам. Йәмғиәтҡә халҡыбыҙ тормошона тап беҙҙең яугирҙарыбыҙ кеүек файҙа килтерерҙәй идарасылар кәрәк тә инде.

***Павел САМОЙЛИН, Рәсәй Ҡораллы көстәре хәрби хеҙмәткәре, "Ҡайтыр" исемен йөрөтә:*** Бындай программалар дүрт миллионлы халҡы булған Башҡортостан өсөн айырыуса ҙур әһәмиәткә эйә. Был программалар республика иҡтисады, шулай уҡ дәүләт һәм муниципаль идара ихтыяждары өсөн кадрҙар әҙерләүҙә ҙур ярҙам, тип уйлайым. Махсус операция фронтында хәрби хеҙмәткәр тәртипкә һәм яуаплылыҡ тойғоһона өйрәнә. Үҙенең граждандыҡ һәм хәрби бурысына тоғролоғон, илһөйәрлеген иҫбат итеп, ил мәнфәғәттәре һәм тыуған илебеҙ өсөн ысын мәғәнәһендә изге ҡанын түгеп, иң ғәзизе булған ғүмерен дә хатта фиҙа ҡылырға әҙер хәлдә иҫбат итә, батырлыҡтар күрһәтә. Мин үҙем дә 12 йыллыҡ дәүләт хеҙмәте тәжрибәһен үткән кешемен. Әгәр минең белемем һәм тәжрибәм дәүләт һәм муниципаль кимәлдә кәрәк тип табыла икән, был өлкәлә лә бөтә көсөмдө биреп эшләргә әҙермен.

***Айҙар ШӘЙӘХМӘТОВ, Миңлегәли Шаймуратов исемендәге батальон командирының хәрби-сәйәси эш буйынса урынбаҫары, "Шаман" исемен йөрөтә:*** Әгәр кеше тыуған ере өсөн хатта ғүмерен дә бирергә әҙер икән, тимәк, ул дөрөҫ рухи ҡиммәттәр мөхитендә тәрбиәләнгән, һәм ул тыныс тормошҡа ҡайтҡас та Ватаныбыҙ үҫеше өсөн йәнен-тәнен йәлләмәйәсәк.

Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусы беҙҙең егеттәргә республикабыҙ эшмәкәрлегенең төрлө тармаҡтарын ышанып тапшырырға мөмкин. Беҙҙең яугирҙар һүҙ һәм намыҫ баһаһын белә, сөнки улар Ватанға тоғролоҡтарын ҡайнар ҡанын түгеп иҫбатлай.

***Азат САҘРЫЕВ, БСТ телеканалының хәрби хәбәрсеһе:*** Махсус операция биләмәләренә барған саҡтарҙа мин илебеҙҙең йөҙәрләгән ысын патриотын күреп һөйләшкәнем бар. Уларҙың күбеһе Рәсәй мәнфәғәттәрен яҡлап, йортона бәлә килмәһен өсөн үҙе теләп фронтҡа киткән. Башҡортостан батырҙары, Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында дошман менән алышҡан ата-бабалары кеүек үк, илебеҙ азатлығы, уның суверенлығы хаҡына һәм, әлбиттә, ғаиләһе, тыуған йорто именлеген һаҡлап, ғүмерен аямай көрәшә. "Башҡортостан геройҙары" республика программаһы Ватаныбыҙ һаҡсыларының мөмкинлектәрен һәм ут эсендә ныҡыған тәжрибәләрен тыныс хеҙмәттә файҙаланырға юл асасаҡ. Кисәге яугирҙар өсөн был кадрҙар программаһы уларҙың идара итеү талантын, амбицияларын бойомға ашырырға ярҙам итәсәк.

*ҮӘТ БИТ ӘЙ!*

# ИРҘӘР РИЗАЛАШМАЙ



**Өфөлә ирҙәрҙең 54 проценты ҡатын-ҡыҙҙарҙан 5 йылға һуңыраҡ хаҡлы ялға сығырға риза түгел. Баш ҡаланың иҡтисади яҡтан әүҙем халҡы араһында үткәрелгән Һорау алыу һөҙөмтәләре менән SuperJob порталы уртаҡлашты.**

Тикшеренеүҙәрҙән күренеүенсә, һәр икенсе ир-егет хаҡлы ялға һуң сығыуҙы дискриминация тип иҫәпләй. Шул уҡ ваҡытта гүзәл заттарҙың 25 проценты ғына бындай позиция менән ризалаша - улар "Ирҙәр ҡатын-ҡыҙҙарҙан алда үлә, уларҙың эше физик көсөргәнеш менән бәйле һәм 65 йәшкә тиклем һаулығы ҡалмауы ихтимал", тип иҫәпләй.

Һәр икенсе ҡатын-ҡыҙ ир-егеттәрҙең пенсияға һуңлап сығыуын дискриминация тип иҫәпләүгә ҡаршы. Улар, гүзәл зат физик яҡтан көсһөҙөрәк, эшкә, магазинға барыу, бөтә ғаиләгә киске, төшкө һәм иртәнге аш әҙерләү, бала менән дәрес әҙерләү, кер йыуыу, өй йыйыштырыу, ғаиләгә беренсе медицина ярҙамы күрһәтеү, дауалау һәм ҡарау, тегеү, ғаиләнең бухгалтер эшен алып барыу бурысын үтәй. Был дәлилдәрҙе ир-егеттең 35 проценты ғына уртаҡлаша, ти.

Әйткәндәй, республикала ир-егеттең ғүмер оҙайлығы - 67, ә ҡатын-ҡыҙҙың - 78 йәш.

**Иван ВАВИЛОВ.**

*ҠЫҪҠАСА*

# АРТАБЫҘ!

**Йыл һайын Өфө 5-6 мең кешегә арта, тип хәбәр итте Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров баш ҡала Советы ултырышында.** Шуға бәйле республика етәксеһе яңы мәктәптәр, поликлиникалар һәм башҡа социаль инфраструктура тәҙеүҙең мөһимлеген билдәләне. "Өфө составына ингән һәм уның өлөшө булып торған алыҫ биләмәләрҙе лә үҫтерергә кәрәк. Беҙҙең юл, транспорт инфраструктураһын үҫтереү буйынса мәсьәләләр һәм проекттар күп. Өфө даими рәүештә яҡшы яҡҡа үҙгәрергә тейеш. Йыл һайын яңы йәмәғәт биләмәләрен төҙекләндерергә, торлаҡ-коммуналь инфраструктураны яҡшыртырға, социаль объекттар төҙергә, ғүмүмән, йәшәү сифатын күтәрергә кәрәк. Ошо йәһәттән беҙҙә эш алып барыла, уға Өфө хакимиәте, Башҡортостан Хөкүмәте йәлеп ителгән", - тине Хәбиров.

✔ **9 майҙа Өфөлә Башҡортостан яугирҙары Махсус хәрби операция барышында ҡулға төшөргән НАТО илдәренең трофей техникаһы күргәҙмәһе ойошторола.** Был турала Радий Хәбиров баш ҡала Советының 48-се ултырышында белдерҙе. Шулай уҡ ул Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 80 йыллығы көнөндә хәрби парад булыуы тураһында ла хәбәр итте. Бынан алда республика етәксеһе ветеран-фронтовиктарға "1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүгә 80 йыл" тигән юбилей миҙалын тапшырҙы. 2025 йылда үҙенең 100 йәшлек юбилейын билдәләргә әҙерләнгән Сафуан Басиров, шулай уҡ түңәрәк датаны ҡаршылаған Родин Лобанов һәм Геннадий Филинов республика етәксеһе ҡулынан ошо награданы алды. Баш ҡалабыҙҙа йәмғеһе 1487 Бөйөк Ватан һуғышы ветераны Еңеүҙең 80 йыллығы хөрмәтенә юбилей миҙалына лайыҡ булды.

✔ **Март айында Башҡортостанда йәшәүселәр көслө геомагнит дауылдары йоғонтоһонда була.** Рәсәй Фәндәр академияһы Йыһан тикшеренеүҙәре институты һәм Ҡояш-ер физикаһы институты белгестәре иҫкәртеүенсә, 7-һенән Ерҙә көслө геомагнит дауылы башлана, ул көндән-көн көсәйә бара. Иң юғары нөктә март уртаһына һәм аҙағына, яҡынса алғанда, 15-17 һәм 28-31 мартҡа тура килә. Дауыл 25-се ҡояш циклының иң юғары нөктәһенә бәйле, Ҡояшта көслө ҡабыныуҙар һәм плазманың бүленеп сығыуы көтөлә. Ҡояштың әүҙемлеге спутниктарҙың, элемтәнең һәм энергия селтәрҙәренең эшендә сағылыш табыуы, шулай уҡ һаулыҡҡа йоғонто яһауы ихтимал. Геомагнит дауылдары ваҡытында баш ауыртыуы, ҡан баҫымының күтәрелеүе, хәлһеҙлек күҙәтелә. Айырыуса оло йәштәгеләргә һәм хроник сирлеләргә хәүеф нығырай янай.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✔Башҡортостан Башлығы Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһе барышында нефть эшкәртеү заводында янғынды һүндереүҙә ҡатнашыусыларға рәхмәт әйтте. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, был эшкә 100 янғын һүндереүсе һәм 28 берәмек техника йәлеп ителде. Башҡортостан етәксеһе, янғын БПЛА һөжүменән һуң башланған, тигән хәбәрҙе лә кире ҡаҡты. Бынан алдараҡ Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы Өфө нефть эшкәртеү заводында сыҡҡан янғындың технологик процестарға бәйле булыу ихтималлығы тураһында хәбәр иткәйне.

✔Өфө егете Искәндәр Булатов фехтование буйынса Европа беренселегендә бронза призеры булды. Был хаҡта Башҡортостан Хөкүмәтенең вице-премьеры - спорт министры Руслан Хәбибов үҙенең телеграм-каналында хәбәр итте. Фехтование буйынса Европа беренселеге Төркиәнең Анталья ҡалаһында үтте.

✔Өфөлә "Башҡортостан уҡытыусыһы" журналы 105 йыллыҡ юбилейын билдәләне. Баш мөхәррир Салауат Кәримов һөйләүенсә, журналдың тәүге һаны 1920 йылдың февралендә Стәрлетамаҡта "Мәғариф эштәре" исеме аҫтында донъя күрә. 1924 йылдың февралендә журнал Өфөгә күсә һәм "Белем" исеме менән сыға башлай. 1931 йылдың октябренән "Мәҙәниәт революцияһы" тигән атама ала. Хәҙерге атамаһы иһә 1936 йылдың майында бирелә. "Башҡортостан уҡытыусыһы" бөгөн мәғариф хеҙмәткәрҙәре өсөн өҫтәл китабы булып тора. Республикала гәзит-журналдарыбыҙ алты телдә нәшер ителһә, "Башҡортостан уҡытыусыһы" журналы туғыҙ телдә донъя күрә, был уның полимәҙәни булыуы хаҡында һөйләй.

✔Өфөнөң "Торатау" Конгресс-холында "СВОЯ семья" ғаилә форумы уҙҙы. Уның төп ҡатнашыусылары - ғаиләләр. Улар балалар тәрбиәләү, уларҙың һаулыҡ һәм үҫтереү мәсьәләләре буйынса тәжрибә уртаҡлашты. Форумда күп тематик иждаи майҙансыҡтар ойошторолдо. Шулай уҡ сарала балалы ғаиләләргә ярҙам күрһәтеүсе ойошмалар ҡатнашты.

✔Башҡортостанда респиратор инфекциялар менән сирләү осраҡтары арта бара. Уҙған аҙнала республикала 28,7 мең кеше ауырыу йөкторған, уларҙың яртыһы - 14 йәшкә тиклемге балалар. Шуның менән бергә 64,3 процент осраҡта грипп диагнозы ҡуйылған. Башлыса гриптың А А (H1N1) вирусы өҫтөнлөк итә. Уҙған ете көн менән сағыштырғанда сирләүҙәр 2,5 процентҡа арткан, тип хәбәр итте Роспотребнадзор.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

*✓ Президенттарҙы, премьер-министрҙарҙы ҡатын-ҡыҙҙар араһынан һайлап алырға кәрәктер. Ошолай булһа, бәлки, Ер йөҙөндә тыныслыҡ урынлашыр, һуғыштар тыныр, донъя кимәлендә үҫеш-яңырышҡа киң юл асылыр ине.*

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Сипылдауыҡ**

**(Степная тиркушка)**



Барҡылдаҡ ҙурлығында, ҡойроғо йәйенке, ҡанаттары оҙон, осҡанында кереллдәк йәки сарҙаҡ, ҙур ҡарлуғасҡа оҡшап тора. Муйыны - аҡ, ҡара һыҙат менән ҡаймаланған. Ҡанаты аҫтан ҡарағанда ҡара төҫтә. Тиктормаҫ, ныҡ тауышланып йөрөгән ҡош. Ҡош туйы ваҡытында ата сипылдауыҡ һауала тирбәлеп, ҡатмарлы фразаны ҡабатлай: "тье-тье-тье-тьек", унын араһында сипылдай, исеме лә шунан алынған.

Ер шарының бөтөн ерендә лә осрай, дала һәм ярым даланы үҙ итә. Башҡортостанда иһә һирәк, осоп үтеп барышлай туҡтап ҡына китә торған төр. 1897 йылда ғалим П.П. Сушкин уны Өфө һәм элекке Бәләбәй өйәҙе тирәһендә осратыуы тураһында яҙып ҡалдырған. Биолог В.Г. Ершов сипылдауыҡты Ишембай районында яңғыҙ ҡоштарҙы күреүе, ә тотош тубы менән оя ҡороп йәшәүсе ҡоштарҙы 1964 йылдың 16 июнендә Өфө эргәһендәге Аҡҡош күле янында тап итеүе хаҡында хәбәр итә. В.Е. Фомин 5-7 пар сипылдыҡты Бәләкәй Үләнде күлендә күрә, ҡоштар күл янындағы баҫыуҙа, яңы ғына күтәрелеп килгән бойҙай үҫентеһе араһында оя ҡорған булған. Беҙ иһә сипылдауыҡты 1965 йылдың майында Әбйәлил районының Бөрсөнсө күлендә осраттыҡ. 2005 йылда В.А. Валуев ояһында бер йомортҡаһы булған был ҡошто Хәйбулла районы Маҡан һыуһаҡлағысы ярында видеоға төшөрөп алды. Ул ояһынан ят кешене ситкә алып китергә тырыша ине.

Май уртаһында осоп килә. Ҡуйы үләнле ерҙәрҙә, йылға һәм күл ярҙарында, балсыҡлы урындарҙа оя ҡора. Ояһы ябай ғына, ныҡ тәрән түгел. 4 йомортҡа һала, ҡайһы саҡта 3 йәки 5-кә етә. Йомортҡаларҙы яҡынса 18 көн баҫа.

Туҡланыуы - дала бөжәктәре, уларҙы һауала ла, ерҙә лә тота. Саранча баҫҡан саҡта сипылдаҡ улар менән туҡлана һәм арттарынан күсеп йөрөй. Август урталарында йылы яҡҡа ҡуҙғала. Африкала ҡышлай.

Һирәк төр булараҡ, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың Ҡыҙыл китабына индерелгән.

Ырымбурҙа элегерәк ялан сипылдығы (луговая тиркушка) ла осрай ине.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары"**
**китабынан.**
**(Дауамы бар).**

БАЙРАМ УҢАЙЫНАН...

**Фани донъябыҙҙы ике башланғыстан - ата һәм инә затлы тереклектәрҙән башҡа күҙ алдына ла килтереп булмай. Был - ерҙә хасил булған һәм күпләп таралып киткән йән эйәләренең күпселеген юҡҡа сығармау мөмкинлеген биргән төп фактор. Ошо ике башланғыс хатта ки үҫемлектәр донъяһына ла хас бит…**

# УЛАР ПРОГРЕСС АМБАССАДОРҘАРЫ БУЛЫРМЫ?



Кешеләр донъяһына, йәғни йәмғиәткә һәм дәүләткә килгәндә, ир-аттар һәм ҡатын-ҡыҙҙар араһындағы мөнәсәбәттәр күпкә ҡатмарлыраҡ. Сөнки был мөнәсәбәттәр башҡа йән эйәләренән аңлы һәм үҙаңлы, хис-кисерешле булыуы менән айырыла. Шул уҡ ваҡытта ирҙәр һәм ҡатын-ҡыҙҙарҙың биологик айырымлыҡтары беренсел булған хәлдә лә, уларҙың тормош-көнкүреше, йәшәйештәге функциялары, йәмғиәттә тотҡан урыны, ижтимағи халәте, социаль-психологик һыҙаттары үҙҙәре йәшәгән мөхит тарафынан билдәләнә. Һәр хәлдә, үтә боронғо дәүерҙәрҙән бирле ир-ат - беренсе, ҡатын-ҡыҙ икенсе урынға ҡуйыла килә.

Иң әүәл, беҙҙең дәүерҙәрҙән бик алыҫта, тәү тормош эпохаһында ырыу-ҡәбиләләрҙең йәшәйешендә ҡатын-ҡыҙҙарҙың төп роль уйнауы хаҡында ғилми хеҙмәттәр булыуына иғтибар итәйек. ***Ул ҡоролош матриархат тип атала, сөнки кешеләрҙең нәҫел-нәсәбе, туғанлыҡ мөнәсәбәттәре әсәләр линияһы буйынса билдәләнгән. Икенсерәк итеп әйткәндә, ҡатын-ҡыҙҙар - әсәләр, инәйҙәр, уларҙың инәләре һәм уларҙың алдараҡ йәшәгән быуындары - ҡәбиләне хасил итеүсе, берләштереүсе, бер туғандар төркөмөнә туплаусы ролен үтәгән.*** Әгәр ҙә тәүтормош ҡоролошо замандарында яҙма булып, шәжәрә төҙөү ихтыяжы булһа, ошондай силсилә тик ҡатын-ҡыҙ исемдәренән ғибәрәт булыр ине.

Матриархат дәүерендә һәр кем үҙенең әсәһен белгән, ә атаһының кем булыуы иҫәпкә алынмаған. Айырым, парлы ғаиләләр барлыҡҡа килгәнгә тиклем, нәҫел ҡалдырыу, ҡәбиләне ишәйтеү ихтыяжын ҡатын-ҡыҙҙар үтәгән һәм, әлбиттә, ҡауышыу өсөн улар иң көслө, иң ҡыйыу, иң йылғыр ир заттарын һайлап алған. ***Беҙгә хәҙер нисек кенә сәйер тойолмаһын, ҡәбиләлә барса ир-атҡа ла "атай" була алыу мөмкин булмаған, сөнки сибек-сырхауҙар быңдай "хоҡуҡ"тан мәхрүм ителгән.*** Был ул замандарҙа ҡәбилә башында торған ҡатын-ҡыҙҙар даими һәм теүәл үтәй килгән биологик ҡанун, сөнки ҡырағай йәнлектәрҙең нәҫел үрсетеүе шул уҡ ҡанун менән көйләнеүен кемебеҙ ҙә белә.

Әйткәндәй, XX быуат этнологтарының Океания утрауҙарында көн иткән аборегендар йәмғиәтендә үҫмер малайҙарҙы ир ҡорона индереү һынауҙары уҙғарылыуы хаҡында ғилми мәҡәләләре бар. Улар билдәләүенсә,малайҙарҙың физик көсөн, йылғырлығын, мәргәнлеген, сыҙамлылығын һ.б. ошондай сифаттарын баһалау маҡсатында ойошторолған "Ирлек имтиханы"н тейешле кимәлдә үтә алмаған ир-ат һуңынан өйләнеү хоҡуғынан мәхрүм ителгән, улар ҡәбиләлә барса ғүмере буйына "малай" ролендә йәшәргә дусар булған икән...

Уҡыусыларыбыҙҙың иғтибарын бына нимәгә йүнәлдермәксемен: ижтимағи прогресс һөҙөмтәһендә ир-атты үҙ балаларының атаһы иткән социаль феномен - ул да булһа ишле ғаилә. Әгәр ишле ғаилә хасил булмаһа, ир заттарының үҙ ғаиләһендә баш булыуы ла, тотош ырыу-ҡәбилә кимәлендә өҫтөнлөклө урын алыуы ла мөмкин булмаҫ ине. ***Тимәк, патриархат ҡоролошон булдырыусы төп фактор - ул ишле ғаилә. Ошо бөйөк социаль һынылыш ир затын быға саҡлы күрелмәгән бейеклеккә күтәрә.***

Ә ҡатын-ҡыҙҙар һуң? Ә уларға тәбиғәт агрессивлыҡ, сиктән тыш ҡаршы тора алыусанлыҡ кеүек сифаттарҙы һалмаған. Быуаттар дауамында ҡатын-ҡыҙ ғаиләлә генә түгел, тотош йәмғиәттә икенсел урындан башҡаға дәғүә итмәҫлек рәүештә тәрбиәләнә башлай. Йәмғиәттә, унан бигерәк дәүләт ҡоролошонда ир-ат һис бер кире ҡағырлыҡ булмаған сифаттар менән һүрәтләнеп һәм баһаланып, ғаилә-ырыу-ҡәбилә-халыҡ менән идара итә алыусы берҙән-бер затҡа әйләндерелә...

***Әйтергә кәрәк, ҡатын-ҡыҙҙарҙың йәмғиәттәге статусын ир ҡатыны, балаларын ҡараусы-тәрбиәләүсе әсә, йорт хужабикәһе функциялары менән генә сикләүгә ҡарамаҫтан, бик боронғо замандарҙа ла сибәрлеге, аҡылы, һәләттәре менән фараон, кесарь, батша, хан исемдәрен йөрөткән ир-аттарҙы ла арбарлыҡ, әүрәтерлек ҡатындар була.*** Улай ғына ла түгел, ошондай ҡатын-ҡыҙҙар дәүләт иерархияһында бик юғары вазифалар биләй алыуға өлгәшә. Боронғо Мысыр батшабикәһе Нефертити хаҡында мәктәп уҡыусылары ла белә. Ул ҡояш илаһы Атонға табыныусы фараон Эхнатондың (Аменхотеп IV, б.э. тиклем 1354 - 1330 йылдар тирәһе) ҡатыны була, ире вафат булғас, унын тәхетен биләй. Икенсе бер Мысыр батшабикәһе Клеопатра (б.э. тиклем 69 - б.э. тиклем 30 йылдар) тәүҙә Рим кесаре (батшаһы) Гай Юлий Цезарь, һуңынан полководец Антоний ярҙамында ике тиҫтә йыл самаһы ил менән идара итә.

Рәсәй тарихында ла байтаҡ ҡына күренекле ҡатын-ҡыҙҙар булыуы билдәле. Уларҙың тәүгеһе - Киев Русенең бөйөк кенәзе Игорь Рюриковичтың ҡатыны Ольга, 945 - 960 йылдарҙа улының, йәшкә бәләкәй Святославтың регенты булараҡ, дәүләт менән үҙе идара итә. X быуат аҙағында - XI быуат башында бөйөк кенәз Владимир Святославовичтың ҡатыны, Византия императоры Василий II һеңлеһе Анна Византийская рус халҡын христиандарҙың православие диненә дүндереү өсөн күп көс һала. Шулай уҡ Рәсәй империяһының киң билдәле батшабикәләренән Петр Беренсенең бер туғанының ҡыҙы Анна Иоановнаны, үҙенең ҡыҙы Елизавета Петровнаны, Екатерина II атап үтергә кәрәк. Елизавета Петровна хакимлығы осоронда Рәсәйҙә мәғрифәткә, мәҙәниәткә, сәнғәткә күберәк иғтибар ителә, башланғыс мәктәптәр, гимназиялар асыла, Мәскәү университетына һәм Сәнғәт академияһына нигеҙ һалына, император театры эшләй башлай. Архитектор Растрелли Петербургта Ҡышҡы Һарайҙы төҙөтә, унын архитектура стиле Елизавета бароккоһы, тип атала башлай.

XX быуатта донъяның байтаҡ ҡына илдәрендә, шул иҫәптән Рәсәйҙә лә, уҡымышлы ҡатын-ҡыҙҙар фән, сәнғәт, әҙәбиәт, мәҙәниәт һәм мәғрифәт, медицина һәм спорт, техника өлкәләрендә генә түгел, сәйәсәттә киң танылыу таба: Клара Цеткин, Роза Люксембург, Надежда Крупская, Долорес Ибарурри, Мария-Склодовская Кюри, Айседора Дункан, Галина Уланова, Фаина Раневская, Любовь Орлова, Вера Мухина, Валентина Терешкова, Марина Цветаева, Анна Ахматова, Александра Пахмутова, Ирина Роднина, Мать Тереза, Индира Ганди, Беназир Бхутто, Маргарет Тэтчер, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарынан Рабиға Ҡушаева, Шәрифә Тимерғәлина, Һәҙиә Дәүләтшина, Зәйнәб Биишева һ.б. Был исемлеккә бөгөн меңәрләгән ҡатын-ҡыҙҙы индерергә булыр ине.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**XXI быуат ҡатын-ҡыҙҙары яңы бейеклектәргә ынтыла, йәшәйешебеҙҙең һәр өлкәһендә алдынғылыҡҡа өлгәшә, асыштар яһай, йәмғиәтте һәм дәүләтте прогресс юлынан тайпылдырмаҫ өсөн ир-аттарҙан кәм эшләмәй. Бер быуаттан аҙ ғына элегерәк ҡатын-ҡыҙҙарҙы ирҙәр менән тиң хоҡуҡлы итеү өсөн көрәш башланғайны, ул әлеге көндә хатта "феминизм" тип аталған сетереклe тәғлимәтте һәм ғәмәлиәтте хасил итте. Һуңғыһына социаль баһа бирергә иртәрәктер әле. Шәхсән үҙемдең бер фекерем бар: сәйәсәткә, фирҡәләр, илдәр, дәүләттәр менән идара итеүгә ҡатын-ҡыҙҙарҙы күберәк йәлеп итеү, хатта ил башлыҡтарын - президенттарҙы, премьер-министрҙарҙы ҡатын-ҡыҙҙар араһынан һайлап алып, махсус рәүештә ошондай иң юғары вазифаларға әҙерләү программаларын булдырырға кәрәктер, тим. Ошолай булһа, бәлки, Ер йөҙөндә ныҡлы тыныслыҡ урынлашыр, һуғыштар тыныр, донъя кимәлендә үҫеш-яңырышҡа киң юл асылыр ине, тип хыялланам.**

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

# ЫРЫМБУР ГУБЕРНАТОРҘАРЫ ҺӘМ БАШҠОРТТАР

## (Генерал-майор И.В. Чернов яҙмаларынан)



**Генерал Владимир Афанасьевич Обручев**

**(1842 - 1851 йылдарҙа Ырымбур губернаторы булған)**

Генерал Обручевтың төбәк менән идара итеү буйынса билдәле бер программаһы булмай. Уның төбәкте үҫтереү һәм яҡшыртыу маҡсатында ойошторолған барса сараларын осраҡлы тип әйтеп була. Төбәк медицина йәһәтенән дә ярлы ине, станицаларҙа медиктар бөтөнләйгә булманы, әммә ошондай әһәмиәтле етешһеҙлеккә иғтибар ителмәне.

Төбәктә ҡырғыҙ далаларынан һәм Себерҙән таралған ҡороҡкос мал ауырыуҙары һис туҡтамай барҙы, был урындағы халыҡҡа бик ныҡ зыян килтерә ине.

Станицаларҙа йәшәгән казактар һаулығына иғтибар итмәй, Обручев батша ғали йәнәптәренән Ҡаҙан университетының ветеринар бүлегендә ғәскәр иҫәбенә 10 стипендия бүлеүҙе үтенә, ошо рәүешле әҙерләнгән ветеринарҙарға дөйөм медицина курсына күсеү тыйыла. Обручев казак ғәскәрендә һәм башҡорттарҙа табиптар урынына фельдшерҙарҙы файҙаланыуҙы уңайлыраҡ тип иҫәпләй; ошо маҡсатта Ырымбурҙа эшләп килгән фельдшерҙар мәктәбе ҙурайтыла; унда казактар капиталы иҫәбенә 40 кеше уҡытыла; һуңынан уның өсөн хәҙергә тиклем һаҡланып ҡалған таш бина һалына.

Обручевты ғәҙел баһалау өсөн Ырымбурҙағы бер генә учреждениеның да уның шәхси күҙәтеүенән ситтә ҡалмауын күрһәтеп була. Төшкө аш ваҡытында кадет корпусына барып, унда тәрбиәләнеүселәр өсөн әҙерләнгән ашты үҙе тәмләп ҡарай, әгәр ул ҡәнәғәтләнерлек булмаһа, экономды саҡыртып килтерә һәм бик ныҡ итеп шелтәләй. Обручев ҡул аҫтындағыларҙың эш боҙоуҙарын һәр саҡта ла ваҡытында белеп тора. Шулай бер көндә ул үҙенең йорто янында тапанып торған кантонсыны күреп ҡала, уның үҙенә нимәлер әйтергә теләүен аңлап, шул кеше янына сыға һәм уға ни кәрәклеген һорай. Тегеһе иртәгәһе көндә кантонсылар йортонан (унда хәҙер 2-се кадет корпусы) эконом киндерен, буҫтау һәм күн тауарҙарын алып китәсәктәре хаҡында белдерә. Обручев иртәгәһенә шунда үҙе бара һәм бурҙарҙы эләктерә. Батальон командиры, майор Сплодринский отставкаға ебәрелә.

Обручев Ырымбурҙа линия батальондары һалдаттарының дивизия начальнигы, генерал-лейтенант Толмачевтың имениеһынан һатыуға килтерелгән тәмәкене тартыуҙарын белеп ҡалғас, бер батальон командирына ошо тәмәкене килтереп күрһәтергә бойора. Батальон командиры, майор Чигирь, элегант кеше булараҡ, ябай халыҡ ҡулланған барса нәмәгә сикәнеп ҡарай, шулай ҙа корпус начальнигына ике пачка япраҡлы тәмәке-махорка алып килә. Обручев быны үҙенең бөтә нәмә хаҡында белеп тороуын күрһәтер өсөн эшләй.

Йәйге кистәрен Обручев йыш ҡына ординарецы - урядник йә иһә унтер-офицер менән ҡала буйлап йөрөй. Ҡаршыһына осраған чиновниктарҙы эшлекһеҙ булыуҙары өсөн әрләп, шелтәләп тә китә, ә ҡайһы саҡта уларҙы айырмай һәм тейешһеҙ һүҙҙәр һөйләй. Бер ваҡыт разводтан һуң ул, отставкалағы офицерҙы күреп ҡалып, уны үҙенең янына саҡырып ала һәм, күптән түгел өйәҙ буйлап йөрөгәнендә почта юлдарының үтә насар хәлдә булыуын иҫенә төшөрөп, был офицерҙы ныҡ итеп әрләргә тотона. Әрләнеүсе үҙенең юл эштәре менән идара итмәүе хаҡында әйтә. Обручев уның земство исправнигы түгел, кадет корпусы экономы икәнен һорап белеү менән, уны тағы лы яманыраҡ итеп шелтәләй башлай: ул корпусҡа һуңғы тапҡыр барған саҡта бында етешһеҙлектәрҙең бик күп булыуын күрә, ә эконом өйөндә булмай.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы бар).**

*ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...*

# ӨФӨ-II ҠАЛАСЫҒЫНА - 1500 ЙЫЛ

## Башҡорт ҡалаһы: ыңғай һәм кире фекерҙәр



Көнсығыш Европаны берҙәм дәүләткә берләштергән Алтын Урҙа дәүерендә уның территорияһы буйлап сәйәхәт итеү быға тиклем булған быуаттарға ҡарағанда киң тарала. Батый батшалығына бөтөн донъянан сауҙагәрҙәр килә, ә генуэз негоцианттары Урҙала йәнлек тиреһе һәм бик күп сауҙа фактураһы табыуға концессияға эйә була. Күрәһең, тап уларҙың мәғлүмәттәре буйынса 1367 йылда бер туған Пициганиҙарҙың картаһы барлыҡҡа килә. Унда Кама йылғаһынан көньяҡ-көнсығышҡа табан "таҙа яланда" Пашкерти ҡалаһының пунсоны (шартлы билдәһе) күрһәтелә. Ваҡыт үтеү менән уның урынлашыу урыны асыҡлана. 1375 йылға Каталон атласында атап үтелгән ҡала Ағиҙел тип күҙалланған йылғаның һул яҡ ярында күрһәтелә. Пашкерти тағы ла аныҡыраҡ итеп билдәле фламанд картографы Герард Меркаторҙың картаһында күрһәтелә. Ул тап хәҙерге Өфө - Ағиҙел менән Ҡариҙел ҡушылған ерҙә урынлашҡан.

Меркаторҙың атласы 1595 йылда, автор вафат булғас, донъя күрә. Әммә уға ингән карталар XVI быуаттың 30-70-се йылдарында, йәғни 1586 йылда рус ҡәлғәһе Өфө барлыҡҡа килгәнгә тиклем төҙөлә. Шулай итеп, Меркатор бер нисек тә Пашкертиҙы рус Өфөһө менән бутай алмай. XIV быуаттың ғәрәп ҡамуссыһы Ибн Халдун, Алтын Урҙаны һүрәтләп, былай ти: "Үрҙә Сыңғыҙхан ошо дәүләткә нигеҙ һалыусы, уның Душы-хан (Джучи) исемле улы бар һәм ул батша, тип белдерелгәйне. Был батшалыҡ төньяҡта Хорезмдан Яркенда, Соғда, Һарайға, Маджар, Арран, Сарҙаҡ (Судак), Булғар, Башкурд һәм Джулманға тиклем. Был батшалыҡтың сигендә Ширван ҡалалары араһында Баҡы һәм уның эргәһендә Демир Капу (Дербент) тип аталған тимер ҡапҡалар бар".

Нияз Мәжитов фекеренсә, атап үтелгән пассажда Башҡорт ҡалаһы, йәғни көнбайыш Европа карталарындағы Пашкерти ҡалаһы телгә алына. Урта быуаттарҙа ҡаланың этник өҫтөнлөклө халыҡ атамаһы буйынса йөрөтөлөүе ғәжәп түгел. Волга Булғарының баш ҡалаһы ул ваҡытта Булғар тип аталыуын иҫкә төшөрөү ҙә етә. Ул ваҡыттағы биләр ырыуының Биләр тип аталған ҡалаһы була. Хәҙерге сыуаштарҙың ата-олаталары булған сувар ырыуының Сувар тигән ҡалаһы була. Мордва-мокшаларҙың Мокша ҡалаһы була. Н. Мәжитовтың оппоненттары сығанаҡтарҙа биләмә түгел, ә Башҡортостан тигән географик атама тураһында һүҙ бара, тип, Башҡорт ҡалаһының булыуын инҡар итә. Уларҙың кеме хаҡлы икәнен ваҡыт күрһәтер. Әммә Урта быуатта Башҡортостанда ҡалаларҙың, шул уҡ Намджан ҡалаһы булыуы факты - шикһеҙ. Шулай уҡ Өфө-II ҡаласығы урынында борон ҡала булыуы ла шик тыуҙырмай. Ул нисек аталғандыр - Ҡараҡаймы, Башҡортмо, Түрә-таумы йәки Өфөмө - артабанғы тикшеренеүҙәр предметы булып тора. Уның сәскә атыу осоро VII-XII быуаттарға тура килә. Монгол баҫмасылығы һөҙөмтәһендә ҡала яйлап бөтә бара. Һуңғы һөжүмде уға 1389 йылда Башҡортостан буйлап ут һәм ҡылыс менән үткән Тамерлан яһай.

**Салауат ХӘМИҘУЛЛИН.**

**(Дауамы бар).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 79*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Берлин стратегик һөжүм итеү операцияһында

Офицерҙар составына ҡараған яугирҙар юғарыраҡ торған командование бойороҡтары менән бүләкләнә. 1-се Белорус фронты командующийының 1945 йылдың 30 июнендәге бойороғона ярашлы, I дәрәжә Ватан һуғышы орденена лайыҡ булыусылар: гв. майоры Фаттахов Ибраһим Ислам улы - дивизия парткомиссияһы секретары; өлкән лейтенант Ғәйнетдинов Борис Ғәләүетдин улы - дивизия политбүлеге инструкторы; гв. майоры Латипов Сафа Латип улы - 62-се гв. атлы полкы парторгы; гв. капитаны Ощепков Георгий Савельевич - 62-се гв. атлы полкы агитаторы. Германиялағы оккупацион ғәскәрҙәр төркөмө командованиеһының 1945 йылдың 17 июлендәге бойороғона ярашлы, 148-се гв. артполкы командиры, гв. подполковнигы Хәбиров Сәйфулла Хәлил улы III дәрәжә Кутузов ордены менән бүләкләнә. Шул уҡ командованиеның 1945 йылдың 22 августындағы бойороғо менән III дәрәжә Кутузов орденына 62-се гв. атлы полкының штаб начальнигы, подполковник Йосопов Әхнәф Әбелғата улы лайыҡ була. СССР Юғары Советы Президиумының 1945 йылдың 31 майындағы Указына ярашлы, 60-сы гв. атлы полкы командиры, гв. полковнигы Горлатов Иван Федорович Ленин ордены менән наградлана.

Бында ошо һуңғы алыштарҙа ҡатнаша алмаған, элегерәк дивизияла юғары вазифалар биләгән офицерҙарҙы ла билдәләп үтеү урынлы булыр тибеҙ. Уларҙың боевой хеҙмәттәре шулай уҡ юғары баһаға лайыҡ була. Дивизия штабының оператив бүлеге начальнигы (1944 йылдың ноябренә тиклем), гв. подполковнигы Черников Герасим Антонович Ҡыҙыл Армияла 1918 йылдан бирле хеҙмәт итә, хәрби академия тамамлай, Ленин, Ҡыҙыл Байраҡ һәм ике тапҡыр Ватан һуғышы ордендары менән бүләкләнә; 1943 йылдың мартынан бирле дивизия политбүлеге начальнигы, гв. подполковнигы Покровский Петр Иванович, Ҡыҙыл Армияла хәрби хеҙмәттә 1918 йылдан бирле, дивизияның сәйәси аппараты һәм частарҙағы партия ойошмалары эшен яҡшы ойоштorғаны өсөн юғары боевой наградаларға лайыҡ була; 60-сы гв. атлы полкы командиры (1942 - 1943 йылдарҙа), элекке корпус командиры урынбаҫары, гв. полковнигы Фондеранцев Герасим Ефимович. Ул 1943 йылдың ғинуарында, беҙҙең дивизиябыҙ Сталинград янындағы ҡан ҡойошло алыштарҙа ҙур юғалтыуҙарға дусар булған бер мәлдә, дивизия командиры М.М. Шайморатовтың бойороҡтарын теүәл үтәп, яугирҙарҙы берләштерелгән полкҡа туплай һәм фашист ғәскәрҙәренә ҡаһармандарса ҡаршы тороуға өлгәшә. Г.Е. Фондеранцев 1943 йылдың февралендә Донбасс рейдында ла үҙен бик ҡыйыу командир итеп таныта. Ул Ленин, өс Ҡыҙыл Байраҡ һәм III дәрәжә Суворов ордендарына лайыҡ була.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

✓ ***Өфө - ижадсылар өсөн Мәккә кеүек бит инде ул, ижад Мәккәһе. "Өф" итеп тормаһа ла, Өфөнөң бар ишек-ҡапҡалары шар асыҡ булмаһа ла, унда һинең йәндәштәрең, күңелдәштәрең күп.***

# БЕҘ ТӘБИҒӘТ МЕНӘН

## беҙ тел һаҡсыһы булған

**Яҙыусы- шағирҙар, ғөмүмән, ижадсылар Өфөлә генә йәшәмәй, улар республиканың һәр районында, һәр ауылында донъя көтә. Байрам алдынан Шиғриәт күгендәге йондоҙҙарыбыҙ: Ишембайҙан - Ғәлиә Кәлимуллина, Ҡырмыҫҡалынан - Фирүзә Абдуллина, Стәрлетамаҡтан - Рита Фәтҡуллина, Бөрйәндән Айһылыу Ғарифуллина менән ситтән тороп диалог ҡорҙоҡ. Һүҙ - уларға.**

**Хөрмәтле шағирәләр, башта үҙегеҙҙең ижад шишмәһен урғытҡан, һеҙҙе илһамландырған төбәк тураһында һөйләп китәйек әле. Ни өсөн һеҙ унда?**

**Ғәлиә:** Тыуған районым да, төйәкләнгән ерем дә - Ишембай районы. Башҡорт дәүләт университетын тамамлағас, 1987 йылда, "Эшкә бары үҙ районыма ҡайтам!" тигән энтузиазм менән үҙем урта белем алған данлыҡлы Маҡар урта мәктәбенә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып эшкә ҡайтҡайным, шунан бирле Ишембайҙамын. Биш йыл эшләгәс, Ишембай ҡалаһындағы Башҡорт гимназия-интернатына эшкә күстем. Йәшлегемдең иң илһамлы йылдары Маҡар урта мәктәбендә үтте. Эшкә лә, ижадҡа ла ҡанатландырҙы ул ер мине. Тыуған ауылым Иҫәкәй Маҡарға тау аша ғына. Шул юлды, тәбиғәттең һәр мәлен күҙәтеп, үҙ алдыма һөйләнә-һөйләнә, шиғыр сығарып йә йырлай-йырлай эшкә барып, эштән ҡайтҡандарым әле һаман күҙ алдында.

**Фирүзә:** Мин Өфөнән 70 километр алыҫлыҡта урынлашҡан Ҡырмыҫҡалы районының Иҫке Бәпес ауылында йәшәйем. Был - минең иремдең тыуған ауылы. 42 йыл элек килен булып төшкәйнем. Ирем, институтты тамамлап, диплом алғас, Мәғариф министрлығының йүнәлтмәһе буйынса биш йыл Ейәнсура районы Юлдаш ауылында эшләп ҡайттыҡ. Ир кеше үҙ илендә йәшәргә тейеш, ғаиләлә ир кеше баш булырға тейеш, тигән ҡағиҙәләр минең йәшәү фәлсәфәмә тап килә. Шуға күрә иремдең тыуған ерендә йәшәү, был ергә хеҙмәт итеү дөрөҫ тип иҫәпләнем. Ерегеп, берегеп, ғүмерем буйына ошо ергә хеҙмәт итеп, үҙ кеше булып йәшәп ятыуым.

**Рита:** Мин сығышым менән матур тәбиғәтле, бай тарихлы Ишембай районы Маҡар ауылынанмын. Маҡар мәктәбен тамамлағас, артабан уҡыр өсөн тыуған төйәккә яҡын ҡаланы - Стәрлетамаҡты, Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институтының башҡорт филологияһы факультетын һайланым. Бына хәҙер 27 йыл Стәрлетамаҡта йәшәйем. Бында - минең йортом, ғаиләм, эшем, аралашҡан кешеләрем, тормошом. Ҡаланың артыҡ ҙур түгеллеге, тыныс булыуы тәбиғәтемә нығыраҡ тап килә, күрәһең. Ғүмер буйы уҡытыусы булып эшләгән әсәй менән атайҙың да ошо педагогик вузда уҡыуы, Стәрлетамаҡтың һәр урамы һайын туғандарҙың йәшәүе лә йоғонто яһаны. Ғөмүмән, мин яҙмышҡа ышанам, тап ошо ерҙе - Стәрлетамаҡты яҙмышым, тип ҡабул итәм.

**Айһылыу:** Тәҡдир ҡайҙа ҡуша, шунда йәшәй кеше. Мин үҙемдең тыуып үҫкән Бөрйәнемдә йәшәгәнемә бик тә ризамын - Бөрйәндән матур ер, беҙҙең халыҡтан алсаҡ, киң күңелле, эскерһеҙ һәм бер ҡатлы халыҡ бүтән бер ерҙә лә юҡ. Булмаҫ та. Булмышым менән мин - тәбиғәт балаһы. Бөрйәндән башҡа ерҙә йәшәүҙе күҙ алдына ла килтерә алмайым. Шиғырҙарым да күбеһенсә тәбиғәт тураһында. Күҙ менән күргәнде күңел аша үткәреп яҙам. Бәләкәй саҡтан урман-ҡырҙа үҙем генә белгән, күп ваҡытымды шунда үткәргән тәбиғәт мөйөшөм булды - бөтә донъянан, өйҙәге бөтмәҫ-төкәнмәҫ эштән ҡасып, шул күңел утраусығында үҙем менән үҙем һөйләшеп, күккә ҡарап хыялланып ятырға ярата инем...

**Ә шулай ҙа һеҙҙе нимә бәйләй Өфө менән? Ни өсөн һеҙ ҙә башҡалар кеүек Өфөлә түгел?**

**Ғәлиә.** Өфө - ижадсылар өсөн Мәккә кеүек бит инде ул, ижад Мәккәһе. "Өф" итеп тормаһа ла, Өфөнөң бар ишек-ҡапҡалары шар асыҡ булмаһа ла, унда һинең йәндәштәрең, күңелдәштәрең күп. Тыуған яғында йәшәүеңде бәхет итеп ҡабул иткән сүрәттә лә күңел Өфөгә тартылып тик тора барыбер. Ҡәләмдәштәрең бер ҡор булып ҡайнап йәшәгән ижади мөхиттән ситтә йөрөүҙән күңелдә етемлек тойғоһо барлыҡҡа килә һымаҡ хатта.

**Фирүзә:** Өфөлә йәшәмәһәк тә, баш ҡалала ойошторолған мәҙәни сараларға, спектакль-концерттарға өфөләргә ҡарағанда йышыраҡ йөрөйбөҙҙөр әле, моғайын. Балаларыбыҙ Өфөлә булғас, ейәндәребеҙҙе һағынабыҙ ҙа, машинаға ултырып сығабыҙ ҙа китәбеҙ. Ләкин мине Өфө бик тиҙ туйҙыра: машиналар ташҡыны мине тапар һымаҡ, бейек-бейек өйҙәр өҫтөмә ауырға иткәндәй. Ҡаланың бер ҡасан да тынмай торған шау-шыуы ялҡыта, арыта. Бер тәүлек торһам, ауылымды, үҙ йортомдо һағынып, ашҡынып ҡайтып киләм.

**Рита:** Өфө - күңелемә яҡын ҡала. Ул минең эске булмышым, донъяға ҡараштарым формалашыуына ҙур йоғонто яһаны. Башҡорт дәүләт университетында остазым, профессор Роберт Нурмөхәмәт улы Байымов етәкселегендә аспирантурала уҡыным. Уның менән аралашыу оло тормош һабағы булды. Уҡытыусым шәхесенең юғарылығын, уның һүҙҙәренең мәғәнәһен йылдар үткән һайын тәрәнерәк аңлайым. Бер осор, йәшерәк саҡта, Өфөгә ай һайын бер барып ҡайтмаһам, күңел булмай торғайны. Яҙыусылар, журналистар мөхитендә, әҙәби сараларҙа ҡатнашып, ағай-апайҙар менән, бәләкәймеҙурмы, ижади эҙләнеүҙәрем хаҡында һөйләшеп, ҡанатланып ҡайта инем. Өфө үҫтерҙе беҙҙе, ысынлап та. Һағындыра, ныҡ һағындыра шул саҡтар. Ваҡыт үтә, кемдер китә, Өфө лә, беҙ үҙебеҙ ҙә үҙгәрәбеҙ.

**Айһылыу:** Өфө мине тарта, тип әйтә алмайым. Хәҙер ижад иткәненде баҫтырыр, яҙмаларынды китап итеп сығартыр өсөн ҡайҙалыр барырға кәрәкмәй - интернет заманы. Быйыл йәй Өфөлә операция эшләтеп яттым - ундағы ығы-зығылы тормош, ҡолаҡты тондорғос шау-шыу, миллионлы ҡалала япа -яңғыҙ булыу мине шундуҡ ялҡытты. Ана, оҡшатҡандар йәшәһен ҡалала, Бөрйәнем һау булһын, тип ашҡынып ҡайтып төштөм. Әллә ниндәй уңайлыҡтары, өҫтөнлөктәре һәм башҡаһы булһын - Өфө ылыҡтырмай, тартмай һәм минең күңел заҡыма тап килер ер түгел.

**Өфөлә йәшәүсе әҙиптәр нығыраҡ танылыу алған, ә һеҙҙең кеүек районда йәшәүселәрҙе халыҡ бик үк белеп-танып бөтмәй, тигән менән килешәһегеҙме?**

**Ғәлиә:** Килешәм. Элегерәк мин "Әйтер һүҙең булһа, ҡайҙа йәшәһәң дә барыбер түгелме ни?" тип уйлай инем, ә хәҙер, зарланырға теләмәйем, шулай ҙа хәҡиҡәтте танырға мәжбүрмен: шағирҙарҙың үҙҙәре әйтмешләй, "Өфөлә йәшәп, тыуған яҡтарын һағынып шиғыр яҙыусылар" был йәһәттән күпкә бәхетле. Интернет ситтә йәшәүселәрҙең хәлен күпкә еңеләйтте: яҙ ҙа, "Бәйләнештә" селтәрендәге битләүеңә һал йә әҙәби төркөм асып ебәр, әйтер һүҙең булһа, һине ҡайҙа ла ишетәләр. Әммә виртуаль донъя менән рухи бәйләнеш юҡ, ҡәләмдәштәрең менән йәнле аралашыу ҙа түгел ул, бары тик уҡыусыларың менән бәйләнеш булдырыу, интернет киңлектәрендә танылыу мөмкинлеге генә, ә ижадсы илһамды рухи бәйләнештән ала. Өфөлә йәшәүселәр ҡәләмдәштәренең ижад кисәләре, яңы сыҡҡан китаптарының исем туйҙары айҡанлы әле бер, әле икенсе районға ижади командировкаларға йөрөп, халыҡ менән осрашып тора. Уларҙың исем-шәрифтәре һәр ваҡыт тел осонда. Эшләгән урындары ла, башлыса, гәзит-журнал редакциялары, радио, телевидение - шулай уҡ ижади мөхит. Ә ситтә йәшәгән ижадсылар үҙ ҡаҙанында ғына ҡайнай. Унан һуң, халҡыбыҙҙа "үҙ илендә бәйғәмбәрҙәр булмай", тигән әйтем дә бар. Урындарҙа ғүмер буйы үҙ районына хеҙмәт итеү менән бергә ҡәләменә лә тоғро ҡалған ижадсыға ҡарағанда Өфөнән килгәндәр күпкә баһалыраҡ - улар баш ҡалала йәшәй бит! Шуға ла, тыуған яғыңа ҡайтһаң да, Өфөләрҙә ижади багаж, тәжрибә туплағас, ҡәләмең үткерләнеп, зиһенең ҡеүәтләнеп, тамам йышылып бөткәс кенә, ижад итер өсөн күңелеңә бары тик һиллек, тыныслыҡ кәрәк була башлағас ҡына ҡайтырға кәрәк, тигән фекерҙәмен.

**Фирүзә:** Әлбиттә, Өфөлә йәшәү ижад кешеһе өсөн уңайлыраҡ инде: төрлө күргәҙмәләр, китап туйҙары, ижади осрашыуҙар... Китап магазиндары йәнәшәлә генә. Ләкин ҡала йәшәүселәр ауылдағы тыныслыҡты, тынлыҡты күрмәйҙәр. Мин ерҙә соҡонорға яратам, сәскәләр үҫтереүҙән ләззәт алам. Өйҙән сығыу менән тәбиғәт ҡосағына сумам: ағастар, сәскәләр, төрлө емеш-еләк, йәшелсә һәм саф һауа. Былар бөтәһе лә миңә күңел күтәренкелеге бирә, бәхет тойғоһо уята. Хәҙерге интернет заманында танылыу алыу өсөн Өфөлә йәшәү бөтөнләй кәрәк түгел. Мин ауылда йәшәһәм дә, халыҡ мине белмәй тип әйтә алмайым. Интернетҡа, социаль селтәрҙәргә рәхмәт!

**Айһылыу:** Һорауығыҙҙағы фекер менән килешеп үк бөтмәйем. Элек, бәлки, был фекер дөрөҫлөккә тап килгәндер, сөнки республиканың бөтә ҡәләм әһелдәре баш ҡала ҡаҙанында ихлас ҡайнай, төрлө сараларҙа ҡатнаша, редакциялар, нәшриәт һуҡмағын таҡырайтыуҙа тиҙлек һәм ара яҡын булыу сәбәпле ота ине. Хәҙер заман башҡа - заң башҡа. Интернет заманында яҙған нәмәңде минуты-секунды менән тотош донъяға таратыу форсаты төпкөлдә ятып ижад иткәндәр менән үҙәктәгеләрҙе тигеҙләне. Илһамың килә икән - яҙ ҙа һал! Әлбиттә, Өфөлә йәшәп ижад итеүселәр бер яғы менән бәхетле - төрлө сара, осрашыуҙарҙа бергә ҡайнай алалар, улар етәкселектең дә күҙ уңында. Беҙҙең иһә үҙ өҫтөнлөгөбөҙ бар: беҙ һәр саҡ әҙиптең төп ҡоралына - һутлы тел үткәргесе, һаҡсыһы булған халыҡ араһында, тәбиғәт менән бер бөтөн. Мин, мәҫәлән, Яҙыусылар союзы ағзаһы булһам да, күп ҡәләмдәштәрҙе йөҙгә белмәйем, ул сама күп ижад әһелдәрен танып-белеп тә бөтөп булмайҙыр.

Хикмәт ҡайҙа тыуыу, йәшәү, ижад итеүҙә түгел бит ул. Хикмәт - нимә ижад итеүҙә. Ун китап сығарып та халыҡ күңелендә ҡалмауың бар, бер әҫәрең менән дә әҙәбиәт асманында яҡты йондоҙ булып янырға мөмкин. Талантты иң бөйөк Ижадсы - Аллаһ бирә. Ул биргән өлөшөң ниндәй - ижадың шундай инде. Һәр хәлдә, мин ошо фекеремдә ҡалам.

**Рита:** Эйе, районданрҙа йәшәүселәрҙе халыҡ бик үк белеп-танып бөтмәйҙер. Кемгәләр танылыу маҡсаты мөһим булһа, бөгөнгө заманда быға интернет аша ла өлгәшеп була. Миңә иһә танылыуҙан бигерәк, ижади процесс, уның

> ***Шағирҙарҙың үҙҙәре әйтмешләй, "Өфөлә йәшәп, тыуған яҡтарын һағынып шиғыр яҙыусылар" был йәһәттән күпкә бәхетле. Интернет ситтә йәшәүселәрҙең хәлен күпкә еңеләйтте: яҙ ҙа, "Бәйләнештә" селтәрендәге битләүеңә һал йә әҙәби төркөм асып ебәр, әйтер һүҙең булһа, һине ҡайҙа ла ишетәләр. Әммә виртуаль донъя менән рухи бәйләнеш юҡ, ҡәләмдәштәрең менән йәнле аралашыу ҙа түгел ул, бары тик уҡыусыларың менән бәйләнеш булдырыу, интернет киңлектәрендә танылыу мөмкинлеге генә, ә ижадсы илһамды рухи бәйләнештән ала.***

***✓ Хәҙер заман башҡа - заң башҡа. Интернет заманында яҙған нәмәңде минуты-секунды менән тотош донъяға таратыу форсаты төпкөлдә ятып ижад иткәндәр менән үҙәктәгеләрҙе тигеҙләне. Илһамың килә икән - яҙ ҙа һал!***



# БЕР БӨТӨН,

## халыҡ араһында

һәҙәмтәһе ҡыҙығыраҡ. Был һорау менән икенсе мәсьәләгә иғтибарҙы йүнәлтке килә - ул төбәктәрҙә йәшәп ижад иткән яҙыусыларға иғтибар. Заман шарттары менән бәйле, урындағы яҙыусылар ойошмалары бөтөрөлә йәки ижад кешеләренең үҙ иркенә ҡуйылды. Бөгөн ҡала-райондарҙа ижади берекмәләр эшләй икән, был - айырым кешеләрҙең оло фиҙакәрлек менән башҡарған хеҙмәте. Стәрлетамаҡта ла ҡасандыр яҙыусыларҙы туплар офис, штатта эшләгән хеҙмәткәрҙәр бар ине. Стәрлетамаҡ ҡына түгел, Салауат, Мәләүез, Күмертау, Ишембай, Ауырғазы, Ғафури ижадсылары бер ҡор булып аралашып йәшәй ине. Бөгөн ошо гөрләп торған ижади мөхит бик һағындыра. Стәрлетамаҡ Яҙыусылар ойошмаһы үҙ эшен дауам итә ул, тик шарттар, мөмкинлектәр башҡа.

**Ҡатын-ҡыҙҙың яҙмышы, әлбиттә, килен булып төшкән ергә бәйле инде. Һеҙҙе ниндәй килен, тиҙәр?**

**Фирүзә:** Килен булып төшкән йылда уҡ, ҡайным, ҡайнағам менән ярышып, бесән сабып, шәп килен итеп танытҡайным инде үҙемде. Өй һала башлағас, ауыл халҡы тағы аптыраны. Нигеҙенән башлап йортто тулыһынса ирем менән икәүләп эшләнек (әмә менән бураны ғына күтәреп ултырттыҡ), хатта ҡыйыҡты ла икәүләп кенә яптыҡ. Мин аҫтан ҙур ырғаҡҡа эләктереп шиферҙы алып биреп торам, иптәшем тартып алып, кәрәкле урынға нығытып ҡаҙаҡлап ҡуя бара. Йортобоҙҙоң бөтә эше минең дә ҡулым аша үтте. Ир-ат эшләй торған бөтә эште лә беләм һәм ҡурҡмай тотона алам. Ә ҡатын-ҡыҙ эше былай ҙа минең үҙ иңемдә. Ҡурҡмай әйтә алам: ирем минән унды.

**Гәлиә.** Килен булып төшкән ерем дә - Ишембай. Ҡулдан килгән тиклем килен булырға тырышылды инде. Ҡалала йәшәһәк тә, тормош иптәшемдең тыуған ауылында үҙ көсөбөҙ менән өй һалдыҡ. Хаҡлы ялға сыҡҡас, шунда ҡайтып йәшәрбеҙ, балаларыбыҙҙың ҡайтып-китеп йөрөр ере, миңә ижад менән генә шөғөлләнер өсөн һил донъя булыр, тигән ниәттәребеҙ бар ине. Үҙ ҡулдарым менән һалышҡанғамы, шул тиклем яраттым мин ул өйҙө! Ишеге ҡояш сығышы яғына ҡарап торһон тип, урынын үҙем һайланым. Хыялымдағы ғына өй булды ул: иртән ишек асып ебәрһәң, ҡояш үҙе өйөңә килеп кергән һымаҡ. Ишек ҡаршыһына ғына сәскә түтәлдәре эшләнем. Инвалид коляскаһында ултырған ҡәйнәм шул сәскәләргә ҡарап кинәнһен тип, ҡалалағы фатирыбыҙҙа ярты ҡыш сәскә үҫентеләре тәрбиәләнем. "Ерҙәге ожмах ошо була", тиер ине ҡәйнәм дә шул сәскәләргә ҡарап. Эшкә күмелеп, нимәнелер күрмәй-абайламай ҡалдым - бер көн килеп бар хыялдар селпәрәмә килде. Ул өйҙә хәҙер башҡа берәү хужабикә булып йөрөй...

***Хикмәт ҡайҙа тыуыу, йәшәү, ижад итеүҙә түгел бит ул. Хикмәт - нимә ижад итеүҙә. Ун китап сығарып та халыҡ күңелендә ҡалмауың бар, бер әҫәрең менән дә әҙәбиәт асманында яҡты йондоҙ булып янырға мөмкин. Талантты иң бөйөк Ижадсы - Аллаһ бирә. Ул биргән өлөшөң ниндәй - ижадың шундай инде. Һәр хәлдә, мин ошо фекеремдә ҡалам.***

**Айһылыу:** Мин үҙем килен булып төшкән Ҡолғанала 11 йыл йәшәнем, мәктәптә балалар уҡыттым. Мәктәп, ауыл тормошонда әүҙем ҡатнаштым. Нәҡ шул осорҙа Ҡолғана айырым ауыл биләмәһе булып Ҡыпсаҡтан айырылып сыҡты. Район советы депутаты, ауыл биләмәһенең тәүге совет рәйесе булыуым, балалар менән экоһуҡмаҡтар һалыуыбыҙ, Башҡорт дәүләт тәбиғәт ҡурсаулығы үткәргән "Парктар маршы"нда мәктәбебеҙҙең призлы урындар алыуы, мин уҡытҡан күп уҡыусыларҙың үҙем етәкләгән әҙәби ижад түңәрәгендә шөғөлләнеүе - ошоға дәлил.

**Рита:** Салауат районы килене булһам да, шаяртып әйткәндә, төшкән ерем, йәшәгән төйәгем - Стәрлетамаҡ. Шуға ла килен хоҡуғында түгел, бында мин ҡаланың ҡыҙы хоҡуғында йәшәйем. Ҡайныҡәйнәмдәрҙән алыҫ торабыҙ. Ниндәй килен булыуымды улар баһалай инде.

**Әсәйлек бәхетегеҙ ҙә һеҙҙе ошо төбәккә бәйләгән бит инде?**

**Гәлиә:** Аллаға шөкөр, улым, ҡыҙым бар. Кейәүгә һуң ғына сыҡтым, шуға микән, "әсәйлек бәхете", "балаларымдың атаһы" тигән тойғолар көслө булды миндә. Әсәй булғас, шиғыр булып урғылырға торған хис-тойғоларымды яҙһам, уларҙы тәләфләп ҡуйырмын тип, ҡағыҙға күсерергә ҡурҡып ултырғанымды иҫләйем. Бөтә наҙымды, ваҡытымды балаларыма бирергә тырыштым. Уларҙың күңеленә "атай", "атай һүҙе" тигән төшөнсәне лә һалдым, ошо төшөнсәләрҙе тормошта төп ориентир тип ҡабул итеп үҫте улар. Хәҙер иң ҙур теләгем - балаҡайҙарымдың яҙмыштары яҡты булһын, уларҙың һаулығын, бәхетен бирһен Хоҙайым.

**Фирүзә:** Әсәйлек - минең өсөн юғалтыуҙар, әрнеүҙәр, яралар аша бирелгән оло бәхет, йәшәүемдең маҡсаты ла, мәғәнәһе лә. Тәүге улыбыҙ Уралдың ҡәбере ошо ауылдың зыяратында. Улымдың ҡайындары тәҙрәмдән күренеп тора, көн дә ҡарап алам. Икенсе улыбыҙҙы Ейәнсурала ерләп ҡалдырҙыҡ. Аллаға шөкөр, ике ҡыҙ үҫтереп, шәп егеттәргә кейәүгә бирҙек. Кейәүҙәребеҙҙе үҙ улдарыбыҙ итеп ҡабул иттек. Рәхмәт ҡоҙа-ҡоҙағыйҙарыбыҙға: аҡыллы, тырыш, әҙәпле улдар тәрбиәләгәндәр. Дүрт ейәнебеҙ бар. Балаларыбыҙ ауылға ҡайтырға ашҡынып торалар.

**Айһылыу:** Ике балам да Ҡолғанала тыуып, район үҙәге Иҫке Собханғолда үҫте. Уларҙың саф башҡорт мөхитендә, үҙем диндә булғас, мосолмандар солғанышында үҫеүе - ҙур бәхет. Мин балаларыма, дингә килегеҙ, намаҙ уҡығыҙ, ураҙа тотоғоҙ, тип тыҡыманым. Ике балам да минең шәхси өлгөмдә тәрбиәләнде. Ҡыҙым дүртенсе курста уҡығанында яулыҡ ябынды, улым әрмелә лә ураҙа тотто. Әлхәмдүлилләһ, бер ваҡытта ла балам төнөн сығып китте, ҡайҙа, нимә эшләп йөрөй, тигән һорауҙар борсоманы мине. Мин яҙмышымдан, балаларымдан ризамын.

**Рита:** Ике бала әсәһемен, Нәркәс исемле ҡыҙыбыҙ, Нур исемле улыбыҙ бар. Балаларҙың тыуған ере булғас, икеләтә ҡәҙерле инде ул Стәрлетамаҡ. Бәләкәй баланың донъяны ҡабул итеүе ҡыҙыҡ бит, ауыл, ҡаланы улар тәүҙә өй, һунынан - урам, үҫә, аңлай бара - ауыл, ҡала итеп ҡабул итә. Кеше күңелендәге иң йылы урын - атай-әсәйгә, олатай-өләсәйгә, бала саҡҡа бәйле тыуған йорт тойғоһо шулай ярала, күрәһең.

**Эш урынына бәйлелек тә бәхетле итәлер һеҙҙе?**

**Гәлиә:** Башҡалар нисектер, ә мин эш урынына, ысынлап та, бәйле. Маҡар мәктәбенә ҡайтып эш башлағас, Ғайса Хөсәйеновтан, аспирантураға уҡырға саҡырып, хат килеп төштө. Ул беҙҙең курстың диплом эштәрен яҡлау комиссияһы рәйесе булғайны. Бер йыл эсендә Ғайса ағайҙан өс хат алғас, икенсе йылына аспирантураға киттем, әммә өс-дүрт айҙа эшемде, минең күҙҙәремә генә ҡарап ултырған уҡыусыларымды һағынып, мәктәпкә кире ҡайттым...

**Фирүзә:** Мин үҙ эшемдең фанаты булдым. Һәр нәмәне еренә еткереп эшләргә тырыштым. Предметымды, уҡыусыларымды яратып, йөҙәп йөрөп эшләнем. Үҙ эшемә ғашиҡ инем. Уҡыусыларым мине һаман да онотмайҙар, шылтыратып хәл белешеп, байрамдарҙа ҡотлап торалар, өйөмә килеп рәхмәт әйтеп китәләр. Уҡытыусы кеше өсөн ошо үҙе иң ҙур бәхеттер, моғайын. Мин сәскән изгелек орлоҡтары мул итеп уныш бирҙе, бер уҡыусым өсөн дә оялырға тура килгәне юҡ. Киреһенсә, яҡшы хәбәрҙәр генә ишетеп, уҡыусыларым менән ғорурланып йәшәйем.

**Айһылыу:** Эйе, эштән дә ундым мин. Мәктәптә лә ихлас эшләнем. Райондың "Таң" гәзитендә 23 йылға яҡын бүлек мөдире булыуым бер көн кеүек кенә. Эшемде яратып эшләнем. Яҙғандарым, әсәйем әйтмешләй, күптән Ер шарын урап сығырға еткәндер. Районда мин бармаған бер генә ауыл ҡалды - Иҫке Аҡбулат. Башҡаларын арҡырыға-буйға иңләнем. Эш аралаш дүрт китап сығарҙым. Балалар өсөн әкиәттәрем, хикәйәләр, шиғырҙар, йомаҡтар күп кенә, бер китаплыҡ парсалар ята. Хәҙер яҙғандарымды китап итеп сығарғы ла килмәй китә - кем уҡый һуң, тигән һорау борсой. Шулай ҙа киләсәктә башҡортса-русса һүҙлек тотоп булһа ла уҡырҙар, тигән өмөт тә бар ул...

**Рита:** Хеҙмәт юлының башында дүрт йыл Стәрлетамаҡтың Жәлил Кейекбаев исемендәге 3-сө Башҡорт гимназияһында башҡорт һәм инглиз телдәре уҡытыусыһы булып эшләнем. 2003 йылдан алып Өфө фән һәм технологиялар университетының Стәрлетамаҡтағы филиалында башҡорт һәм төрки филологияһы факультетында уҡытам. Эшемдең ҡайһы яғы бигерәк тә ҡәҙерле: беренсенән, йәштәр менән эшләйем, йәшлек донъяһы, йәшлек дәрте көс бирә. Беҙҙең башҡорт һәм төрки филологияһы факультетында башҡорт, татар, сыуаш йәштәре туған тел, әҙәбиәтен, мәҙәниәтен өйрәнә. Башҡорт мөхитендә башҡорт теленә киләсәк быуын менән башҡорт әҙәбиәте хаҡында һөйләшәм, яҙыусы ижады, әҫәрҙәр, әҙәби процесс хаҡында фекерҙәр менән уртаҡлашам, йәштәрҙең ҡараштарын тыңлайым, уларҙың һүҙгә, сәнғәткә, тормошҡа мөнәсәбәтен күҙәтәм. Был да минең өсөн бик мөһим. Фәнни эҙләнеүҙәрем дә әҙәбиәт, шиғриәт ғилеме менән бәйле. Шуға ла эштән, фәндән, ижадтың бер нөктәлә киҫешеүе - үҙе үк яҙмыш түгелме ни!

(Дауамы 15-се биттә).

**✓ *Ят халыҡ беҙ белмәгән, ишетмәгән ят ауырыуҙар ҙа килтерҙе. Йәнебеҙ һәм тәнебеҙ был ауырыуҙарға ҡаршы торорға өйрәнмәгән ине. Халҡыбыҙ ҡырылды. Аяуһыҙ ҡырылды.***




Тиңдәшем, башын түбән эйеп, кире урынына ултырҙы. Самаһыҙ йәл тойолһа ла уны яҡлап һүҙ әйтергә, ер өсөн килмәгәнемде аңлатырға ҡыйманым. Мин бындағы ҡанундар менән таныш түгел, тимәк...

Алып батыр кемгәлер эйәге менән ымланы. Бәй-бәй, был ни хәл, батмусҡа оло сусҡа башы һалған әҙәм миңә табан килә түгелме?

Бер нисә минуттан мин күҙәремде сылт-сылт йомған килеш батмус тотоп тора инем инде. Батмусты өҫтәлгә ҡуям. Өҫтәлдәге ризыҡ-ниғмәттәр күҙгә салына. Бешерелгән, ҡурылған, арҡыры ла буй һалынған сусҡалар!

- Ҡап, өҙөп ҡап! - ти кемдер.

Ит киҫәге өҙәм, ләкин ҡулым ауыҙыма яҡын килергә теләмәй. Мин, гәйепле йылмайып, артҡараҡ сигенәм.

- Беҙҙә сусҡа башы иң хөрмәтле ҡунаҡҡа ғына!..

Аңлайым, тик нишләп үҙ-үҙемде мәжбүр итә алмайым?

- Эй, һин, иманыңды беләһеңме? - тип һорай Кико ҡалҡына биреберәк, Алып батыр менән баш ҡағып ни тураһындалыр кәңәшләшеп алғас.

Бына ҡыҙыҡ, үҙ ғүмеремдә миңә берәү ҙә бындай һорау биргәне юҡ ине! Бер нисә секундҡа ғына уйланам. Ниңә, яуап бирергә була! Һәр хәлдә, был сусҡа башы кимерәү түгел. Хәҙер әйтәм, шаҡ ҡатырам! Әйтер һүҙҙәрҙе барлайым. Дөрөҫ, мин һуғышсан атеист түгел, шулай булғас... Ә дин, иман тигән нәмәләрҙе ишеткән бар. Әйҙә, күңелдәре булһын!

- Лә илаһи иллалла Мөхәмәт рәсүлүлла!

Ҙур таш өй эсе тып-тын булды. Был тынлыҡта арғы оста ултырған башлыҡтың да ҡалайтып тын алғаны ап-асыҡ ишетелә. Һындар хәрәкәтһеҙ. Минең мәғлүмәтле булыуыма һоҡланалар! Ләкин тишерҙәй итеп ҡараған тиҫтәләгән күҙ ҡарашын тойғас, үҙем дә һиҙмәй, ҡоршаям. Ниндәйҙер хата яһалды...

Дуҫым, мине ҡурсаларға теләгәндәй, алдыма килеп баҫты.

- Йәшәһен Зевыс һәм сусҡа башы!

- Йәшәһен Зевыс һәм сусҡа башы!.. - тип бер тауыштан ҡабатланы табындағылар.

- Йәшәһен!.. Йәшәһен!.. - Тауыш алыҫтарға яңғырап ишетелде.

Бына нәмә була икән ул иман тигәнең!

Бүтәндәр һөрәнләгән саҡта ялп итеп эргәмә Кико килеп баҫты һәм ҡалғандарға һиҙҙермәй генә ысылданы.

- Ахмаҡ! Асығауыҙ!.. Хәйләләшә лә белмәгәс, нишләп килдең бында? Ситтән икәнеңде һиҙәм... Мин үҙем дә бында... - Ул әйтеп бөтөрмәйенсә күҙ ҡыҫты. - Кәңәшем шул, ят бауыр, ҡәлғәнең хужаһы булғың килһә, әлегә улар һөйләгәндә һөйлә, улар маҡтағанды маҡта. Шунда уңыш та килер! Ярҙам итермен... Ҡәлғә барыбер беҙҙеке буласаҡ!..

Ул ҡайҡая баҫып үҙ урынына, башлыҡ янына китте.

Минең эргәлә һөйәк мөнйөп ултырған бәлйерәп бөткән ҡарт ҡалтыранды.

- Тағы әйт! - тине ул, һаҡалын дерелдәтә-дерелдәтә миңә төбәлде.

- Тағы әйт... - тип бышылданы ул. Ярым һуҡыр күҙҙәренән йәш тамсыһы тәгәрләне. - Мин бәләкәй саҡта... - Ул тотлоҡто. - Һуңынан бөтәһен дә үҙгәрттек. Бөтәһенән дә ваз кистек. Тағы әйт... Мин, мин яҡты үткәнемә ҡайтырға теләйем. Тағы нимәләр беләһең, әйт! Беҙ бөтәһен дә онотҡанбыҙ... Иҫкә төшөр!

- Алйыған ҡарт! - тип ҡысҡырҙы уға Кико. - Иманыңа ҡайт, юҡһа!

- Ул алйыған! - тип ҡабатланы бер нисә кеше.

Ҡарт бөкрәйҙе.

- Мин оноттом. Ысынлап, үткәндәр нимәгә кәрәк, ти? Кәрәкмәй. Үткәндәр - зарарлы.

Шул уҡ минутта ҡарт бар донъяһын онотоп, башын ҡырын һалып, баяғы һөйәген таларға кереште, һәр кем үҙ дәрәжәһенә ҡарап, сусҡа башын, түшен, тояғын кимерә. Мин тағы ла һораулы ҡарашымды Ҡараһаҡалға төбәйем.

- Дуҫым, батырҙарыбыҙ яңыраҡ ҡына ил сигенән дошмандарҙы ҡыуып ҡайтты. Был шул байрамдың дауамы.

- Ил? Ҡәлғәгә дошман килдеме?

- Юҡ. Ҡунаҡтарыбыҙ йәшәгән үҙ илебеҙҙән... Ҡунаҡтар "Илегеҙҙе ҡотҡарығыҙ!" тип мөрәжәғәт итеү менән ҡулға ҡорал алабыҙ, сөнки еребеҙҙән беҙ мәңгегә китмәгән! - Ҡараһаҡал бер аҙға шымды, унан, тотлоғоңҡорап, өҫтәне. - Беҙ был ҡәлғәлә ваҡытлыса...

Ил! Ил яттар ҡулында? Ниндәй "ҡунаҡтар" улар? Шул саҡ Алып батыр һүҙҙәре ҡолаҡта сыңлап китә: "Ер бирегеҙ ҡунаҡҡа!.. Ҡәлғәнән урын бирегеҙ!.."

- Беҙ бында ваҡытлыса... - тип ҡабатлай Ҡараһаҡал, ләкин әкренәйгән тауышынан аңлайым, үҙе һөйләгәнгә ул үҙе ышанмай.

Ә төптә Кико шарап һалынған мөгөҙҙө көсләп тигәндәй Алып батыр ауыҙына терәй. Уҫал янған күҙҙәре миңә төбәлә, ҡарашынан уҡыйым: "Ят бауыр, уларҙы ҡалай еңергә икәнен күрәһеңме? Ҡәлғә беҙҙеке буласаҡ!.."

Ә батырҙар, яуҙа енеп ҡайтҡан батырҙар... Берәүҙәре сусҡа моронон шашып үбә, икенселәре, тамам иҫереп, өҫтәл аҫтына һуҙылып төшә. Баяғы бәлйерәгән ҡарт: "Миңә лә әсерегеҙ!.." - тип иҙән буйлап имгәкләй. Был ниндәй кәңәштәр берлеге булһын? Аҡылдан яҙғандар йорто ла баһа! Ҡараһаҡал, ҡыйыу, айыҡ Ҡараһаҡал, ошоларҙың бөтәһен дә күрә тороп, ниңә өндәшмәй? Ниңә түҙә? Кемдер иҫкәртергә, кемдер уятырға тейештер бит уларҙы был үлем алды түйынан! Әйт, Ҡараһаҡал!

Ҡараһаҡал өндәшмәй...

- Туҡтағыҙ! Әй һеҙ, сусҡаға табыныусылар! - Мин үҙ-үҙемде белештермәй ҡысҡырып ебәрҙем. - Илегеҙҙән, ерегеҙҙән, иманығыҙҙан яҙып, был таш ҡәбер эсендә әле нимәгә ҡыуанаһығыҙ? Үләһегеҙ икән, ата-бабаларығыҙ ҡаны һеңгән ерегеҙҙә үлегеҙ, бында түгел! Намыҫ менән үлегеҙ! Китегеҙ бынан! Ҡояшҡа сығығыҙ!.. Йәшәр өсөн сығығыҙ!

Геүләп торған өй эсе тып-тын ҡалды. Әле яңыраҡ ҡына миңә ҡарап әшнәһен тапҡандай ҡыуанған Киконың күҙҙәрендә зәһәр ут балҡый ине.

- Йәрәс! - тип аҡырҙы ул, уртын сәйнәй-сәйнәй.

- Алығыҙ уны! Утҡа! Тура утҡа!..

- Йәрәс! - тигән тауыштар тағы ла ишетелде. - Утҡа!

Мин был ят һүҙҙе шундуҡ аңланым. "Ересь, еретик..." Ләкин миңә төбәп әйтелгән был һүҙ урта быуаттар тарихынан түгел ине! Бүтән бер ни ҙә уйлап өлгөрмәнем, Ҡараһаҡал уҡтай алға атылды. Уның көслө тауышы залды яңғыратты.

- Был ҡунаҡ Ҡараһаҡалдыҡы!

Берәү ҙә беҙҙең яҡҡа килергә ҡыйманы.

- Ҡунаҡ? - тип йәнә аптыраны Алып батыр. - Ҡунаҡтарҙың беҙгә яңғыҙ килгәне юҡ. Өйөр-өйөр, көтөү-көтөү килә ине улар. Ә был егеткәй бер үҙеме? Нисек улай?

Берәү ҙә өндәшмәне.

Алып батыр урынынан ҡалҡынды:

- Туҡтатығыҙ шау-шыуҙы! Беҙҙең ҡунаҡ әле нимә тине? Ҡабатлағыҙ миңә. Мин ул әйткән һүҙҙәрҙе аңларға теләйем! Ҡумаҡлап ҡабатлағыҙ!

"Һиңә китергә ваҡыт!" тигән тауыш ишетелә. Эйе, ваҡыт. Миңә һуңларға ярамай. Минуттар һанаулы.

Сығырға йүнәләбеҙ. Ғәжәп, берәү ҙә беҙгә иғтибар итмәй. Берәү ҙә күрмәй һәм туҡтатмай. Әйтерһең, был табында беҙ бөтөнләй булмағанбыҙ.

Таҡ-тоҡ, таҡ-тоҡ... Нишләп өндәшмәй Ҡараһаҡал? Таҡ-тоҡ? Таҡ-тоҡ.... Нишләп башын түбән эйҙе Ҡараһаҡал?

- Хушлашыу сәғәте яҡынлаша. Мин күңелеңде борсоған һорауҙарға яуап бирергә әҙер. Күп нәмәне былай ҙа аңлаһың, шикелле. Шулай ҙа кәрәк!.. Кәрәк һөйләргә. Тыңла һәм хәтереңдә ҡалдыр. - Ҡараһаҡал миңә уйсан ҡараш ташлай. - Борон заманда бер күрәҙәсе шулай тигән: ҡайҙан, кем тарафынан булыр, асыҡ түгел, халыҡҡа һәләкәт киләсәк. Ни ҡәҙәр ҡөҙрәтле булһаң да мин унан ҡотолоу сараһы бармы-юҡмы икәнен әйтә алмайым... Күрәҙәсенең юрағаны һәр саҡ юш килгәнгә, ата-бабалар тәрән хафаға ҡалған, һәләкәттең ҡайҙан килерен белмәһә лә, улар таш ҡәлғә төҙөү эшенә керешә. Күп ҡорбандар биреп һалынған ҡәлғә - мәңгелектең үҙенә һәйкәл ул. Ерҙе дошман баҫҡан хәлдә лә был ҡәлғәгә үтеп инә алмаҫ, ҡәлғә беҙҙе ҡотҡарыр, тип уйлаған халыҡ. Ә ҡаза көтөлмәгән яҡтан килде. Халыҡ яуға, утҡа ҡаршы торорға әҙер ине. Һәләкәт утһыҙ, яуһыҙ килде. Халыҡты йотоуҙың яңы ысулына кешеләр әҙер булмай сыҡты. Уға ҡаршы нисек көрәшергә белмәгән халҡым был афәттән ҡотолоу юлын эҙләр өсөн ҡәлғә эсенә инеп бикләнде. Ләкин һин күрҙең инде, унда ла ҡунаҡтарға урын бүлеү башланды...

Йөрәгем жыу итеп китте. Күңелемдә хәүеф баҫты.

- Ниндәй яңы ысул тураһында һөйләйһең әле, Ҡараһаҡал? Нишләп ул ысул тураһында минең ишеткәнем юҡ?

- Бер халыҡ яҙмышы, уның фажиғәһе тураһында ишетеү, бәлки, бүтәндәрҙе хаталаныуҙан һаҡлар... Халҡым иге лә, сиге лә булмаған ерҙең хужаһы булған. Ул оло биләмәлә һауалағы бөркөттәй, йылғалағы суртандай иркелә йәшәгән. Шул уҡ ваҡытта ошо байлығына ҡыҙыҡһыусыларҙан һаҡланыр өсөн һәр саҡ хәрби әҙерлектә торған һәм бирешмәгән. Ир баланы өс йәшенән атҡа мендереп, ҡулына ҡорал тотторған. Ул азат һәм ҡаһарман булған. Ул үҙе бер халыҡҡа янамаған, үҙенә янаусыларға иһә ҡаты яуап ҡайтарыр булған. Элек-электән беҙгә, ярҙам һорап, үлемгә дусар ителгәндәр килгән. Хәтеремдә, бер саҡ шулай дошмандар тарафынан иле-ере баҫып алынғандар ҡасып килде. Улар бик күп килде: "Беҙҙе ҡыралар, һуялар, ҡотҡарығыҙ, туғандар!" Беҙ ҡотҡарҙыҡ. "Еребеҙгә аяҡ баҫҡанһығыҙ икән, һеҙ беҙҙең ҡунаҡ. Беҙ хәҙер һеҙҙең өсөн дә яуаплы, дошманығыҙ һеҙгә бында янай алмаҫ. Йәшәгеҙ, әйҙә!" Ер бирҙек, мал бүлдек. Улар шатлыҡтан иланы. "Ошо изгелегегеҙҙе быуындан-быуынға аманат итеп һөйләп ҡалдырырбыҙ, туғандар!" Аҙмы-күпмелер ваҡыт үткәс, ҡунаҡтарыбыҙҙың ер-һыуын баҫып алған дошмандар беҙҙең ил сигенә килеп етте.

- Бирегеҙ ҡолдарыбыҙҙы! Беҙ уларҙы яулап алдыҡ!

- Һеҙ был мәхлүктәрҙе бөтә нәмәнән мәхрүм иттегеҙ. Тағы нимә талап итәһегеҙ уларҙан?

- Ҡасандыр беҙгә ҡылған яуызлыҡтарын уларҙың үҙҙәренә ҡайтарырға теләйбеҙ! Индермәгеҙ илегеҙгә, кире ҡыуығыҙ!

- Еребеҙгә тыныслыҡ менән аяҡ баҫҡандар - беҙҙең ҡунаҡ! Китегеҙ, юҡһа, ҡанға - ҡан!

Беҙҙән ҡырҡа яуап ишеткәс, баҫҡынсылар былай тине:

- Һеҙ был ҡәһәрләнгән халыҡты ҡотҡарып, кәрәкмәгән изгелек ҡылаһығыҙ! Улар, тамырға үтеп ингән ҡорт булып, һеҙҙе ҡоротасаҡ әле! Үҙегеҙгә үҙегеҙ хөкөм сығарҙығыҙ!

Был һүҙҙәрҙе ишеткәс, беҙ ҡысҡырып көлдөк. Сөнки изгелектән бер ҡасан да яуызлыҡ булып ҡайтҡаны юҡ. Аҡылдан яҙғандарҙың ғына ошондай һүҙ һөйләүе мөмкин! Ә ҡурҡыуға төшкән ҡунаҡтарыбыҙға шулай тинек:

- Еребеҙҙә күпме теләйһегеҙ, шул тиклем йәшәгеҙ, һеҙҙе лә үҙ халҡыбыҙ кеүек һаҡларбыҙ!

Уларға беҙҙең ҡунаҡтарса булған мөнәсәбәтебеҙ бик оҡшаны, шуға ла улар үҙҙәрен "ҡунаҡ" тип кенә атауыбыҙҙы һораны.

Ә ситтән килеүселәр ағымы туҡталманы. Ят халыҡ беҙ белмәгән, ишетмәгән ят ауырыуҙар ҙа килтерҙе. Йәнебеҙ һәм тәнебеҙ был ауырыуҙарға ҡаршы торорға өйрәнмәгән ине. Халҡыбыҙ ҡырылды. Аяуһыҙ ҡырылды. Был ауырыуҙарға ҡаршы торорға өйрәнгәндә беҙ ныҡ хәлһеҙләнгәйнек инде. Ә халыҡтың хәлһеҙ икәнен белһәләр, уны тибергә теләгән ҡоҙғондар күбәйә. Баҫҡынсылар өйөрө илебеҙгә йыш юлланды. Ләкин беҙ - көрәшергә өйрәнгән халыҡ. Милләтебеҙҙе генә түгел, ҡунаҡтарыбыҙҙы ла яҡлап, бихисап мәртәбәләр изге яуға күтәрелдек. Ҡунаҡтарыбыҙҙы яу сабырға мәжбүр итмәнек. Беҙ ундай халыҡ түгел.

**(Дауамы. Башы 8-се һанда).**

✔ ***Музей асыу тураһындағы ниәткә ғаиләбеҙҙә быуындан-быуынға тапшырылып килгән француз яулығы сәбәпсе булды. Өләсәйемдән ҡомартҡы булып ҡалған яулыҡты ҙур партиялы итеп баҫтырып алып ҡайттым.***

*РУХЛЫ ҠАТЫН-ҠЫҘ*

# ФРАНЦУЗ ЯУЛЫҠТАН БАШЛАНДЫ…

**Белорет ҡалаһының әүҙем йәмәғәт эшмәкәре, тынғыһыҙ ирекмән, йомарт бағыусы, уңышлы эшҡыуар, үҙе тирәләй матурлыҡ һәм уңайлылыҡ булдырыусы рухлы замандашыбыҙ Резеда Рифғәт ҡыҙы СӘЙҘӘРОВА менән һөйләшәбеҙ.**



➔ **Резеда Рифғәт ҡыҙы, эшҡыуарлыҡ эшмәкәрлегегеҙ һеҙҙе йәмәғәтсе лә, ирекмән дә итә, шулай бит? Шуға ла тәүҙә был юлдың ҡасан, нисек башланыуына ҡыҫҡаса байҡау яһайыҡ әле. Был өлкәлә уңышҡа өлгәшеүҙең сере нимәлә, тип билдәләр инегеҙ?**

- Эшҡыуарлыҡ өлкәһендә мин 1994 йылданмын, ә уға тиклем Белорет сәнғәт мәктәбендә эшләнем. Ике бөртөк тегеү машинаһынан башланған эшмәкәрлегемде бөгөнгә көндә ҙур ательеға, айырым магазинға тиклем еткереү өсөн байтаҡ көс һәм тир түгелде. Беҙ ул йылдарҙа Белоретта беренселәрҙән булып тюль, портьер, ламбрекен кеүек йортта һәр кемгә кәрәк әйберҙәр тегеүгә тотонғайныҡ. Ул ваҡыттарҙа нәҡ ошондай йүнәлеш модаға инеп бара ине, мин дә замана ағышын тиҙ тойоп, халыҡҡа кәрәкле хеҙмәт тәҡдим итә башланым. Һуңыраҡ милли кейемдәр тегеү идеяһы барлыҡҡа килде. Йәмғиәттә уларға ла ихтыяж тыуҙы. Шулай уҡ сәхнә кейемдәре лә һәр ваҡыт киң һорау менән файҙалана. Төрлө ансамбль, ижади коллектив, ауыл мәҙәниәт йорттары һәм башҡа күп ойошмаларға заказ буйынса сәхнә костюмдары тегәбеҙ. Тағы ла шәхси һәм коллектив заказдар буйынса корпоратив, байрам кейемдәре лә етештерәбеҙ. Эшмәкәрлегемдең кешеләргә шатлыҡ килтереүен, йылы мәлдәр бүләк итеүен, яҡшы иҫтәлектәр ҡалдырыуын күреү һәм белеү мине бәхетле итә.

Эшҡыуарлыҡта уңышҡа өлгәшеү өсөн, миненсә, кеше тырышлыҡ, ныҡышмалылыҡ, маҡсатҡа ынтылыусанлыҡ, яуаплылыҡ кеүек сифаттарға эйә булырға тейеш. Шулай уҡ килеп тыуған хәлдәрҙе, тәҡдим һәм мәғлүмәттәрҙе төплө анализлай белеү ҙә - эшҡыуар өсөн мөһим сифат. Бөтә эште үҙ өҫтөнә өйөп, психологтар телендә әйтелгәнсә, "янып" бөтмәҫ өсөн эштәрҙе ойоштороп, бүлеп бирә белеү ҙә кәрәк. Эшҡыуарлыҡ замана талаптарынан артта ҡалмайынса үҫешергә тейеш. Шул саҡта ул яңы кимәлгә күтәрелә.

➔ **Күптән түгел һеҙ "Эшлекле абруй" федераль премияһы лауреаты булдығыҙ, ихлас ҡотлайбыҙ!**

- Эйе, былтыр 12 октябрҙә Мәскәүҙә конкурстың финалы үтте, унда Рәсәйҙең 9 төбәгенән - Башҡортостан, Пермь крайы, Ханты-Манси һәм Ямал-Ненец автономиялы округтарынан, Ҡурған, Төмән, Омск, Силәбе һәм Свердловск өлкәләренән эшҡыуар ҡатын-ҡыҙҙар ҡатнашты. Форумда ҡатнашыуға мендән ашыу ғариза бирелгән булған, һәм финалға сығыусылар исемлегенә, унан инде "топ-100"-гә инеү минең өсөн көтөлмәгән шатлыҡлы хәл булды.

"Эшлекле абруй" премияһы финалы эшҡыуар ҡатын-ҡыҙҙарҙы бергә йыйыусы сара ғына түгел, ул - ысын мәғәнәһендә юғары кимәлдәге, киң масштаблы байрам. Бында бизнес мәсьәләләре күтәрелеүе генә түгел, ә ҡатнашыусыларҙың идеялар менән бүлешеүе, аралашыуы, тәжрибә уртаҡлашыуы һәм яңы бәйләнештәр булдырыуы ла мөһим. Һәр ҡатнашыусы - уңышлы һәм абруйлы ҡатын-ҡыҙ, үҙ өлкәһендәге лидер. Премия финалы сараһында ҡатнашып, ошондай уңышлы, талантлы кешеләр менән аралашыуым менән бәхетлемен. Был яңы ҡаҙаныштарға илһамландыра һәм ҙур этәргес бирә. "Эшлекле абруй" премияһын алыу минең өсөн дөрөҫ юлда булыуымды раҫлаусы мөһим дәлилдәрҙең береһе булды. Был үҫештә дауам итеүгә, үҙ тәжрибәм менән уртаҡлашыу һәм башҡа ҡатын-ҡыҙҙарҙы маҡсаттарына өлгәшергә рухландырыу өсөн стимул бирҙе.

➔ **Һеҙ миллилекте юғары баһалаған кеше булараҡ та билдәле. Белоретта этник музей асыуығыҙ бының тағы бер дәлиле булып тора ла инде. Шулай түгелме?**

- Беҙҙең бурыс - башҡорт халҡының мираҫын, рухилығын, мәҙәниәтен, йолаларын һәм көнкүрешен һаҡлау һәм уларҙы киләсәк быуынға тапшырыу. Оҙаҡ йылдар күңелемдә "Башҡорт йорто" этник музейын асыу идеяһы йәшәне һәм күптән түгел уны тормошҡа ашырҙым. Ә музей асыу тураһындағы ниәткә ғаиләбеҙҙә быуындан-быуынға тапшырылып килгән француз яулығы сәбәпсе булды. Өләсәйемдән ҡомартҡы булып ҡалған яулыҡты Төркиәгә алып барып, ундағы эшҡыуарҙар менән һөйләшеп, ҙур партиялы итеп баҫтырып алып ҡайттым. Һәм бөгөнгә көндә француз яулыҡтарын таратыу буйынса ҙур эш башҡарабыҙ, тип уйлайым. Заказдар күп француз яулыҡҡа, беҙ уны магазинда, интернет селтәре аша ла һатабыҙ, почта менән дә ебәрәбеҙ. Француз яулыҡ - ул минең матур проекттарымдың береһе.

Ун биш йыллап тирәһе бөртөкләп тиерлек экспонаттар йыйҙым. Улар хәҙер яратҡан өләсәйемдән ҡалған һәм ҡәҙерләп һаҡлаған әйберҙәр - тирмән, боронғо көмөш тәңкәләр, камзул, француз яулығы менән бергә музейға ҡуйылып, башҡорт ауыл йортонoң көнкүрешен тергеҙә. Экспонаттар йыйыуға туғандарым, ауылдаштарым, дуҫтарым ярҙам итте. Музейға килеүселәр традицион башҡорт кейемдәре, һауыт-һаба һәм башҡа көнкүреш әйберҙәренән тыш, фотоһүрәт, китап, келәмдәрҙе һәм башҡа бик күп нәмәләрҙе күрә ала. Коллекцияны артабан да тулыландырасаҡбыҙ. Тегеү эшенә арналған күргәҙмә лә булдырырбыҙ, тип ниәт итәм, коллекциямда бер-нисә боронғо тегеү машинаһы бар ҙа инде.

Музейҙың үҙәк элементы булып ғаиләмдең шәжәрәһе тора, ул ун бер быуынды үҙ эсенә ала. Был шәжәрәне йыйыу бер-нисә йыл дауам итте, уны төҙөүҙә бөтә туғандар ҙа берҙәм ҡатнашты. Белемле, зыялы ата-бабаларымды онотмау, улар хаҡында балаларға, ейән-ейәнсәрҙәргә еткереү - һәр кемдең изге бурысы. Туғанлыҡ ептәренең өҙөлмәүе минең өсөн бик мөһим. Һәм музей был йәһәттән үҙенең ҙур өлөшөн индерер, тип өмөт итәм.

➔ **Ғаилә кеше тормошондағы иң мөһим ижади сығанаҡ һәм көс биреүсе усаҡтыр, моғайын. Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ?**

- Ҡатын, әсәй, өләсәй вазифалары минең өсөн бик ҡәҙерле. Минең барлыҡ башланғыстарымды дәртләндереп, янымда ныҡлы терәк булып тороусы иремә рәхмәтлемен. Ҡыҙым, Гүзәлем - минең фатихам һәм Юғарынан бирелгән бүләгем. Ул минең төп ярҙамсым, кәңәшсем һәм ышаныслы терәгем. Ауыр мәлдәрҙә ярҙам итеүсе, уңышыма бергәләп шатланыусы яҡындарым булыуы менән бәхетлемен. Өләсәй булыу үҙе бер ҙур вазифа. Ейәндәрем тормошома йылылыҡ һәм мәғәнә килтерә, донъяға балаларса, ҡыланмай-ҡыландырмайынса ғына ҡарарға, бөтә нәмәне лә нисек бар, шулай күрергә өйрәтә һәм көндәремде шатлыҡ менән тултыра. Мин уларға традицияларыбыҙҙы һәм ҡиммәттәребеҙҙе тапшыра, уларҙы үҙ мәҙәниәтебеҙҙе хөрмәт итергә һәм ҡәҙерләргә өйрәтә алыуым менән ғорурланам.

➔ **Һеҙ ирекмән булараҡ та күп эштәр башҡараһығыҙ бит әле…**

-Был донъяла һәр кемебеҙҙең хәленән килгәнсә кемгәләр ярҙам ҡулы һуҙыуы йәмғиәттәге йәшәйеште күпкә яҡшыртыр ине. Мин йөрәгем ҡушыуы буйынса йәмәғәт эштәрендә ҡатнашам һәм ирекмәнлек эшмәкәрлеге менән шөғөлләнәм. Әгәр ҙә минең ошо эшмәкәрлегем башҡаларҙы ла рухландырһа, битараф булмағандар рәтен арттырһа, бик шат буласаҡмын.

Илебеҙ башына төшкән һынауҙарҙы йырып сығыу өсөн бөтә халыҡ дәррәү ҡуҙғалды. Махсус хәрби операцияла ҡатнашҡандарға аҡса йыйып, кәрәкле әйберҙәр алыу, гуманитар ярҙам туплап ебәреү, маскировка селтәре үреү кеүек бик күп эштәр башҡарыла. Ошондай битараф булмағандар менән берлектә яу яланындағы егеттәребеҙгә ярҙам итеүҙә ҡатнашыуым, ярҙам күрһәтә алыуым минең өсөн бик мөһим. Минең ирекмәнлек башланғысымды ҡеүәтләп тороусы милләттәштәремә, Белорет һәм Учалы районы халҡына, дуҫтарым һәм туғандарыма оло рәхмәтемде белдерәм.

**ШУЛАЙ ИТЕП…**

**Виртуоз дирижер һымаҡ, ваҡытын, көсөн тигеҙ бүлеп, әллә күпме өлкәлә оҫта эшмәкәрлек алып барған кешеләр иҫ киткес энергия һәм энтузиазмға эйә булалар. Улар ҡуйған маҡсаттарына өлгәшеп кенә ҡалмай, ә тирә-яҡтағыларҙы ла алға әйҙәй. Стратегик ҡараш, ныҡышмалыҡ һәм камиллыҡҡа ынтылыш - быларҙың барыһы ла бөгөнгө әңгәмәсебеҙ Резеда Рифғәт ҡыҙы Сәйҙәрова тураһында.**

**Гөлназ МАНАПОВА**
**әңгәмәләште.**

*ИР-ЕГЕТ ҺҮҘЕ*

## БАЙРАМ МЕНӘН!



**Мәктәптә уҡығанда 8 март алдынан концерт номерҙары әҙерләүебеҙ, байрам тантанаһында әсәйҙәрҙең ҡыуанышып сығыштарыбыҙҙы ҡарауы хәтерҙә уйылып ҡалған.**

Башланғыс синыфта уҡыған саҡта уҡытыусыбыҙ малайҙарға хәрбиҙәр бейеүен өйрәтте. Концертта сығыш яһау өсөн һәр беребеҙгә уйынсыҡ ҡылыс алып килергә ҡушты. Ул саҡтағы ауыл магазинында бындай уйынсыҡтың булғаны ла юҡ, "Атайҙарығыҙ эшләп бирһен", тигән күрһәтмә генә алдыҡ. Ә минә кем оҫталар икән ул ҡылысты? Атай алты йәшемдә саҡта вафат булды, ағайҙар ҡалала уҡый. Утынлыҡта оҙаҡ маташтым таҡта киҫәге менән. Йышҡы менән юнғылап, балта менән сапҡылап ҡарайым, таҡтам бер ҙә ҡылыс рәүешен алмай. Бер мәл балта менән бармаҡты әләктерҙем, шабырлап ҡан китте. Шул саҡ әсәй килеп сығып, йәһәт кенә бармаҡты йыуып, марля менән уратты, күҙ йәштәремде һөрттө лә ҡайҙалыр сығып китте. Байтаҡ ваҡыт үткәс, ҡулына ҡыҙғылт-һары уйынсыҡ ҡылыс тотоп ҡайтып керҙе.

Әсәйҙәрҙе матур итеп ҡотланыҡ, ә ҡылысымды малайҙар алмашлап ҡулдарынан төшөрмәй йөрөттө. Һуңынан белдем: Бөйөк Ватан һуғышында 112-се башҡорт кавалерия дивизияһы яугирҙарынан беренсе булып дошман танкын шартлатҡан ауылдашыбыҙ Ғарифулла Ғафаровтың улы туғандарының малайҙарына бүләк итеп килтергән булған ул ҡылысты.

Һәр тере йән эйәһе кеүек, әҙәм балаһы ла был донъяға килгәс тә әсәһе ҡурсалауына дуға була. Бала сағында алған наҙ, матур тәрбиә кешегә үҙ тормошон уңышлы итеп ҡорорлоҡ көс, бол бирә. Минә бер баланың тәрбиәсеһе әрләүенә яуап итеп әйткән һүҙе ныҡ оҡшай: "Әгәр әсәйемдең ниндәй матур һүҙҙәр менән иркәләүен белһәгеҙ, мине улай әрләмәҫ инегеҙ", - ти ул. Мин әле лә ауыр саҡтарҙа әсәйемдең һөйөү, наҙ тулы ҡарашын иҫкә төшөрәм, унан көс алам. Әсә мөхәббәтенән дә көслөрәк бер нәмә лә юҡтыр. Ул һүнмәй ҙә, һүрелмәй ҙә.

Мин әле лә 8 мартты әсә кешене ҡәҙерләү, ҙурлау көнө итеп ҡабул итәм. Был изге көн алдынан теләгем бер генә: донъяларыбыҙ тиҙерәк тынысланһын, ил һағында тороусылар иҫән-имен ҡәҙерләләре янына ҡайтһын. Ҡылыс болғау бары тик бейеүҙәрҙә генә ҡалһын.

**Марат ӘМИНЕВ,**
**яҙыусы.**

ИНТЕРНЕТТАН



# КИВИ АША... яҡшы кәйефтә булырһың

■ Яңы Зеландия ғалимдары стресс менән көрәш ысулдары өҫтөндә эшләгәндә яңы асыш яһаған. Баҡтиһәң, гел яҡшы кәйефтә булыу өсөн көнөнә 2 киви ашау ҙа етә икән. Етмәһә, был емеш-еләк ҡәһүә һәм тәм-томдо ла алыштыра ала. Кивиның составындағы биологик актив матдәләр яҡшы кәйеф сығанағы ғына түгел, ә стресс һәм депрессия менән көрәшеүҙә яҡшы ярҙам күрһәтә. Шулай уның составындағы емеш-еләк кислоталары артыҡ ауырлыктан да ҡотҡара. Һомғол буйлы булыу шулай уҡ яҡшы кәйеф тәьмин итә, ти белгестәр.

■ АҠШ-ның Милли сәләмәтлек институтында үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, һөт коктейлдәре газлы эсемлектәр кеүек үк һаулыҡҡа ҙур зыян килтерә. Тикшеренеүҙәрҙең етәксеһе Эрик Стайс белдереүенсә, коктейль составындағы шәкәр һәм майҙар уны хәүефле эсемлектәр рәтенә ҡуя. Һимереүҙе иҫкәртеү буйынса үткәрелгән тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһендә шул асыҡланған: кеше шәкәрҙе күберәк ҡулланған һайын, ул был татлы аҙыҡһыҙ тора алмай башлай. Сөнки шәкәр баш мейеһенең ҡәнәғәтләнеү үҙәген стимулләштерә. Ғалимдар фекеренсә, шәкәрле ризыҡтарҙы даими ҡулланыу баш мейеһендә психик ауырыуҙары булған кешеләрҙең баш мейеһендәге кеүек тайпылыштарға алып килә.

■ Ғалимдар ҡояштың ультрафиолет нурҙарының тағы бер ыңғай яғын асыҡлаған. Ҡояшлы көндә асыҡ һауала ҡыҫҡа ваҡытта ғына булыу ҙа артериаль ҡан баҫымын түбәнәйтә икән. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусылар махсус солярийҙа 20 көн буйынса "ҡояш ванналары" ала. Әммә уларҙың ярտыһы ультрафиолет нурҙары аҫтында ҡыҙына, ә ҡалған кешеләрҙе был нурҙарҙан үҙенсәлекле быяла һаҡлай. Эксперименттың һөҙөмтәләрен тикшереп ҡарағас, шул асыҡлана: тәүге төркөмдәге кешеләрҙең ҡан тамырҙарындағы баҫым башҡаларһыҡына ҡарағанда түбәнерәк була. Табиптар раҫлауынса, ультрафиолет нурҙары тәьҫирендә тире күҙәнәктәре азот молекулаларын синтезлаусы ферменттарҙы артығыраҡ эшләп сығара. Был матдә ҡанда күтәрелгәс, ҡан тамырҙары киңәйә һәм ҡан баҫымы түбәнәйә. Юғары ҡан баҫымы инсульт һәм инфарктҡа килтереүсе төп сәбәп булыуын иҫәпкә алғанда, "ҡояш ванна"лары кешенең ғүмерен оҙайта.

■ Немец ғалимдары дәлилләүенсә, муйын ауыртыуы - психологик проблема. Тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, муйындағы ауыртыуҙар хәүеф тойғоһо һәм депрессия менән туранан-тура бәйле. Шуға ла ғалимдар табиптарға сирлегә диагноз ҡуйғанда иғтибарлыраҡ булырға кәңәш итә. Тикшеренеүҙәрҙә үҙ ғүмерендә бер тапҡыр булһа ла муйын ауыртыуына зарланған 448 ауырыу ҡатнаша һәм табиптар уларҙың 20 процентының депрессия, 28 процентының хәүеф тойғоһо менән бәйле булыуын билдәләй.

■ Гарвард ғалимдары баш мейеһенең әүҙемлеген арттырыуға булышлыҡ итеүсе таблеткалар уйлап тапҡан. Тикшеренеүҙәр үткәреүсе ғалимдар әйтеүенсә, был асыш өлкән кешеләрҙең мейеһенә яңырырға мөмкинлек бирә, бынан һуң ул мәғлүмәтте ете йәшлек баланың мейеһе кеүек ҡабул итә башлаясаҡ. Етмәһә, ул быға тиклем йоҡлап ятҡан һәләттәрҙе уятыу көсөнә лә эйә.

УЙЛЫ ҠАТЫН-ҠЫҘ

**Тормош үтә ябай бер сюжетҡа ҡоролған - ул да булһа, изгелек менән яуызлыҡтың көрәше. Аҙмышыбыҙ маңлайыбыҙға яҙылғас, шул сюжеттың ҡатмарлы бормалары араһында дөрөҫ юлдан яҙмаҫ өсөн беҙгә һайлау мөмкинлеге бирелгән - ожмахҡа илтер юлдан бараһыңмы, тамуҡҡа илтеренәнме - уныһы һинең эш. Шуға ла беҙгә аҙашмаҫ өсөн өлгө кәрәк. Улары күктән төшмәй, эргәбеҙҙә йөрөй. Сибай ҡалаһындағы "Башмаркет" магазиндар селтәре етәксеһе Зифа Нәҙип ҡыҙы ЯҠУПОВА менән һөйләшкәндә, ул ана шундай өлгөләрҙең береһелер, тип уйланылды.**

# ӨЛГӨЛӘР КҮКТӘН ТӨШМӘЙ...



## Берәүҙән өсәү яҡшы

Башланғыс класта уҡығанда "Кем булырға теләйһең?" тигән темаға һүрәт төшөрөргә ҡушҡайнылар. Үлсәгес артында торған һатыусыны эшләгәнем хәтерҙә. Эшләнем һәм магазин тураһындағы уй-хыял шунын менән онотолдо. Мәктәпте тамамлағас, атай-әсәйем уҡытыусы һөнәрен һайларға күндерҙе, һәм мин Сибай институтына уҡырға индем. Диплом алыу осором йәш белгестәр артыҡ кәрәкмәгән мәлгә тура килде. Шулай ҙа тыуған Әбйәлилемә ҡайтып (мин үҙем Рысҡужа ауылынан), ике йыл Әбдрәш урта мәктәбендә эшләнем.

Буласаҡ тормош иптәшем Баймаҡ районы Әбделкәрим ауылы егете менән студент саҡтарҙан дуҫ инек. Өйләнештек. Ирем дә мәктәпкә эшкә килде. Бер йылдан ул, ғаиләмде мәктәптәге эш хаҡына аҫырай алмайым, тип, сауҙа өлкәһенә эшкә күсте, бер бәләкәй генә павильон алып, мине лә һатыусы булырға өгөтләне. Ул ваҡытта ғаиләбеҙҙә ике ҡыҙыбыҙ үҫә ине. Балалар бәләкәй булһа ла, яңы эш башларға батырсылыҡ иттек. Сауҙа өлкәһе минең өсөн бөтөнләй ят ине. Шулай ҙа яңы һөнәрҙә хеҙмәт итергә тәүәккәлләнем.

Бер йыл эшләгәс, магазинды икәү итергә булдыҡ. Ирем күптән "Башмаркет" селтәре ойошторорға хыяллана ине. Кешелә ниндәйҙер көслө ынтылыш булһа, Аллаһы Тәғәлә уның юлдарын аса - икенсе магазиныбыҙ, шунан өсөнсөһө енел генә асылып китте... Өс магазин араһындағы бөтә эштәрҙе үҙем алып барҙым, һатыусы ауырып эшкә сыҡмаһа, һатыусы булдым, бухгалтер урынында ла, дворник урынына ла эшләнем. Ал-ялһыҙ, ҡай саҡ төнгә тиклем эшләйем. Шул арҡала ирем менән аңлаша алмаған мәлдәр йышайҙы. Мөнәсәбәттәр ҡатмарлашып, ғаиләбеҙҙе тарҡатыуға тиклем барып еттек. Гөйеп сыбыҡтың ике осонда ла булғандыр инде... Ә милек бүлешкәндә, магазиндар миндә ҡалды...

## Заман талаптары

Фатир, машина һатып алып, матди яҡтан ихтыяждар кәмегәс, киләсәккә маҡсаттарым юғала, тормошҡа ҡыҙыҡһыныуым кәмей һымаҡ тойола башлағайны. Эшкә бирелеп китеп, һаулығым тураһында ла уйламағанмын. Берҙән-бер көндө шуны шәйләнем һәм иң беренсе сиратта психологтарға мөрәжәғәт иттем. Психологтар менән эшләй башлағас ҡына миңә нимәләр етмәгәнен, ни эшләргә кәрәклеген аңланым. Баҡтиһәң, институтты бөткәс, ун һигеҙ йыл буйына бер китап та уҡымағанмын, шәхси үҫешем өсөн көс һалмағанмын, көрсөккә килеп төртөлгәнмен икән. Минең бит ошо сауҙа өлкәһенә ҡағылышлы курстарҙа ла уҡығаным булманы. Хәҙер килеп, замандан артта ҡалмайым, үҫешәм тиһәң, үҙ өҫтөңдә эшләргә, уҡырға, өйрәнергә кәрәк, тигән һығымта яһаным...

Яңы юлға баҫтырған остазым барлыҡҡа килде. Ул бер йыл буйына көн һайын иртәнге сәғәт биштән ун километр ара йәйәү йөрөргә ҡушты. Уның һүҙен тыңлап, энергиямды, хәлемде, һаулығымды нығытыр өсөн, бер йыл буйына йәйәү йөрөнөм. Шул бер йыл эсендә күңелем

ӘЙТӘГҮР!

# ЗАМАН ҠЫҘҘАРЫ НИНДӘЙ?

**Наҙлы миҙгелдең тәүге көндәрен Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнө илаһи матурлыҡ менән балҡыта. Был көн һөйөү, гүзәллек, хәстәрлек, нәфислек һәм йән изгелеге кеүек саф сифаттар һәм тойғолар менән һуғарылған. Ошо күркәм байрам уңайынан заман егеттәре заман ҡыҙҙары тураһында ниндәй фекер йөрөтә икәнен белештек:**



***Ирек МЫРҘАБУЛАТОВ, инженер. Өфө ҡалаһы:*** Асылда, был темаға сумып китергә булыр ине. Бөгөнгө капитализм дәүерендә ир-егет менән ҡатын-ҡыҙ араһында алыш-бирешкә ҡоролған мөнәсәбәттәрҙең киң ҡолас алыуы бәхәс тыуҙырмауын һыҙыҡ өҫтөнә алам. Үҙебеҙҙе бер-беребеҙгә һатабыҙ, тип әйтергә мөмкин, сөнки күпселек осраҡта баҙар артериялары буйлап аҡсаны ир кеше йөрөтә, ә төрлө компаниялар, шуны аңлап, ир-егеттәрҙең ҡатын-ҡыҙға ҡутарып аҡса түгеүенән файҙа таба. Шуның өсөн дә оятһыҙ енси контент менән донъя тулған. Уның нигеҙендә егет кешенең, әлбиттә, ҡыҙҙарҙың матурлығы тураһында мәғәнәһеҙ һығымта яһауы ихтимал. Был бик киҫкен тема, ләкин - ысынбарлыҡ. Енси теләк һәм уға ҡағылған нәмәләр бик үтемле тауар булып китте. Кешенең маркетологтар ҡулында үҙе лә тауарға әйләнеүе - бик ҡыҙғаныс хәл.

Әҙәм балаһына иҫ китмәле аҡыл бирелгән. Ир-егеткә лә, ҡатын-ҡыҙға ла. Ләкин инстинкттарҙан арына алмау, енси теләктәрҙе генә ҡайғыртыу кешене ныҡ кәмһетә, түбән төшөрә. Бының менән һәр кем үҙе лә, күмәкләшеп бергә көрәшеп тә, ҡатын-ҡыҙ менән ир-егет донъяһын ошо әшәкенән ҡотҡарырға тейеш!

***Анил БӘШИРОВ, студент. Ҡаҙан ҡалаһы:*** Хәҙерге заманда ҡыҙ балаларға тейешле тәрбиә бирелмәй - минең төп фекерем шулай. Ҡатын-ҡыҙ тәү сиратта - әсә кеше, ир ҡатыны. Ләкин...

таҙарынды, һаулығым нығынды, йәйәү йөрөүҙең яңы тормошома юл асыуын, ихтыяр көсө тәрбиәләүен, ялҡаулыҡты еңергә ярҙам итеүен тойҙом. Һаулығым ҡаҡшауының сәбәбе бөтә эште яңғыҙ һөйрәүемдән булған икәне лә аңлашылды. Остазым кәңәшен тыңлап, үҙемә бер ышаныслы ярҙамсы алдым. Ярҙамсым булғас, ысынлап та, күҙҙәрем асылып, тирә-яҡҡа ҡарарға мөмкинлек барлыҡҡа килде - бөтә эште бер елкәгә һалыу ярамай икән...

### Алып-һатыу һәм етештереү

Киң таралған үҙенсәлекле магазин селтәрҙәре араһында эшләйем. Тик айырмабыҙ бар: беҙ Сибай халҡына үҙебеҙҙең ерлектә етештерелгән тауарҙарҙы, мәсәлән, ҡомалаҡҡа бешерелгән икмәктәр, ит комбинатында етештерелгән Сибай колбасаларын һатабыҙ. Күберәк хәләл йүнәлешкә өҫтөнлөк бирәм. Беҙҙә күп байрамдар, мәжлестәр бишбармаҡһыҙ үтмәй, шуға ҡулдан эшләнгән һалмаларҙы ихлас һатып алалар. Башҡорттар етештерә белә, тик сауҙаға артыҡ оҫталыҡтары юҡ, шундайҙар ҡымыҙ, буҙа, ҡорот кеүек ризыҡтары менән беҙҙең магазиндар аша сауҙа итә ала. Әлегә алып-һатыу менән генә шөғөлләнәм, етештереү өлкәһе тураһында төрлө уйҙарым, идеялар бар былай.

### Етеш тормош - егәрлелектән

Элек шулай фекерләй инем: мин үҙемә эшләйем, эшкә ҡасан барырға теләйем, шунда барам, ҡасан теләйем, шунда ҡайтам, үҙемә үҙем хужа. Хәҙер аңланым: ҡайҙа эшләһәң дә, иртә тороп, йоҡларға иртәрәк ятырға кәрәк - иртә башлаған эш иртә бөтә. Эшкә ваҡытында барып, ваҡытында ҡайта белергә кәрәк, үҙемә эшләйем, тигән хәлдә лә, анығыҡ эш графигы булырға тейеш.

Беҙ булмаған ерҙә һәйбәт, тиһәләр ҙә, һәр эштең дә ауырлығы, еңеллеге бар. Еңел урын эҙләп, үҙ урынын тапмаған кешеләр былай ҙа артҡандан-арта бара. Минең ул яҡтан ҡаратырышлығым бар, әгәр тәүгә ҡыйынлыҡтарҙан ҡурҡып, эшемә ҡул һелтәһәм, күптән магазиндарым ябылған булыр ине. Бер эште башлағас, урынына еткерергә кәрәк, шуға әлеге мәлдәге кимәлем менән ҡәнәғәтмен, киләсәктә яңы үрҙәргә өлгәшергә кәрәк, тип уйлайым, сөнки балаларыма етеш йәшәргә әсәй кәрәк. Мин уларҙы иркәләтәм, әммә етешлек менән үгел. Ул яҡтан, алай ҙа, балаларым талапсан түгел, әсәй беҙгә артығы кәрәкмәй, тиҙәр. Бәләкәй саҡтарында әле кеше фатирында йәшәгәндә үк, әсәй, беҙгә артыҡ уйынсыҡ алма, ти торғайнылар. Өйлә булғас, машинаға аҡса йый, аҡсаңды беҙгә түкмә, кейемебеҙ бар, артығы кәрәкмәй, тип аптыраттылар. Ул нимәнән киләләр, белмәйем. Тәүге павильонды асҡас, бар, магазинға инегеҙ, нимә теләйһегеҙ, шуны алып ашағыҙ, тинем. Әгәр шул мәлдә, бер нәмәгә лә теймәгеҙ, тигән тыйыу булһа, улар мине аңламаҫтар ине. Бер-ике тапҡыр ашап туйып сыҡтылар ҙа, ҡабат магазинға барып та ураманылар, бала бит тыйған һайын кисәткән ергә ынтыла.

Былтырҙан үҙем өҫтөндә эшләй башлап, үҫеш юлына иғтибар йүнәлткәс кенә, Хоҙайға рәхмәт әйтергә өйрәндем, сөнки юлыма осраған кешеләрҙең һәр береһе ниндәйҙер һабаҡ бирә. Бәҡтиһәң, төрлө хәл-ваҡиғаны, ситуацияны төрлө яҡтан ҡарарға кәрәк икән. Негатив хәлдә булһаң, һәр ситуацияны минусҡа көйләп, үҙеңә ҡыйынлыҡ килтергәнеңде һиҙмәй ҙә ҡалаһың. Әгәр шул мәлдә, был һынау миңә яңы юл асыу өсөн бирелгән, тип ҡараһаң, ул икенсе яҡтан еңел генә хәл ителә икән. Ҡыҙыҡ, әммә шулай.

### Ауырыу һәм ғәҙәт

Иртәнге йәйәү йөрөүҙәр энергияны нығыҡ күтәрә, ярҙамға мохтаж кешеләр үҙҙәре һине эҙләп килә. Кем өсөндөр өлгө булып, башҡаларҙы яҡшылыҡҡа әйҙәү ҙур бәхет, ҡыуаныс тойғоһо бирә. Беҙҙә бит яҡшы юлға әйҙәүгә ҡарағанда, насар юлға этәреүселәр күберәк. Аллаһы Тәғәлә беҙгә туранан-тура мәғлүмәт бирмәй, уны эргәләге кешеләр аша еБәрә. Әле телеграмм-каналда иртәнге йәйәү йөрөүҙәр, тормошомдағы үҙгәрештәр тураһында "Мин - ҡатын-ҡыҙ" тигән бит алып барам. Остазым йыш ҡына, ҡатын-ҡыҙҙарҙы үҫтерергә кәрәк, уларҙы үҫтерһән, аң бирһәң, уларҙың ғаилә мөнәсәбәттәре лә ыңғайлана, тормоштары ла үҙгәрә, тип ҡабатлай, шуға ҡатын-ҡыҙҙарға ярҙам итеүҙе күңел талабым һымаҡ күрәм. Еңел түгел, аңлайым, остазым да, бөтә кешеләр ҙә эшләй белә, әммә үҙ-үҙең өҫтөндә эшләүе иң ауыры, ти. Бик һирәктәр генә был юлға баҫырға үҙендә көс таба ала, был тормошта насар ғәҙәттәрҙән арыныуы иң ауыры. Ауырыу китһә лә, ғәҙәт ҡалмай, тип бушҡа әйтмәгәндәрҙер

### Күңел ҡушҡанса…

Үҙ өҫтөмдә эшләмәгәндә миндә бер Зифа ғына йәшәй ине, үҙен, аҡыллыға һанап, шул Зифа минең менән идара итә торғайны. Үҙ өҫтөмдә эшләй башлағас, икенсе Зифа килеп сыҡты ла, икеһе ике яҡтан кәңәш бирә башланы. Ҡай саҡ яйлап ултырып, икеһенең дә кәңәшен уйҙан үткәрәм. Икеһе лә хаҡлы һымаҡ булып китә ҡайһы саҡта. Остазыма: "Был ике Зифа бер-береһе менән бәхәсләшәләр ҙә китәләр", - тиһәм, ул: "Ҡатын-ҡыҙ аң менән түгел, күңеле менән йәшәргә тейеш, күңелеңдә ҡайһыныһы дөрөҫ тип уйлайһың, шуны тыңла", - ти. Ысынлап та, күңелгә килгән аҙымды эшләһәм, шул юлдан тағы ла ниндәйҙер яңы юл асыла, күңелде тыңламаһаң, юлдар ябылған һымаҡ була. Шуға күңелгә килгән хис-тойғолар менән йәшәргә кәрәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Иртәнге биштә тороп, ун саҡрымлыҡ юлға сығырға йыйынмайығыҙмы? Йыйынһағыҙ, уныһы һеҙҙең һайлау, бар ихтыяр көсөн туплап, тормошҡа ашырыу - яҙмыш бүләге, яңы юл. Хәйерле юл һеҙгә!**

**Радик ӨМӨТҠУЖИН**
**яҙып алды.**

Хәҙер ҡайҙа ҡарама үҙеңде генә яратыу, үҙ күңелеңде генә күреп йәшәү, иң тәмлеһен генә татыу идеялары пропагандалана. Шул сәбәптән дофамин *(баш мейеһенең эндокрин күҙәнәктәрендә етештерелгән нейромедиаторҙарҙың береһе. Кешегә шатлыҡ килтереүсе теләнә ниндәй мәлдәр был биологик актив матдәнең ҡанға сығарылыуы менән оҙатыла)* кимәле бик юғары булған ҡулланыусылар быуыны сәскә ата. Ул тағы ла юғарыраҡ күтәрелсәк әле, сөнки сикләнмәгән нәфсе үҙе генә тыйылмаясаҡ. Фиҙаҡәрлек, хәстәрлек, сыҙамлыҡ һәм рәхимлек онотола бара. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, күбеһенсә шулай килеп сыға.

Ҡайҙа күрәм мин өмөттө? Тик дин юлынан барған ҡыҙҙарҙа. Әлбиттә, беҙ барыбыҙ ҙа кешеләр һәм кешегә хас етешһеҙлектәр һәр кемдә йәшәй, мәсәлән, хаҡ юлда ла ваҡсыл ҡыҙ тап булыуы ихтимал, ләкин уның ниндәйҙер әхлаҡ нормалары, принциптары буласаҡ барыбер.

Ислам диненә егет менән ҡыҙҙың күп һәм оҙаҡ ваҡыт осрашып йөрөү ғәҙәте юҡ, йыш ҡына өсөнсө-дүртенсе күрешеүҙән өйләнешә һалалар. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, ундай ғаиләләр нығыраҡ һәм татыураҡ. Сөнки никахтары әҙерҙе ашап ятыуға нигеҙләнмәгән, уларҙы донъяға бер үк ҡараш һәм ғаилә ҡиммәттәре берләштерә. Мөхәббәт ир менән ҡатын бер-береһенә ҡарағанда түгел, ә бер яҡҡа ҡараш йүнәлткәндә нурлы сәскә ата. Беҙҙең заманда егет һәм ҡыҙҙың бәйләнештәре ғишыҡ тойғоһона ғына нигеҙләнеп, аҙағынан тәрән ҡәнәғәтһеҙлектә ҡалдыра. Сөнки ғишыҡлыҡ ялҡынлы төндәрҙән һуң ауыр көндәргә килтерә.

Шулай итеп, иң тәүҙә мин ҡыҙҙы, иманына ҡарап, туғандары хаҡында белешеп, ғаиләһендә кем баш булыуын тикшереп, үҙе менән әңгәмә ҡороп, никахтан нимә көткәнен һорашып һайлар инем. Ҡиәфәт бында мөһим түгел, иң һөйкөмлөләргә лә күҙ өйрәнәсәк, ә холҡо насар булһа, бөттө баш инде.

***Ренат НИҒМӘТУЛИН, тәҙәүсе бригадир. Өфө ҡалаһы:*** Тәү сиратта нимә әйтер инем: заман ҡыҙҙары совет осорондағы ҡатын-ҡыҙҙарҙан айырыла, әлбиттә. Элек бит тота килеп кейәүгә сығып, балалар табып, колхозда эшләп, ирешә-талаша йәшәне күптәр. Хәҙер тормош ҡыҙығыраҡ. Заман ҡыҙҙары тормош иптәше һайларға ашыҡмай. Ул ир-егеттән бойһондороҡло түгел, аҡса таба, етеш йәшәй ала. Ә ир-егет уға һөйөп-һөйөлөү өсөн генә кәрәк. Ир-егет менән ҡатын-ҡыҙ бәйләнеше артабан ошо һорауҙы тыуҙырасаҡ: ә нимә өсөн бала табырға? Мин-минлек сәскә атҡан заманда ҡатын-ҡыҙ үҙенең һаулығын, гүзәллеген, ваҡытын балаға түккеһе килерме икән? Икенсе яҡтан, ғаилә алдына килеп баҫҡан финанс проблемалары - ипотека, кредиттар, һалымдар ҙа ҡурҡыта уны... Шуға ла матур һүҙҙәр менән генә заман ҡыҙҙарын әсир итеп тә, өйләнешергә өгөтләп тә булмай хәҙер. Уәт, мәсьәлә!

**Рәзил ШӘМСЕТДИНОВ**
**яҙып алды.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ИЗГЕЛЕК ҺӘМ ГҮЗӘЛЛЕК ТУРАҺЫНДА ХАТТАР

### "Сәнғәтте аңлау"

Әгәр халыҡ ижадының төбөнә төшөнөп етһәң һәм уны "артыҡ ябай" тип иҫәпләүҙе ситкә ҡуйһаң, ул бөтә сәнғәтте аңларға ярҙам иткән ниндәйҙер бер шатлыҡ, үҙаллы ҡиммәт, сәнғәтте аңларға ҡамасау иткән талаптарҙан (тәү сиратта "оҡшашлыҡ"ты талап итеүҙән) азат булған башланғысҡа әүерелә ала. Халыҡ ижады сәнғәттең шартлы икәнен аңларға ярҙам итә.

Ни өсөн тап шулай? Ни өсөн нәҡ халыҡ ижады ошо башланғыс һәм иң яҡшы уҡытыусы булып тора? Сөнки халыҡ ижадында меңәр йыллыҡ тәжрибә кәүҙәләнделгән. Кешеләрҙе "мәҙәни" һәм "мәҙәниһеҙ" тип бүлеп ҡарау йыш ҡына "кала кешеләренең" уғата тәкәбберлегенә һәм үҙен артыҡ юғары баһалауына бәйле килеп тыуа. Крәҫтиәндәрҙең үҙенең ҡатмарлы мәҙәниәте бар, һәм ул иҫ киткес фольклорҙа ғына (тәрән йөкмәткеле традицион урыҫ крәҫтиәндәре йырын сағыштырып ҡарағыҙ, исмаһам), йәки Себерҙәге халыҡ сәнғәте һәм ағас тәҙәләшөндә генә түгел, ә крәҫтиәндәрҙең ҡатмарлы әҙәп ҡағиҙәләрендә, матур урыҫ туйҙарында, ҡунаҡтарҙы ҡабул итеү йолаларында, крәҫтиәндәрҙең бергә ултырып ризыҡланыуында, ҡатмарлы хеҙмәт гөрөф-ғәҙәттәре һәм байрамдарында ла сағыла.

Гөрөф-ғәҙәттәр юҡҡа ғына барлыҡҡа килмәгән. Улар ҙа маҡсатҡа ярашлы булыуы йәһәтенән быуаттар буйы һайлау үткән, ә халыҡ сәнғәте - матурлыҡ буйынса һаналған. Был традицион формалар һәр ваҡыт иң яҡшыһы һәм һәр ваҡыт уларға әйәрергә кәрәк, тигәнде аңлатмай. Яңыға, художестволы асыштарға (традицион формалар ҙа ҡасандыр асыш булған) ынтылырға кәрәк, әммә яңы нәмә элеккеһен, традицион булғанын күҙ уңында тотоп барлыҡҡа килергә тейеш, ә һөҙөмтәлә боронғоно, тупланғанды бөтөрөү өсөн түгел.

* * *

Халыҡ ижады скульптураны аңлау өсөн дә бик әһәмиәтле. Материалды тоя белеү, уның ауырлығын, тығыҙлығын, формаһының матурлығын аңлау ауылдарҙағы ағас һауыт-һабаларҙа асыҡ сағыла: байрамдарҙа ауыл өҫтәлдәренә ҡуйылған семәрле ағас тоҙ һауыттары, ағас ижауҙарҙа. И.Я. Богуславская үҙенең "Төньяҡ хазиналары" тигән китабында ижауҙар (ковш-скопарь) һәм өйрәк формаһында эшләнгән тоҙ һауыттары тураһында былай тип яҙа: "Йөҙөп йөрөгән, бөйөк һәм тыныс, ҡупырайған ҡош образы өҫтәлде биҙәгән, ҡунаҡ табынын халыҡ риүәйәттәре поэзияһына сорнаған. Был әйберҙәрҙең скульптуралы пластик образды унайлы һәм һыйҙырмалы һауыт менән берләштергән камил формаһы әллә нисә быуын оҫталары тарафынан яһалған. Талғын һыҙаттар, силуэтының тулҡынға оҡшаған һыҙыҡтары, гүйә, үҙ эсенә талғын ғына һыу ағышын алған. Бына шулай ысын үрнәк көнкүреш әйберенә йән өргән, шартлы формаға асыҡлыҡ индергән. Боронғо осорҙа уҡ ул урыҫ милли һауыт-һабаһы төрө булараҡ нығыған".

Халыҡ сәнғәте әҫәрҙәре формаһы - ваҡыт тарафынан шымартылған форма. Төньяҡ ауылдарындағы йорттарҙың ҡыйыҡ остары ла шулай уҡ шымартылған. Был "аттарҙы" совет яҙыусыһы, замандашыбыҙ Федор Абрамов юҡҡа ғына үҙенең матур әҫәрҙәре символы итеп алмағандыр ("Аттар").

Был "аттар" нимә ул? Ауыл йортоноң башындағы ҡыйыҡ таҡталарының осон баҫырыу, уларҙы нығытыу өсөн ҙур, ауыр бүрәнә һалынған булған. Бына ошо бүрәнәнең бер осо төп яғы менән һалынған, шунан балта ярҙамында аттың түшен һырлағандар. Был ат фронтондан өҫтәрәк торған һәм йорттағы ғаилә тормошоноң символы булған. Ниндәй матур итеп эшләнгән был ат! Унда бер үк ваҡытта оҙаҡ йылдар үҫкән ағастың мөһабәтлеге лә, йорт һәм тирә-яҡҡа хакимлыҡ иткән аттың бөйөклөгө лә һынланыш тапҡан.

**Дмитрий ЛИХАЧЕВ.**



### 10 МАРТА
### ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.25, 0.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.55 Премьера. "Время героев". [16+]
13.00, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Казанова. В бегах". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.10, 3.30 Т/с "Кулагины". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Потерянный ключ". [12+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 Сәләм.
10.00, 0.00 Т/с "Сируси". [16+]
11.00 Новости недели (на рус. яз.). [12+]
11.45, 16.45, 17.45, 21.15 Интервью. [12+]
12.00 Специальный репортаж. [12+]
12.15, 20.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]
12.30 Территория счастья.
13.30, 18.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз.). [12+]
14.00 Бәхет иле.
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]
15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]
16.00 Башҡорттар. [12+]
16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
18.00 Защитники Отечества. [12+]
19.00, 4.00 Телецентр. [12+]
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.30 Д/ф "Рыцари леса". [12+]
22.00 Тайм-аут. [12+]
23.00 Ҡустәнәс. [12+]
23.30 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]
0.45 Бәхет иле. [12+]
2.15 Моноспектакль "Цыплёнок из букваря". [12+]
3.45 Письма солдатам. [12+]
5.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]
5.30 Территория счастья. [12+]

### 11 МАРТА
### ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Казанова. В бегах". [16+]
0.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.10, 3.30 Т/с "Кулагины". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Потерянный ключ". [12+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 Сәләм.
10.00, 0.00 Т/с "Птица счастья". [12+]
11.00, 21.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]
11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
11.45, 16.45 Интервью. [12+]
12.00 Тайм-аут. [12+]
12.30 Территория счастья.
13.30, 18.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз.). [12+]
14.00 Бәхет иле.
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 Городок АЮЯ. [6+]
15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]
16.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]
17.00, 22.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.45 Криминальный спектр. [16+]
18.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]
19.00, 4.00 Телецентр. [12+]
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]
20.30 Легенды Урала. [12+]
23.00 Бишбармак. [12+]
0.45 Бәхет иле. [12+]
2.15 Спектакль "Перед свадьбой". [12+]
5.30 Территория счастья. [12+]

### 12 МАРТА
### СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Казанова. В бегах". [16+]
0.10 Премьера. "Шоу Вована и Лексуса". [16+]
1.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.10, 3.30 Т/с "Кулагины". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Потерянный ключ". [12+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 Сәләм.
10.00, 0.00 Т/с "Птица счастья". [12+]
11.00 Дорога к храму. [6+]
11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
11.45, 16.45 Интервью. [12+]
12.00 Дознание. [16+]
12.15 Криминальный спектр. [12+]
12.30 Территория счастья.
13.30, 18.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз.). [12+]
14.00 Бәхет иле.
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 Физ-ра. [6+]
15.30 Зерно. [6+]
16.00 Автограф. [12+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.45, 20.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]
18.00 Тормош. [12+]
19.00, 4.00 Телецентр. [12+]
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.30 Защитники Отечества. [12+]
21.00 Спроси у Дубовского.
22.00 Историческая среда. [12+]
23.00 Байыҡ. [12+]
0.45 Бәхет иле. [12+]
2.15 Спектакль "Не улетайте, журавли". [12+]
3.45 Письма солдатам. [12+]
5.00 Тайм-аут. [12+]
5.30 Территория счастья. [12+]

### 13 МАРТА
### ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Казанова. В бегах". [16+]
0.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.10, 3.30 Т/с "Кулагины". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Потерянный ключ". [12+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 Сәләм.
10.00, 0.00 Т/с "Птица счастья". [12+]
11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]
11.30, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
11.45, 16.45 Интервью. [12+]
12.00, 17.30 Новости СВО (на рус. яз.). [12+]
12.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]
12.30 Территория счастья.
13.30, 18.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз.). [12+]
14.00 Бәхет иле.
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 Сулпылар. [6+]
15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]
16.00 Патриот РФ. [12+]
16.15 Дознание. [16+]
17.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]
17.45 Криминальный спектр. [16+]
18.00 Йома. [6+]
18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Динамо" (Москва). КХЛ.
22.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]
23.00 Колесо времени. [12+]
0.45 Бәхет иле. [12+]
2.15 Спектакль "Судьба выбранная мной". [12+]
3.45 Письма солдатам. [12+]
4.00 Телецентр. [12+]
5.30 Территория счастья. [12+]

### 14 МАРТА
### ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.55 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
14.40 "АнтиФейк". [16+]
15.10 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Голос". Новый сезон. [12+]
23.30 Премьера. "30 лет вместе". "Магия кино". [12+]
0.55 Д/ф "К 90-летию со дня рождения. Леонид Енгибаров". [12+]
1.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Кулагины". [16+]
17.00 Прямой эфир. [16+]
21.30 "Один в один". [12+]
23.55 Торжественная церемония вручения Российской национальной музыкальной премии "Виктория".
2.00 Х/ф "Ни за что не сдамся". [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 Сәләм.
10.00, 0.30 Т/с "Птица счастья". [12+]
11.00 Йома. [6+]
11.30, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
11.45, 16.45, 17.45, 21.15 Интервью. [12+]
12.00, 17.30 Новости СВО (на баш. яз.). [12+]
12.15 Криминальный спектр. [12+]
12.30 Территория счастья.
13.30, 18.30, 22.30, 2.15 Новости (на баш. яз.). [12+]
14.00 Бәхет иле.
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 Тирмәкәй. [6+]
15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]
16.00 Аль-Фатиха. [6+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
18.00 Башҡорттар. [12+]
19.00 Честно говоря. [12+]
19.45 История одного села. [12+]
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]
20.30 Мегаселo. [12+]
22.00 СВОих не бросаем. [12+]
22.15 Письма солдатам. [12+]
23.00 Ете егет. [12+]
0.00 Ҡурай-шоу. [12+]
1.15 Бәхет иле. [12+]
2.45 Спектакль "Пылкие любовники". [12+]
4.30 Защитники Отечества. [12+]
5.00 Хазина. [12+]
5.30 Территория счастья. [12+]

### 15 МАРТА
### СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 "Вспомнить всё". [12+]
11.05 "Играем свадьбу!" [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 Поехали! [12+]
13.15 Премьера. "Они выбрали - Родину". [16+]
13.55 Д/ф "Римма Маркова. Душа нараспашку". [12+]
14.50 "Горячий лед". Т-Банк Кубок Первого канала по фигурному катанию 2025. Прямая трансляция.
17.05 "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 "Время".
21.35 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига. [16+]
23.55 Х/ф Премьера. "Шагни вперед". [18+]
2.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 Большие перемены.
14.30 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
20.50 Вести. Местное время.
21.00 Х/ф "Ты мой, я твоя". [16+]
0.35 Х/ф "Таксистка". [12+]
4.10 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 Доброе утро! [12+]
7.30, 19.00 Новости (на баш. яз.). [12+]
7.45 Мегаселo. [12+]
8.30 Аль-Фатиха. [6+]
9.00 Весело живём. [12+]
9.15 Ҡурай даны. [12+]
9.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
9.45 СВОих не бросаем. [12+]
10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]
10.30 Книга сказок. [6+]
10.45 Әкиәтсе. [6+]
11.00 Гора новостей. [6+]
11.15 Преград. Net. [6+]
11.30 Ат уйнатып. [12+]
12.00 Елкән. [6+]
12.30 Ете егет. [12+]
13.30 Башҡорттар. [12+]
14.00 Дарю песню. [12+]
16.15 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Динамо" (Минск). КХЛ.
19.30 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
20.15 Сәңгелдәк. [6+]
20.30 Байыҡ. [12+]
22.00, 6.00 Республика LIVE #дома. [12+]
22.30, 2.15 Новости недели (на баш. яз.). [12+]
23.15, 5.00 Караоке по-башкирски. [12+]
23.45 "Башҡорт йыры" представляет... [12+]
0.30 Концерт Юлая Касимова. [12+]
3.00 Спектакль "Посетитель". [12+]
4.30 Ҡурай-шоу. [12+]
5.30 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]

### 16 МАРТА
### ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Играй, гармонь любимая! [12+]
6.55 "Часовой". [12+]
7.25 "Здоровье". [16+]
8.30 "Золотая коллекция Союзмультфильма". [0+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 "Жизнь других". [12+]
11.05 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Д/ф "Против правил". К 90-летию со дня рождения Сергея Юрского". [12+]
13.10 "Видели видео?" [0+]
14.10 "Горячий лед". Т-Банк Кубок Первого канала по фигурному катанию 2025. Прямая трансляция.
16.40 Премьера. "30 лет вместе". "Игры разума". [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 "Три аккорда". Новый сезон. [16+]
21.00 "Время".
23.00 Т/с Премьера. "Территория". [18+]
0.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.25, 1.35 Х/ф "Другой берег". [16+]
7.20 "В кругу друзей".
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 Д/ф "Идеальный штурм". [12+]
12.55 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
14.30 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 "Аншлаг и Компания". [16+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
3.19 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 Доброе утро! [12+]
7.30 Новости (на баш. яз.). [12+]
7.45 Тормош. [12+]
8.15, 18.45 Легенды Урала. [12+]
8.30 Ҡустәнәс. [12+]
9.00 Весело живём. [12+]
9.15 Мама. [12+]
9.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]
10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]
10.30 Тирмәкәй. [6+]
10.45 Городок АЮЯ. [6+]
11.00 Гора новостей. [6+]
11.15 Сулпылар. [6+]
11.30 Зерно. [6+]
12.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]
12.30 Новости недели (на баш. яз.). [12+]
13.15, 4.45 Башкирские каникулы. [12+]
14.00 Дарю песню. [12+]
15.30 Дорога к храму. [6+]
16.00 Честно говоря. [12+]
16.45 Спектакль "Ак калфак". [12+]
18.00 Мегаселo. [12+]
19.15 Әлләсе... [12+]
20.00 Патриот РФ. [12+]
20.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]
20.30 Автограф. [12+]
21.00 Дознание. [16+]
21.30, 6.00 Новости недели (на рус. яз.). [12+]
22.15, 5.30 Республика LIVE #дома. [12+]
22.45 Концерт Зульфира Басырова. [12+]
0.45 Спектакль "Дурочка". [12+]
3.15 Колесо времени. [12+]
4.15 Моя планета - Башкортостан. [12+]

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1446 һижри йыл.*

| Март (Рамаҙан) | Сәхәрҙең ахырғы ваҡыты | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 10 (10) дүшәмбе | 5:44 | 6:02 | 7:45 | 13:30 | 17:10 | 19:10 | 20:52 |
| 11 (11) шишәмбе | 5:41 | 5:59 | 7:42 | 13:30 | 17:12 | 19:12 | 20:54 |
| 12 (12) шаршамбы | 5:39 | 5:57 | 7:40 | 13:30 | 17:14 | 19:14 | 20:56 |
| 13 (13) кесе йома | 5:36 | 5:54 | 7:37 | 13:30 | 17:15 | 19:16 | 20:59 |
| 14 (14) йома | 5:34 | 5:51 | 7:35 | 13:30 | 17:17 | 19:18 | 21:01 |
| 15 (15) шәмбе | 5:31 | 5:48 | 7:32 | 13:30 | 17:19 | 19:20 | 21:03 |
| 16 (16) йәкшәмбе | 5:29 | 5:45 | 7:30 | 13:30 | 17:20 | 19:22 | 21:06 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

ШАҒИРӘЛӘР ҺҮҘ АЛА

# БЕҘ ТӘБИҒӘТ МЕНӘН БЕР БӨТӨН,

## беҙ тел һаҡсыһы булған халыҡ араһында

(Башы 8-9-сы биттәрҙә).

**Иң мөһиме, һеҙҙең кеүек шәп ҡыҙҙарҙың милләт әсәләре булыуы. Был бурысығыҙҙы үтәгәнһегеҙ, тип әйтәбеҙҙер, шулаймы?**

**Гәлиә:** Милләт әсәһе тигәндә, иң тәүҙә үҙ туған телен белгән балалар үҫтереү, тәрбиәләү күҙ уңында тоталыр, моғайын. Был бурысым үтәлде: балаларым башҡорт телендә һөйләшә, уларға ла милли тойғо телебеҙ аша ла, йыр-моңдарыбыҙ аша ла, йолаһы рәүешебеҙ аша ла һалынған. Алдан нимәләр юрай алмайым, бары тик балаларым үҙ милләтебеҙҙән үҙ яртыларын табып, әләсәй булыу бәхетен татырға, балаҡайҙарымдың балаларын бағышырға яҙһын, тип теләйем үҙемә.

**Фирүзә:** Милләт әсәһе - ул бик юғары исем. Уға лайыҡ булыу өсөн ғүмер буйы милләтеңә хеҙмәт итергә, уны күтәрергә, ошо уҡ тойғоларҙы балаларыңа ла һеңдерергә кәрәк. Моғайын, был бурысты үтәгәнмендер, һаман да үтәйем тип әйтә алам.

**Айһылыу:** Милләт әсәһе тигәнде кем нисек аңлай бит әле. Был исемде ниндәйҙер конкурстар уҙғырып, уңлы-һуллы таратыуҙы мода итеп алдылар. Милләт әсәһе үҙ ғаиләһе, даирәһендә генә түгел, тотош оло донъяла бар яҡтан танылыу алған ҡатын-ҡыҙ, минеңсә. Был ҙур исемде йөрөтөү өсөн тотош милләтте әйҙәр, уға ҡыйын сағында күңелен имләр, тоғро һүҙ әйтер, күпселек араһында хаҡлы абруй яулар, сал аҡылға, рухи көскә, милләтеңде күтәрер, ҡурсыр сифатҡа эйә булырға кәрәк, минеңсә. Мин үҙемде был яуаплы һәм оло исемгә эйәмен, тип уйламайым. Милләтеңдән ҡыҙы була алһаң да шәп әле ул...

**Рита:** "Милләт әсәһе" минең өсөн бик юғары төшөнсә. Милләт әсәһе образында мин тормош һынауҙарын лайыҡлы үткән, лайыҡлы балалар үҫтереп, абруйлы әләсәй булған, рухи көсө, эшмәкәрлеге, бар тормошо менән йәмғиәттә оло ихтирамға лайыҡ апайҙарҙы, инәйҙәрҙе таныйым. Улар - минең әсәйемдең быуындаштары. Әсәй мәрхүмә булып киткәс, уның быуындаштары булған ҡатындарға, уларҙың яҙмыштары яҙылған йөҙҙәренә, рух көсөн сағылдырған ҡараштарына иғтибар итәм һәм һеҙ әйткән милләт әсәһен таныйым.

**МХО ла йөрөгән ир-егеттәрҙең әсәләренә, ҡатындарына әйтер һүҙегеҙ ниндәй булыр?**

**Фирүзә:** Улдарыбыҙҙың үҫкәнен күреү бәхете тәтемәне беҙгә. Шулай ҙа, әгәр улым булып, МХО-ға үҙ теләге менән китәм тиһә, мин ҡаршы булмаҫ инем. Улдарын, ирҙәрен яуға оҙатҡан әсәләргә, ҡатындарға оло рәхмәтемде әйтеп, улар алдында башымды эйәм. Һеҙ ысын ир-егет тәрбиәләгәнһегеҙ. Иҫән-имен генә әйләнеп ҡайтһындар инде батырҙарыбыҙ. Яуҙа вафат булған егеттәрҙең йәндәре йәннәттең түрендә булһын. Уларҙың яҡындарының ҡайғыларын уртаҡлашам, минең дә йөрәгем илай, әрней, һыҙлай. Бына әле генә хәрби хеҙмәткә китеп, Белгородта ил сиген һаҡлап батырҙарса һәләк булған йәш егетте ер ҡуйнына һалдыҡ. Егерме генә йәшлек һомғол, сибәр егет. Йән әрней, күҙҙәрҙән йәштәр аға ла аға. Ниһәл генә түҙә икән әсәһенең йөрәге? Ил башлыҡтары тиҙерәк үҙ-ара килешеп, илебеҙгә тыныслыҡ ҡайтһын ине. Илен яҡлап изге яуҙа башын һалғандарҙың йәндәре йәннәттә була тиҙәр. Ҡараңғы гүрҙәре яҡты, ауыр тупраҡтары еңел булһын шәһит булған улдарыбыҙҙың.

**Гәлиә:** Барыбыҙҙың да теләк бер төрлөләр ул: донъялар тиҙерәк тынысланһын, башҡа бындай мәхшәр ҡабатланмаһын, бер кемдең дә күҙ йәше түгелмәһен ине.

**Рита:** Ауыр һорау. Кисә генә ҡала китапханаһында яугирҙарҙың әсәләре, ҡатындары ҡатнашҡан сарала булдым, түңәрәк өҫтәлдә ҡапма-ҡаршы ултырып, әйткән һүҙҙәрен тыңланым, кисерештәрен уртаҡлаштым. Саранан ҡайтһам, үҙебеҙҙең туғаныбыҙҙың МХО-ла һәләк булыуы хаҡында ауыр хәбәр килеп етте. Һеҙ биргән һорауға яуап биреп, ниндәйҙер һүҙҙәр һөйләү ҙә артыҡ һымаҡ. Ҡәҙерле улдарын яуҙан көткән әсәләргә, яҡындарын көткән һәр кемгә һаулыҡ, рух ныҡлығы, сабырлыҡ теләйем. Ғәзиз кешеләрегеҙгә енеү менән иҫән-һау ҡайтырға яҙһын

**Айһылыу:** Минең атай яғынан өләсәйемдең Баязит атлы улы 18 йәшлек кенә сағында Бөйөк Ватан һуғышына алынған. Әлкәлә берике аҙна самаһы әҙерлек үтеп ятҡандар. Балаһының әле Өфө тирәһендәлеген нисектер ишеткән өләсәйем, уны бүтән күрә алмаҫын әсә йөрәге менән һиҙепме, Бөрйән һынлы Бөрйәндән (Мәһәҙей ауылынан) Стәрле аша Әлкәгә йәйәү юлланған. Күпселеген йәйәү, бәғзе мәлдә юлаусылар арбаһына эләгеп, оҙаҡ ҡына барған ул. Иң үкенеслеһе - өләсәй Әлкәгә кискә саҡ барып ауған, ә улғынаһын ошо көндө иртән һуғышҡа алып киткәндәр... Өләсәй ғүмер буйы көттө Баязит улын. Бер ваҡытта ла ҡайтырына өмөтөн өҙмәне. Хәбәрһеҙ юғалған, тигән хәбәр әсә һөйөүенә, физәҡәрлегенә кәртә була алмай - өләсәйем Баязит улының тешләмен (һуғышҡа киткәнендә бер һыныҡ икмәкте тешләтеп алып ҡалған була) һандығы төбөндә аҡ ҡулъяулыҡҡа төрөп һаҡланы. Уны иҫләмәгән көнө булманы. Баламдың исеме ерҙә ятып сереһәмһен, тип, атайымдың улына, кесе агайыма, Баязит исемен ҡуштыра. Мәһәҙейҙә хәҙер яугир Баязиттың исемен йөрөтөүсе биш бала атаһы Баязит Ғарифуллин йәшәп ята. Был хәтирәне иҫкә төшөрөүем - әсәләр фиҙакәрлегенә һәйкәл ҡуйырлыҡ, тигәнгә бер дәлил генә.

Ғәзиздәре МХО-ла йөрөгән әсәйҙәргә әйтер һүҙем - Аллаһы Тәғәлә һеҙҙе лә, йәнегеҙҙең яртыһы булған ҡәҙерле кешеләрегеҙҙе лә Үҙе генә һаҡлап йөрөтһөн! Тотош ил өҫтөнә төшкән һынауҙы Раббыбыҙҙың ярҙамы менән лайыҡлы үтергә насип итһен. Ир-егеттәр ғаиләләренә имен-һау, камил аҡылдарында, үҙ аяҡтарында, имандары ныҡынып әйләнеп ҡайтһын. Ғәзиздәрен юғалтҡандарға иһә Раббым Мәүләм сабырлыҡ бирһен. Уларҙы йыуатыр, күңелдәрен имләр һүҙҙе иң шәп ҡәләм әһеле лә таба алмаҫтыр. Сабырлыҡтан, иман байлығынан айырмаһын ғәзиз балаларын юғалтҡан әсәләрҙе.

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА ойошторҙо.**

ТАБИП КӘҢӘШЕ

# ЙӨРӘК СИРЕ "ЙӘШӘРӘ"



**Бөтөн донъя кимәлендәге үлем сәбәптәре араһында йөрәк-ҡан тамырҙары сире беренсе урында тора.**

Ҡасандыр был сир менән кеше ҡартайғас ҡына ауырый башлаһа, бөгөн ул 25 йәшкә тиклемгеләр араһындала бик йыш осрай. Быны сәбәптәре - тормоштоң үтә шәп тиҙлек алыуында һәм зыянлы ғәҙәттәр барлыҡҡа килеүендә. Күңелһеҙ эҙемтәләргә тарымаҫ өсөн Йәмәғәт һаулығы һәм медицина иҫкәртеүе республика үҙәге белгестәре сирҙең билдәләренә иғтибар итергә һәм улар барлыҡҡа килгән осраҡта табиб-кардиологҡа барырға кәңәш бирә. "Башҡортостан Республикаһында сәләмәтлек" телеграм-каналында тап быны ошо хаҡта һүҙ бара.

Хәүефле билдәләрҙең береһе - йөрәк тапҡырында ауыртыу, бигерәк тә әгәр ул һул яҡ ҡул йәки яурынға, муйынға йә аҫҡы яңаҡҡа биргән хәлдә.

Икенсе билдә - кеше тыныс булған хәлдә лә йөрәктең аҡрын йә йыш тибеше. Белгес менән мотлаҡ кәңәшләшеүҙе талап иткән тағы бер билдә - юғары ҡан баҫымы. Өлкән кеше өсөн нормаль күрһәткес - 140/90, ә инде ҡан баҫымы шунан юғарыраҡ икән, табибҡа күренегеҙ. Уға шулай уҡ бер ниндәй сәбәпһеҙҙән (мәҫәлән, тоҙло ризыҡ ҡулланыу-ҡулланмау), шешенеү менән яфаланыусылар ҙа барырға тейеш.

**Гөлфиә МӨХӘМӘТШИНА әҙерләне.**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**7 март "Йырланмаған йырым һин"** (В.Исхаҡов, А. Абушахманов), музыкаль мелодрама. 16+
**8 март "Еҙнәкәй"** (Х. Ибраһимов, И. Ҡаҙаҡбаев), музыкаль комедия. 12+
**9 март "Әҙләнем, бәгерем, һине"** (Т.Миңнуллин, А.Нәҙерғолов), мелодрама. 12+
**13 март "Ваня ағай"** (А.П.Чехов, С.Пектеев), провинциаль проза. 16+

### М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**7 март "Яҙмышымдың икенсе бүлеге"** (Н.Саймон, А.Наҙырғолов), трагикомедия. 16+
**8 март "Седина в бороду или невеста из Имеретии..."** (Б. Рацер, В. Константинов, М. Күлбаев), музыкаль комедия. 12+
**9 март "Три мушкетёра"** (А. Дюма, инсц. авторы А. Ганичев, М. Күлбаев), авантюр комедия. 12+
**11 март "Брат Чичиков"** (Н. Гоголь, М. Күлбаев), сатирик комедия. 12+
**12 март "Капитанская дочка"** (А. Пушкин, инсц. авторы В. Жеребцов, И. Сакаев). 12+
**13 март "Мөхәббәт һәм күгәрсендәр"** (В.Гуркин, М. Күлбаев), комедия. 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**7 март "Любовное приключение"** (В. Аношкин). 19:00. 18+
**8 март "Снеговик и солнышко"** (А. Малахов). 14:00. 0+
**"Аленький цветочек"** (С. Чураева). 12:00 һәм 15:00. 6+
**9 март "Терем-теремок"** (Д.Гараева, В.Щербакова). 12:00 һәм 15:00. 0+
**13 март "Коза-дереза"** (Н. Супонин). 16:00. 0+

### Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**7 март "Һин - яҙ, һин - мөхәббәт..."** Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнөнә арналған ҙур эстрада концерты. 12+
**12 март "Hard Rock Orchestra"** Курта Кобейнаның тыуған көнөнә арналған струналы оркестр концерты

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**7 март "Беҙҙән - һеҙгә!"** Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнө айҡанлы театрлаштырылған тамаша. 16+
**11 март "Голубцы"** (А.Финк), комедия. 16+
**12 март "Ханума"** (А.Цагарели), музыкаль комедия. 12+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**7 март "Әсәй, бына һиңә килен...дәр"** (И.Зайниев, А.Зарипов), комедия. 12+
**8 март "Мөхәббәт һәм күгәрсендәр"** (В.Гуркин, М. Күлбаев), комедия. 12+

### Сибай концерт-театр берекмәһе

**8 март "Кем һине шулай яратҡан?"** Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнө айҡанлы концерт. 12+
**10 март "Прыжок провинциала, или Монолог о Есенине"** (Г. Третьяк), шағирҙың тыуыуына 130 йыл айҡанлы әҙәби-музыкаль композиция. 12+
**12 март "Марилакс"** төркөмө концерты. 12+
**13 март** Эдуард Хөснөтдиновтың концерты. 12+

### БР Милли музейы

**7 март** Ротангтан кашпо үреү буйынса оҫталыҡ дәресе. 11:00. 12+
**8 март "Яҙғы комплимент"**, Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнө айҡанлы акция. 11:00 - 17:00. 12+
**12 март "Малахит кумта"**, "Музей шаршамбыһы" акцияһы сиктәрендә. 14:00. 5+

МӘҘӘНИ МАЙҘАН

# РӘЗИФӘ ДИНМӨХӘМӘТОВА САҠЫРА!

**Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры сәхнәһендә 21 мартта Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған артисы Рәзифә Динмөхәмәтованың күркәм юбилейы айҡанлы Салауат Әбүзәровтың пьесаһы буйынса ҡуйылған "Хыялый" лирик комедияһы (режиссеры - Арыҫлан Йәнбәков) күрһәтеләсәк. Актриса был спектаклдә ауылға табип булып эшкә килгән һылыу ҡыҙ - Йондоҙ ролендә сығыш яһай.**



Рәзифә Рәшит ҡыҙы Учалы районының Йәмле Сәфәр ауылында тыуып үҫкән. Уның сәхнәгә ынтылышы бәләкәй сағынан уҡ күҙгә була, бигерәк тә бейеү сәнғәтен үҙ итә һәләтле ҡыҙ. Ауылдарында бейеү түңәрәге асылғас, дәртләнеп шунда йөрөй башлай, башкөллө ижади мөхиткә сума. Барлыҡ район, ҡала һәм республика сараларында әүҙем ҡатнаша, художестволы үҙешмәкәрлек конкурстарында һәр саҡ беренсе урындар яулай. Сәхнәләрҙә сығыш яһау, төрлө кимәлдәге конкурс-фестивалдәрҙә ҡатнашыу - былар барыһы ла Рәзифә Динмөхәмәтованың артист булыу теләген көсәйтә генә. Сәнғәткә ғашиҡ ҡыҙ мәктәптән һуң Учалы музыка училищеһының хореография бүлегенә уҡырға инә, уны тамамлағас, баш ҡалаға юл тота - юғары белемгә эйә булыу теләге Рәзифә Рәшит ҡыҙын Өфө дәүләт сәнғәт институтының театр факультетына алып килә.

Ҡулына диплом алғас, йәш актриса ижад юлын Милли йәштәр театрында башлай, бер аҙҙан Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрына эшкә килә һәм бына инде егерме биш йыл ошо театрҙа арымай-талмай хеҙмәт итә. Ижади багажы бик тос уның. Киң диапазонлы актриса булараҡ, ул ҡатмарлы характерҙарҙы ла, көлкөлө образдарҙы ла берҙәй оҫта, ышандырырлыҡ итеп башҡара. Таланты менән генә түгел, үҙенә генә хас ихласлығы, онотолоп уйнауы менән тамашасыларҙы хайран ҡалдыра, уларҙың ысын һөйөүен яулай. Башҡорт академия драма театры сәхнәһендә Рәзифә Динмөхәмәтова иллегә яҡын роль ижад итә. Актриса барлыҡ образдарын да үҙенең йөрәге аша үткәреп, уларҙы тамашасы күңеленә мәңге уйылып ҡалырлыҡ итеп сәхнәгә сығара.

- Ижад иткән ролдәремдең һәр береһен яратам. Әммә шулай ҙа күңелемә иң яҡыны - Мостай Кәримдең "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" спектаклендәге Әсғәт образылыр, моғайын. Был роль менән мин ниндәйҙер кимәлдә рухи үҫеш кисерҙем, ул минән ысын актриса яһаны, тип әйтә алам. Театр сәнғәте белгестәре мине "травести актрисаһы" тип атай башланы, Мәскәүҙәге гастролдәр ваҡытында (сентябрь, 2004 йыл) сәнғәт фәне кандидаты Ольга Галахова етәкселегендәге Мәскәү тәнҡитселәре төркөмө лә образымды юғары баһаланы. Тағы ла "Ҡоҙаса"лағы Наза ролен билдәләп үткем килә. Театрыбыҙҙың иң популяр музыкаль комедияларының береһе булған "Ҡоҙаса" менән Төркиәгә, Ҡытайға барып, халҡыбыҙҙың ғөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын, матур костюмдарын күрһәтеп ҡайтыу бәхете тейҙе беҙгә. Шулай уҡ "Кәкүк ояһы"ндағы эпизодик ролемде - Мисс Флинды һаман һағынып иҫкә алам. Был психологик триллерҙа һәр персонажға ниндәйҙер миссия бирелгән кеүек ине. Спектаклдә талаптар юғары, унын үҙ сиктәре булды, актерҙарҙы ғына түгел, хатта тамашасыларҙы ла аҙағына тиклем көсөргәнештә тота ине. Классик образдарға килгәндә, "Бирнәһеҙ ҡыҙ"ҙағы Лариса ролен яратып уйнаным. Ғөмүмән, минең өсөн ролдең бәләкәйе, ҙуры юҡ. Ятраҡан эшем - ижад менән шөғөлләнәм һәм мин бик бәхетлемен, - ти ул.

Гөлназ ҒӘЛИЕВА,
театрҙың әҙәби-драматургия бүлеге мөхәррире.

# КЕМДӘР ЛАЙЫҠ?

**Өфөлә "Ҡурай даны" милли телепремияһын тапшырыу тантанаһы була. 13 мартта "Башҡортостан" дәүләт концерт залында заманыбыҙҙың төп геройҙарының исемдәре иғлан ителәсәк.**

Награда үҙ эшенең оҫталарына, һөнәрселәргә, аграрийҙарға, эшҡыуарҙарға, ижади лидерҙарға, шулай уҡ тегеЙәки был өлкәлә уңышҡа өлгәшкән ғаиләләргә тапшырылып килә. 2024 йыл дауамында БСТ һәм "Ҡурай-ТВ" телеканалдарында тамашасыларҙы дәғүәселәрҙең һәр береһе менән таныштырған тапшырыуҙар эфирға сыҡты. Башҡортостандың күренекле мәҙәниәт һәм сәнғәт эшмәкәрҙәренән торған эксперт комиссияһы аҫылташтар менән биҙәлгән "Ҡурай даны" көмөш миҙалы хужаларын һайлай. Байрамды башҡорт эстрадаһы йондоҙҙары Рәсүл Ҡарабулатов, Иҙел Нурғәлин, Айгөл Һағынбаева, Заһир Иҫәнсурин, "Рух" һәм "Бишбармаҡ" төркөмдәренең сығыштары биҙәйәсәк.

- "Ҡурай даны" милли телепремияһы 2018 йылда "Ҡурай-ТВ" йыр-моң телеканалы башланғысы менән булдырылды. Төп маҡсат - үҙ эшендә уңышҡа өлгәшкән замандаштарыбыҙҙы асыҡлау һәм башҡаларға танытыу, шулай уҡ башҡорт телен, мәҙәниәтен пропагандалау, һаҡлау, популярлаштырыу, халыҡ традицияларын, һөнәрҙәрен үҫтереү, - тип хәбәр итте телеканалдың баш мөхәррире Зилә Баймырҙина.

2024 йылда телепремияға 27 ҡатнашыусы - "Ҡурай" телеканалы тамашасылары тәҡдим иткән замандаштарыбыҙ күрһәтелде. Был юлы "Ҡурай даны" милли телепремияһы алты номинацияла уҙғарыла: "Ер кешеһе", "Ҡул оҫтаһы. Ҡатын-ҡыҙҙар", "Ҡул оҫтаһы. Ир-егеттәр", "Иң яҡшы ауыл фельдшеры", "Миһырбанлы ғаилә", "Иң яҡшы ауыл хакимиәте башлығы". 12+

# ӘЙҘӘГЕҘ...

**15 февралдә "Тамға" халыҡ-ара башҡорт милли кейеме оҫталары конкурсының беренсе, әҙерлек этабы башланды.**




Был этапта уҡытыу семинарҙары һәм оҫталыҡ класстары ойошторолдо. Саҡырылған ҡунаҡтар араһында тарих һәм этнография өлкәһендәге эксперттар, оҫта-реконструкторҙар бар, шулай уҡ уҙған йылдарҙа ҡатнашыусылар үҙ тәжрибәләре һәм белемдәре менән уртаҡлашты.

Халыҡ ижады үҙәгенең матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, быйыл конкурс биш номинация буйынса үткәреләсәк. Унда оҫталар, реконструкторҙар, костюмдар буйынса рәссамдар, дизайнерҙар, кейем тегеү ательеһы, профилле юғары уҡыу йорттарының студенттары саҡырыла. Ойоштороусылар - Башҡортостандың Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге һәм Милли музей.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АҪМАҒАН ҠАҘАНДЫ...

## йөҙө ҡара ҡатын көткән

Бала уңған ҡатындың бер ҡулын бәйләй, уңмаған ҡатындың ике ҡулын бәйләй.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Алыштырғыһыҙ булыу өсөн туҡтауһыҙ үҙгәреп торорға кәрәк.

**(Коко Шанель).**

Ҡатын-ҡыҙҙарҙың холҡо юҡ, тип әйтеп булмай, уларҙың көн дә бер холҡ.

**(Генрих Гейне).**

Вәғәҙәләргә һаран булма, ҡатын-ҡыҙҙы вәғәҙәләрҙән башҡа бер нимә лә шул тиклем ныҡ мауыҡтырмай.

**(Овидий).**

Көсһөҙлөктән яҙған ҡатын-ҡыҙ үҙенең бар ҡатын-ҡыҙ матурлығын юғалта.

**(Оноре де Бальзак).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Ике әхирәт кафеға сәй эсергә инә һәм береһе икенсеһенә шулай тип зарлана башлай: "Әсәйем туҡтауһыҙ телефондан шылтырата һәм эргәһенә килеүемде үтенә. Ҡайһы саҡта барам мин уның эргәһенә, ләкин ихлас һөйләшеү килеп сыҡмай. Уның менән тормошом, эшем, аралашҡан кешеләрем менән ҡыҙыҡһыныуы, үҙ-үҙен тотошо - береһе лә оҡшамай миңә, ҡыҙа башлайым, тупаҫ һүҙ ысҡындырам, әрләшеп китәбеҙ... Нисә барһаң да, бер үк хәл ҡабатлана. Ваҡытым да юҡ минең уның эргәһенә барырға..." "Беләһеңме, ә мин әсәйем эргәһенә бик йыш барам, - ти икенсе әхирәт. - Әсем бошһа ла, ниндәйҙер проблема килеп тыуһа ла, кәңәшләшергә кәрәк булғанда ла мин уның эргәһенә ашығам..." "Ысынлапмы? Ҡара әле, һин минән яҡшыраҡ булып сыҡтың түгелме?"- ти тәүге әхирәт. "Юҡ, мин дә һинең кеүек мен, - ти икенсе әхирәт күңелһеҙләнеп. - Мин бит әсәйем эргәһенә зыяратҡа йөрөйөм. Ул әхирәтҡә күсте. Тере сағында мин дә һинең кеүек инем, уның менән осрашыуҙарҙан ҡаса инем. Хәҙер бына ул саҡтарҙы бик тә һағынам. Әсәйем миңә бик тә кәрәк хәҙер, ләкин һуң шул инде. Шуның өсөн, тиҙерәк аҡылыңа кил һәм әсәйең янына ашыҡ, әхирәт. Ҡәҙерлә уны. Уның мыжыҡлыҡтарын түгел, ә лайыҡлы яҡтарын ғына күрергә тырыш. Әсәйеңдең һинең өсөн иң ҡәҙерле кеше икәнен аңлар өсөн уның зыяратҡа күсеүен көтмә. Бына хәҙер мин әсәйем өсөн бер ни ҙә эшләй алмайым. Бынан минең күңелем тағы ла нығыраҡ яралана. Ул яра ғүмерҙә лә уңалмаҫ кеүек..." Әхирәтенең был һабағы башынан сыҡмай ҡатындың. Ул эшкә барғас, секретарына телефондан бераҙ менән дә тоташтырмаҫҡа, әсәһенең шылтыратыуына ғына яуап бирергә ҡуша. Бөгөнгө көндө тик әсәһенә бағышларға ҡарар итә ул..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 25009

Баш мөхәррир:
Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.
Мөхәрририәт:
Рәсүл БАЙГИЛДИН, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: kiskeufa@mail.ru
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында басылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, БР, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99
Матбуғат таратыу 252-39-99

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 6 март 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44 телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – ПР905

Тиражы - 2857
Заказ - 445